✓ ***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға онотманығыҙмы? Онотоп ҡалһағыҙ ҙа һуң түгел: ошо көндәрҙә яҙылһағыҙ, баҫманы февралдән алдыра алаһығыҙ. Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек!***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№51 (521)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Паспортында милләтең юҡ,**



ә ул мәғлүмәт йөҙөндә сағыламы?

3,6

**Һөнәргә лә...**

дауаханаға ла тоғролар



5

**Конституция нимә ул?**

Ул - власть менән йәмғиәт араһындағы килешеү



8-9

**"Ер кешеләре, уянығыҙ:**

үҙгәрештәр заманы килә!"



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *2013 йыл республикабыҙҙа Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Һәр кемдең мотлаҡ бурысы булған изге гәмәлде үтәүҙә үҙ өлөшөгөҙҙө нимәлә күрәһегеҙ?*

***Әләм ШӘРИПОВ, биология фәндәре кандидаты, "Шүлгән-Таш" дәүләт ҡурсаулығы хеҙмәткәре:*** Кеше үҙенең тәбиғәттән тыуғанын бер миҙгелгә лә онотորға тейеш түгел, уға һәр кемебеҙ, образлы итеп әйткәндә, "һеҙ" тип кенә өндәшергә, байлыҡтарын уның үҙенән рөхсәт һорап ҡына тотонорға бурыслыбыҙ. Был уйлап сығарылған нәмә түгел, борон-борондан халҡыбыҙҙа тәбиғәткә изге затҡа ҡараған кеүек ихтирамлы, һаҡсыл мөнәсәбәт йәшәп килгән: уның байлыҡтары кәрәк кимәлдә генә, тукланыу, йәшәү ихтыяждарына етерлек күләмдә генә тотонолған. Ана шул элекке менән хәҙерге мөнәсәбәтте сағыштырып ҡараһаң, бөгөнгө вәхшилек айырыуса күҙгә ныҡ ташлана: тәбиғәт аяуһыҙ ҡырыла, ҡырҡыла, ҡалған ғына байлыҡтары урлана, һатыла, тәләфләнә, үртәлә... Бындай ҡырағайҙарса аяуһыҙлыҡты әлдә күтәрә әле ул. Хәйер, үҙенең ҡылғандары өсөн яуап көнөн, язаһын, ауыр гонаһын күптән үҙ иңендә татый инде кешелек, тик һаман булһа аңлап етә алмай, ахыры: тәүбәгә ҡайтыу юҡ. Ҡомһоҙлоҡ, тупһыҙлыҡтың сиге юҡ: кемдәрҙеңдер нәфсеһе хатта ки әүлиәләр һөйәген һаҡлаған изге тауҙарҙы йоторлоҡ дәрәжәгә етте бит. Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип йыл һайын иғлан итһәң дә хатта артыҡ булмаҫ ине, минеңсә. Шунһыҙ, үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа үҙебеҙ балта сабыу хәүефен аңларлыҡ дәрәжәгә етмәгән әле күбебеҙ. Ә бына яуап көнө килеп етеп тора. Туҡтауһыҙ Ер йөҙөнә ябырылған тәбиғи катаклизмдарҙы, ғәрәсәт-ҡойондарҙы, һыу баҫыуҙарҙы башҡаса нисек ҡабул итергә? Кешелеккә күптән инде үҙ аҡылына килергә ваҡыт. Беҙ һәр ерҙә тәбиғәт һөйөүселәрҙең йәмәғәтселек хәрәкәттәрен булдырырға, улар эшмәкәрлеген ситтән күҙәтергә түгел, ә был хәрәкәткә бөтәбеҙ бер булып ҡушылырға, һәр яҡлап хупларға, йәнләндерергә тейешбеҙ, тигән фекерҙәмен. Йыл иғлан ителеүе - бер эш, ә бына йыл буйына (дөрөҫөрәге, ғүмер буйына) тирә-яҡ мөхитебеҙҙе һаҡлауҙы даими контролдә тотоп, ошо йүнәлештәге сараларҙы камиллаштырыуға сығымдарҙы йәлләмәй эшкә тотонһаҡ ҡына маҡсатҡа ирешәсәкбеҙ, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХЫЯЛЛАНЫРҒА! КӨРӘШЕРГӘ!

## Һәм еңергә!

**Был тиктән-юҡ яҙылған һүҙҙәр түгел. Уны 2013 йылдың 26 февраленән 3 мартына тиклем үтәсәк VI Халыҡ-ара балалар уйындарының девизы тиергә лә мөмкин. Сөнки был сара ысын мәғәнәһендә Олимпиадаға трамплин булып тора. Өфө ҡала округы хакимиәтендә уҙған сираттағы матбуғат конференцияһы тап ошо мөһим ваҡиғаға арналды һәм унда белдерелеүенсә, быға тиклемге уйындарҙа ҡатнашыусыларҙан алты кеше бөгөн Олимпия уйындарының иң юғары баҫҡысына күтәрелгән.**



Хәниф Сөнәғәтуллин фотоһы.

Ғөмүмән, был ярыштарҙың тарихы уҙған быуаттың 1968 йылына барып тоташа. Ул ваҡытта Словенияның Селье ҡалаһында физик культура буйынса инструктор Метод Клеменс инициативаһы буйынса беренсе Халыҡ-ара балалар уйындары уҙғарыла. Шунан алып 46 - йәйге, 5 ҡышҡы уйындар үткән. Уларҙа барлыҡ ҡитғаларҙың 74 иленең 332 ҡалаһынан 32 меңдән ашыу бала ҡатнаша.

Өфөгә иһә 22 илдең 62 ҡалаһынан меңдән ашыу спортсының килеүе көтөлә. Аныҡлап әйткәндә, баш ҡала Канаданан, Литванан, Швейцариянан, Ҡаҙағстандан, Венгриянан, АҠШ-тан, Германиянан, Австриянан, Словениянан, Украинанан, Көньяҡ Кореянан, Белоруссиянан, Нидерландтарҙан, Грециянан, Австралиянан, Ҡытайҙан, Италиянан, Монголиянан, Эстониянан һ.б. илдәрҙән ҡунаҡтар ҡаршыларға әҙерләнә. Рәсәйҙән 31 ҡала ҡатнашһа, шуларҙың дүртеһе (Күмертау, Стәрлетамаҡ, Учалы һәм Өфө) - Башҡортостандан.

Ярыштар баш ҡаланың дүрт эре спорт объектында: "Олимпик-парк" тау саңғыһы комплексында (тау саңғыһы спорты һәм сноубординг), "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында (спорт ориентиры һәм саңғыла йүгереү), "Өфө-Арена" боҙ һарайында (хоккей), Спорт һарайында (фигуралы шыуыу һәм шорт-трек) үтәсәк.

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

БАШ ЙОРТТА...



# ТЫҒЫНДАН НИСЕК ҠОТОЛОРҒА?

**Өфөбөҙ ҙур, урау-урау юлдары күп, ә шулай ҙа иртән тороп, эшкә барырға сыҡһаң, ғәжәпкә ҡалаһың: бөтә юлдар ҙа "Спорт" туҡталышына илтә. Ҡәҙерле минуттарҙы юғалтып, пассажирҙарҙы уҡыуға, эшкә һуңлатыусы гигант тығындан яңы трасса асыу ҙа, юлдарҙы иркенәйтеү ҙә, башҡа ниндәйҙер саралар ҙа ҡотҡара алмай. Был өлкәлә белгес булмаһам да , үҙемде күптән борсоған бер фекер-тәҡдимем менән уртаҡлашырға йөрьәт итәм.**

Мәғлүм булыуынса, "Спорт" туҡталышына Сипайлово йүнәлешенән бик тығыҙ транспорт ағымы килә. Тейешле иҫәп-хисаптар эшләп, ниңә һуң әле ошо тимер ташҡынының бер өлөшөн Комсомол урамына һәм бына тигән иркен Салауат проспектына бороп ебәрмәҫкә? Салауат проспектын ниңә төҙөнөләр һуң әле улай булғас? Ҡасан ҡараһаң да, ундағы трассаның иркенлеген, бушлығын күреп, хайран ҡалаһың. Бик булмаһа, Салауат проспектынан тиҙ йөрөшлө (экспресс) маршруттар асылһын ине. Иманым камил, ул маршрутта йөрөүсе транспорт Өфөнөң юғары уҡыу йорттары тупланған үҙәккә - З.Вәлиди, Ленин, К.Маркс урамдарына тиклем ҡымшанмай ултырып барыусы студент халҡы менән тулы буласаҡ, сөнки кис улар Сипайловоға йоҡларға ҡайта ла ( тап ошо биҫтәлә бүлмә, фатир яллап йәшәүсе йәштәр күп), иртә таң менән тағы уҡыу йортона - үҙәккә юллана. Шуға күрә, нигеҙҙә уҡыусы йәштәр йөрөгән транспорт төрҙәрен әлеге тығынға килтереп терәтеүҙең мәғәнәһе юҡ, минеңсә, сөнки улар араһында проспектта төшөп ҡалыусылар юҡ.

Ә инде "Галле округы" туҡталышындағы автотранспорт һәм педагогия колледждары студенттары өсөн Комсомол урамынан йөрөү бигерәк тә ҡулай. Тиҙ йөрөшлө маршрут, тигәндән, тәғәйен билдәләнгән графигын боҙмай ғына, улар, исмаһам, иртәнге һәм киске тығын сәғәттәрҙә булһа ла йөрөтөлһә, юл хәлдәре күпкә еңеләләшер ине, бәлки.

Ә шулай ҙа Өфө урамдарында тығындарға ҡаршы сараларҙы иң тәүҙә чиновниктарҙың аңын "тығындар - ҡотолғоһоҙ стихиялы бәлә" тигән уйҙан арындырыуҙан башларға кәрәктер, тигән фекерҙәмен, сөнки тап ана шундай мөнәсәбәт арҡаһында улар уйларға ла, проблеманы хәл итеү юлдарын эҙләргә лә теләмәй: "Спорт" туҡталышы буйынса бынан ун-ун биш йыл элек торған "йөк" һаман да урынында, уны ҡуҙғатырға ынтылыш һиҙелмәй. Әлбиттә, проблема етди - ана, Мәскәү тығындары хаҡында ниндәй генә легендалар ишетергә тура килмәй! Ләкин Өфө - ул бит, үкенескәме, бәхеткәме, Мәскәү түгел. Бәләкәйерәк ҡалаларҙың проблемаларын хәл итеүгә сығымдар ҙа аҙыраҡ китә, уның ҡарауы, файҙаһы ҙур булыр ине.

Баш ҡалабыҙҙа ғына түгел, ғөмүмән, тотош ил буйынса юл-транспорт ситуацияһы өсөн борсолмаған кеше юҡтыр, ләкин бындай хәл нилектәндер фәҡәт йәйәүлеләрҙең генә хәсрәт һәм хәстәрлектәре булып ҡалыуын дауам итә , ә руль артындағыларға, әйтерһең дә, был ҡағылмай: уларҙың күпселеге юлдарҙа ниндәй дыуамаллыҡ һәм алабарманлыҡ күрһәтә - шулай йөрөүен дауам итә. Йәйәүлегә үҙен уларҙан аралау өсөн сара бер генә, минеңсә: транспорт хәрәкәте көслө урындарҙа тыйыусы юл билдәләрен, светофорҙарҙы күберәк ҡуйыу. Ул ғына ла түгел, әлеге хәүефле урындарҙа иртәле-кисле булһа ла юл-транспорт хәрәкәтен көйләп, ситуацияны контролдә тотоусы патруль хеҙмәткәрҙәре постарын булдырыу кәрәк.

**Фәйрүзә ИШБИРҘИНА,**
**хеҙмәт ветераны.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *2013 йыл республикабыҙҙа Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Һәр кемдең мотлаҡ бурысы булған изге ғәмәлде үтәүҙә үҙ өлөшөгөҙҙө нимәлә күрәһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Йомадил ӘҮБӘКИРОВ, Әбйәлил районы Амангилде урта мәктәбе директоры, биология һәм география уҡытыусыһы:*** Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә бөгөнгө экологик хәлебеҙгә бик төплө һәм дөрөҫ баһа бирелде. Президент сығышында тирә-яҡ мөхитте һаҡлау мәсьәләһе көн тәртибендә беренсе сиратта торған кисектергеһеҙ бурыстар рәтендә ҡаралды. "Кешеләрҙең, айырыуса йәштәрҙең, экологик мәҙәниәтен күтәреү мөһим" тигән юлдарҙы мин тура-нан-тура үҙемә төбәлгән кеүек ҡабул иттем. Бик дөрөҫ тотоп алынған: йәштәр араһында, үкенескә күрә, тәбиғәткә, үҙҙәре йәшәгән әйләнә-тирә мөхиткә бөтөнләй "һаңғыраүҙар", битарафтар бик күп. Эште үҙебеҙҙән башларға кәрәк, сөнки кешенең һәр йәһәттән тәрбиәле шәхес булып формалашыуы иң тәүҙә ғаиләгә һәм мәктәпкә бәйле. Балала тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәт йорто алдындағы баҡсанан, мәктәп яны тәжрибә участкаһынан башлана, тип әйтер инем мин. Шөкөр, мәктәбебеҙ баҡсаһында йәшелсә-емеш күкрәп үҫә, балалар унда үҙ ҡулдары менән сәсеп, үҫентеләргә һыу һибеп, ҡыйын утап, тәрбиәләп еткергән мул уңышын йыя, үҫтергән емешен тирә - тимәк, бындай балаларҙан кеше сығасаҡ. Тағы ла мәктәбебеҙ балалары яҙлы-көҙлө тирә-яҡты ҡыйҙан таҙартыу буйынса экологик өмәләргә сыға, Ҡоштар көнө үткәреүҙә ҡатнашып, үҙ ҡулдары менән сыйырсыҡ ояһы, тағараҡ эшләп элә, тимәк, ул балаларҙа өмөт бар: улар үҙҙәре йәшәгән Ер шарын, тыуған ерен, тәбиғәтен өҙөлөп һөйәсәк. Тағы ла шуныһы яҡшы: беҙҙең яҡтарҙа хәҙер элекке һымаҡ сүп-сарҙы ҡайҙа етте, шунда түгеү ғәҙәте юҡ, күпселек ауылдарҙа бының өсөн махсус урындар тәғәйенләнеп, кәртәләп алынған. Мөрәжәғәтнамәлә әйтелеүенсә, бындай эштәрҙе урындарҙағы муниципалитеттар еренә еткереп ойошторорға бурыслы. Йортоң, мәктәбең янында ағас ултыртыу һәйбәт , әлбиттә, ләкин был ғына аҙҙыр, тип уйлайым. Элегерәк урындарҙағы урман хужалыҡтары ағасы ҡырҡылған диләнкәләрҙә йәш ҡарағайҙар ултыртыуҙы ойоштора, был эшкә мәктәп уҡыусыларын да йәлеп итә ине. Хәҙер был эш туҡтап ҡалды. Уны тергеҙеү фарыздыр, моғайын. Юҡһа, урмандар бөтөүгә табан бара, йылғаларыбыҙ тауыҡ кисеп сығырлыҡ булып һайыға...

***Фәиз ХАРРАСОВ, "Йәншишмә" гәзите хеҙмәткәре:*** Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау - иң тәүҙә уны бысратмауҙа, минеңсә. Дөрөҫ, хәҙер элекке һымаҡ (яҡшымы был, насармы) торбалары борлап, гөрләп эшләп торған завод-фабрикалар юҡ, уның ҡарауы, шул саҡтарҙа бөтөн ғәйепте уларға япһара торған булһаҡ, хәҙер бер-беребеҙҙән уҙҙырып, үҙебеҙ бысратабыҙ йәшәгән төйәгебеҙҙе. Ышанмаһағыҙ, яуған ҡарға ҡарағыҙ, айырыуса ҡалалағына. Элек беҙ, "ҡыҙыл ҡар яуғас", тип хәбәр һөйләй инек, ҡыҙыл урынына хәҙер ҡара ҡарлы ҡыштарға "һоҡланырға" тура килмәһенме! Ҡала һауаһын тимер ташҡын булып урам ҡаплаған машиналар бысрата бөгөн. Хәйер, кешеләр ҙә техниканан бер ҙә ҡалышмай: ана, бер егет менән ҡыҙ, һыраһын төп күтәрә бушатҡас, шешәләрен вайымһыҙ ғына юл ситенә ырғытып китте. Ә бына "тетрапак"тан һут һемергән ейәнен етәкләп, өлкән генә ҡатын килә. Бушаған һауытты ергә ташлағанын күреп, оләсәһе ейәнен ҡапты эйелеп алырға һәм яҡында ғына торған сүп һауытына илтеп һалырға мәжбүр итте һәм малайға оҙаҡ ҡына нотоҡ уҡыны. Башҡаса был бала насар ғәҙәтен ҡабатламаясаҡ, тип инандым мин был осраҡлы күренештән сығып. Эйе, бөтә нәмә үҙебеҙгә бәйле. Мин дә шул саҡ әле яңыраҡ ҡына университетта уҡып йөрөгәндә, урамдағы һәр курсҡа бүлеп бирелгән участкаға сығып, таҙартыу өмәләрендә ҡатнашҡан мәлдәребеҙҙе йылы тойғолар менән иҫемә төшөрҙөм. Ҙур һәм яҡшы эштәрҙең бына ошондай бәләкәй генә булһа ла ыңғай миҫалдарҙан башланыуын иҫтә тотайыҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ТУҠТА, МӘЛ!

# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН...



Ҡырмыҫҡалы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге Башҡортостандың рәсми делегацияһы эш сәфәре менән Корея Республикаһының баш ҡалаһы Сеулда булды. Рөстәм Хәмитов Инчхон халыҡ-ара аэропорты етәкселеге менән осрашты һәм донъяла иң ҙурҙарҙан һаналған аэровокзал комплексы эшмәкәрлеге менән танышты. Осрашыу барышында һүҙ Өфөлә яңы халыҡ-ара терминал төҙөү тураһында барҙы. Samsung Electronics офисында халыҡ-ара корпорацияның Башҡортостан менән хеҙмәттәшлек итеү мөмкинлектәре тикшерелде.

✓Башҡортостанда Президент шыршыһында ҡатнашасаҡ яҡынса 800 бала өсөн "Ҡыш Бабайҙың Яңы йыл спорт уйындары" исемле театрлаштырылған тамаша әҙерләнгән. Сара Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында 21 декабрҙә үтә. Әлеге тема осраҡлы һайланмаған. 26 декабрҙә республика баш ҡалаһында йәштәр командалары араһында хоккей буйынса донъя чемпионаты старт ала, ә февралдә ҡала йәнә бер ҙур сараны - VI Халыҡ-ара балалар уйындарын ҡабул итәсәк. Изгелек һәм яуызлыҡ тураһындағы был тамашаны балаларға Башҡорт драма театры һәм Милли йәштәр театры актерҙары тәҡдим итәсәк.

✓Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәдис Сәлимгәрәев БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын хеҙмәттәргә хаҡтар буйынса мәғлүмәт менән таныштырҙы. Уның һүҙҙәренсә, 2013 йылдың тәүге ярты йыллығында тарифтар күтәрелмәйәсәк. Хаҡтар артыу 2013 йылдың 1 июленән көтөлә. Йылылыҡ энергияһына уртаса республика буйынса тарифтар - 12,1 процентҡа, һыу менән тәьмин итеү, уны ағыҙыу һәм таҙартыу хеҙмәттәренә хаҡтар - 6,8 процентҡа, электр энергияһына тарифтар 11,9 процентҡа артасаҡ. Газ менән тәьмин итеүгә тарифтарҙың 15 процентҡа артыуы көтөлә.

✓Башҡортостанда эш хаҡының үҫеш темптары уртаса Рәсәй кимәленән юғарыраҡ. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2012 йылдың туғыҙ айында уртаса айлыҡ эш хаҡы 14,7 процентҡа артып (Рәсәй буйынса был күрһәткес14,4 процентҡа тиң), 19600 һум тәшкил иткән. Ағымдағы йылдың 1 октябренән тариф ставкалары 11 процентҡа артҡан. Шул уҡ ваҡытта эш хаҡы кимәле буйынса Башҡортостан элеккесә уртаса Рәсәй кимәленән яҡынса 24 процентҡа артта ҡала.

УЯН, УЙЛАН, КЕШЕ!

# ПАСПОРТЫНДА МИЛЛӘТЕҢ ЮҠ,

## ә ул мәғлүмәт йөҙөңдә сағыламы?



*"Иҫтәренә төшәр. Иҫкә төшәрөү - иман килтергән кешеләргә файҙа! ("Әҙ-Җәриәт" сүрәһе).*

**Кеше исеменең йәненә тәьҫире, тормошона шауҡымы тураһында төрлө фекерҙәр һәм фараздар ишетелеп тора. Тимәк, йәмғиәттә милләттең киләсәге тураһында борсолоу бар. Был хәл уйландыра һәм ҡыуандыра. Ул турала бик төплө һәм фәһемле итеп "Киске Өфө"лә лә яҙыла килә. Башҡаларҙың фекерҙәрен ишетеп, шәжәрәләрҙәге төрлө быуын исемдәре менән танышып, уйланып, тағы ла берике һүҙ әйтергә булдым.**

### Үҙ телендә һөйләшмәһә…

Беҙ ят кеше менән осрашҡанда тәүҙә уның йөҙөнә ҡарап, тәүге мәғлүмәт алабыҙ һәм, автоматик рәүештә (төпкө аң кимәлендә) уға үҙебеҙҙең ҡарашты һиҙемләйбеҙ, исем-фамилияһын белгәс, ҡайһы халыҡтан икәнен төҫмөрләйбеҙ, һөйләшкән телен ишетеп, ниндәй милләттән булыуы тураһында һығымта яһайбыҙ һәм, шунан һуң ғына, аңлы рәүештә уға үҙ мөнәсәбәтебеҙҙе билдәләйбеҙ. Тимәк, кешегә үҙ ҡарашыңды булдырыу, уның менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡороу өсөн уның кем булыуын белеү мотлаҡ, йәғни, йөҙөн күреү, исемен белеү һәм һөйләшкән телен ишетеү зарур. Йәшерен-батырыны юҡ, кешене милләтенә ҡарап айырыу, баһалау борон да булған, хәҙер ҙә бар. Элегерәк кешенең милләте метрикаһында, паспортында яҙыла ине, бөгөн яҙылмай. Бөгөнгө халыҡтар араһында барған ҡатнаш никахтар һөҙөмтәһендәге ассимиляция арҡаһында йөҙгә ҡарап ҡына милләтте айырыу икеле. Үҙ телендә һөйләшмәһә, исем-фамилияһынан айырып булмаһа, уның йөҙөнә, ҡиәфәтенә генә ҡарап мөнәсәбәт ҡороу тоғро ла, гәҙел дә түгелдер, ләкин башҡаса ҡалайтаһың?

Ғәмәлдә исем менән тел ҡала. Исеме үҙ халҡына хас булмаһа, туған телен белмәгән кешенең, үҙе әйтмәһә, милләтен дә белеп булмай әле. Ул кеше милләтен ата-әсәһенең кем булыуына ҡарап белә ала, ләкин үҙен милләтенең бер вәкиле итеп таныймы? Икеле, сөнки уны тыумыштан ят исем ҡушып, әсә телендә һөйләшеүҙән мәхрүм итеп, милләтенән яҙҙырғандар... Шәжәрәләрҙә хәҙерге Элина, Карина, Сабина, Регина, Миленаларҙың ҡартәсәй, өләсәйҙәре Әминә, Кәримә, Сәлимә, Рәғиҙә, Мәҙинәләр... Артур, Тимур, Данилдарҙың ҡартатайҙары Арыҫлан, Тимерйән, Динислам һ.б. Уларҙың мосолман балалары икәнен әлегә фамилияһы, аталарының исеменән төҫмөрләп була. Ә, мәҫәлән, Данилдың балалары Борис Данилович йә Милена Даниловна булһа, кем икәнен ҡайҙан беләһең? Шул исем Данилов тигән фамилияға әйләнеп китһә?

### Ҡәрҙәштәр бер-береһенә ылыға

Быларҙы тәфсирләп яҙыуымдың ғиләһе шул - беҙҙең быуынға тиклем беҙ үҙ ҡәрҙәштәребеҙҙе исем-шәрифтәренән еңел таныныҡ. Сит ерҙә йөрөгәндә лә үҙебеҙгә хас, таныш исем ишетһәк, ниндәйҙер яҡын тойғолар уянды, был ят мөхиттә лә беҙ яңғыҙ түгел һәм, кәрәк булһа, ышаныр кешебеҙ бар икәнен тойоу, яттар араһында ла ҡаушап ҡалмаҫҡа ярҙам итте. Мәҫәлән, Ырымбур өлкәһендә армияла хеҙмәт иткән саҡта мосолман халыҡтарының балалары - үзбәк, ҡырғыҙ, татар, төркмән, ҡаҙаҡ һалдаттары - минә ылыҡтылар, мосолман офицеры янында хеҙмәт итергә тырыштылар. Мин уларҙың баш тартмаһын өсөн, үҙ-ара ярышып, хеҙмәт бурыстарын еренә еткереп атҡарҙылар. Үҙ халыҡтарының вәкиле булмаһам да, мосолман мосолманды ҡыйырһытмаҫ, йәберләтмәҫ, яҡшы мөнәсәбәттә булыр, тип ышандылар. Мин дә уларҙы үҙ туғандарым кеүек күреп, яҡланым, һаҡланым, кәрәк булһа, ярҙам иттем.

Армиянан һуң Стәрлетамаҡта заводҡа эшкә төшкәс, бүлек етәксеһе хеҙмәткәрҙәр менән таныштыра башланы. "Гел урыҫтар икән", тип борсолоборак торғанда, Насибов Фәхретдин тигән исемде ишетеп, йөрәгем йылынып китте. Артҡы рәттә ултырғандар араһынан эҙләп табып ҡараһам, башҡорт, татарға оҡшамаған кеүек, ләкин барыбер үҙендеке - мосолман! Исем-шәрифтәре шулай тип таныта. Тәүге тәнәфестә үк уның янына барып, үҙемсә һаулыҡ һораштым. Ул үҙенсә яуап бирҙе. Әзербайжан егете икән. Ул бер йылдан тыуған иленә ҡайтып китте, ләкин шул арала яҡшылап танышып, дуҫлашып, бер-беребеҙгә терәк булдыҡ. Мин уға ныҡыраҡ терәк һәм кәрәк булғанмындыр, сөнки беҙ танышҡас, ул үҙен был сит ерҙә, яттар араһында ҡыйыуыраҡ, ышаныслыраҡ һиҙә башлауын әйтте. Ышаныслы, итәғәтле егет ине, ләкин уны ҡаланыҡылар үҙ күреп яҡынлатманылар. Ул мәлдәрҙә әле күптәр үҙҙәрен мосолман итеп һиҙеү, таныу түгел, уйларға ла оялалар ине. Бер йыл арауығында мин Фәхретдинде башҡортсаға, ул мине әзербайжанса әҙ-мәҙ һупаларға өйрәтте. Ул минә "агай" тип өндәшә алыуына ҡыуанһа, мин уны үҙҙәренсә "мәшәди" (дуҫ) тип шатландырҙым. Был миҫалдарым менән мин хәҙер беҙ балаларыбыҙҙы бер-береһен таныуҙан, танып белеүҙән, белеп, үҙ мосолманына арҡалана, ышана алыуҙан, бер-береһенең туғанлыҡ, берҙәмлеген тойоп йәшәүҙән мәхрүм итәбеҙ, тип әйтмәксемен.

### Ят исемдәр менән…

Үкенесле, ләкин йәмғиәтебеҙҙә урынлашҡан ялған ҡараш, хатта яһалма "ҡағиҙә" буйынса, ҡайһы бер ата-әсәләр аңлаһалар ҙа, заманса кеше булып күренергә тырышыпмы, балаларына халҡыбыҙға бөтөнләй ят, мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушалар. Улар кемде алдарға тырышаларҙыр - үҙҙәренме, йәмғиәттеме? Был вайымһыҙлыҡтан шул ят исемдәр менән йәшәргә мәжбүр булған балалар күберәк зыян күрәләр, билләһи... Бәлки, бөгөн уларға бер-береһен таныу кәрәкмәйҙер? Бәлки, башҡа сәбәптәр барҙыр? Мәҫәлән, ҡыҙҙарға заманса исем ҡушыуҙың бер ниндәй ҙә зыяны юҡ, сөнки уларҙың исемдәре шәжәрәләрҙә дауам итмәй, тип яҙып, элегерәк мин дә яңылышҡанмын. "Матур" исемле ҡыҙҙарға яраҡлаштырырға тырышыптыр һәм "иҫке" исемдәрен йәштәр, барыбер, үҙҙәренсәгә әйләндерәләр, тигән һылтау менән дә ҡайһы бер ата-әсәләр улдарына "заманса" исем ҡушалар. Шул арҡала башҡорт исемдәре ҡушаматтарға әйләнә бара. Замандың яһалма модаһына ярайбыҙ тип, "Шарик"тарға әйләнеп бөтмәһәк ярай ҙа ул...

(Дауамы 6-сы биттә).

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## ИМАНҒА ЛА...

### һаулыҡҡа ла һөжүм

**Студент саҡта ишеткән бер көләмәс иҫтән сыҡмай. Леонид Брежнев менән Зыя Нуриев Ҡыҙыл майҙан аша үтеп баралар икән. Ҡаршыларына осраған халыҡ гел генә Зыя Нуриев менән иҫәнләшеп уҙа, ти, ә Леонид Брежневҡа өндәшеүсе юҡ икән. "Зыя Нуриевич, мин КПСС-тың беренсе секретаре, мине халыҡ танымай, ә Һеҙҙе таный", - тип аптырай, ти Леонид Брежнев. Быға яуап итеп, Зыя Нуриев: "Былар бит минең яҡташтарым, Мәскәүгә Башҡортостанда етештерелгән бал, ҡуйыртылған һөт, ит ризыҡтары алырға килгәндәр", - тиған.**

Әлеге ваҡытта, әлбиттә, беҙ Мәскәүгә аҙыҡ-түлек һатып алырға йөрөмәйбеҙ, ә баш ҡаланан һәм сит илдәрҙән килтерелгән сәйер сифатлы ризыҡтар менән мөрхәтһенәбеҙ. Ошо урында тағы бер көләмәс иҫкә төшә. Башҡорт әбейе менән бабайы урыҫ ыҙнаҡумдарына ҡунаҡҡа барған, ти. Өй эсенә таралған сусҡа ите еҫен тойоп, әбей менән бабай алдарына ҡуйылған һыйға ҡағылмай ғына ултыралар икән, ти. Быны күреп, хужабикә: "Кушайте, кушайте!" - тип ҡыҫтай башлаған. "Кушайте" һүҙе әбейгә "Кош ите" тип ишетелгән һәм ул бабайына: "Кош ите, ти бит, әйҙә, ашайыҡ һуң улай ҡыҫтағас..." - тигән булған. Шулай итеп, улар сусҡа ите менән һыйланып, гонаһҡа батып ҡайтып киткән. Әле лә магазиндарҙағы аҙыҡ-түлек ҡаптарындағы ваҡ ҡына итеп яҙылған хәрефтәрҙе уҡый алмайынса, был ризыҡтарҙың ниндәй сығышлы, ниндәй сифатлы, кем етештергәнен дә белмәй һатып алабыҙ, былайтып, гонаһҡа ла батабыҙҙыр, һаулыҡты ла ҡаҡшатабыҙҙыр инде, тим.

**Хәйер, хәҙер беҙҙең иманбыҙға һәм һаулығыбыҙға зыян иткән тәьҫирҙәр әйләнә-тирә тулы инде ул. Шуға бәйле, тағы бер өр-яңы көләмәс. Ҡатыны кухнянан иренә: "Кәҙерлем, нимә тынып ҡына ултыраһың унда?" - тип һорай. Ире: "Телевизор ҡарайым", - тип яуап биргәс, ҡатыны: "Ҡара, ҡара, тик тоҡандыра күрмә инде. Кисә төнө буйы, Американы һыу баҫа, тип һаташып сыҡтың", - тигән. Балалар миңә лә 75 канал күрһәткән телевизор бүләк итте. Мин дә өйөмдөң иң түрендә ултырған телевизорға ҡарап-ҡарап ҡына ҡуям, әммә тоҡандырырға ҡурҡам. Донъянан артта ҡалһам, ҡалырмын, һаулығым, нервыларым мөһимерәк әле, тим.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда үткән ял көндәрендә Яңы йыл алды ауыл хужалығы йәрминкәләрендә 330 тоннанан ашыу ит, 35 тонна ҡош ите һәм 6,7 тонна бал һатылды. Йәрминкәләр республиканың 11 ҡалаһында, шул иҫәптән Өфөлә үтте. Мәҫәлән, Өфөлә бындай 12 йәрминкә үткәрелде. Ауыл хужалығы йәрминкәләрендә йәмғеһе 82,8 миллион һумға продукция һатылды. Һыйыр итенең килограмы уртаса - 180-270 һум, сусҡа ите - 150-230 һум, һарыҡ ите - 190-290 һум, йылҡы ите 200-280 һум тәшкил итте. Ҡаҙ итенең килограмы йәрминкәләрҙә 250-350 һумға, өйрәк ите - 130-300 һумға, тауыҡ ите - 65-280 һумға һатылды. Балдың килоһы 220-400 һумға тәҡдим ителде. Ҡышҡы йәрминкәләр республикала һәр ял көнө һайын 30 декабргә тиклем үткәреләсәк.

✓Быйылғы уҡыу йылында Башҡортостандың уҡыу йорттарында 153 мең студент уҡый. Студенттарҙың 90 проценты самаһы, йәғни 136,5 мең кеше Башҡортостандың дәүләт вуздарында, ә 16,5 мең кеше коммерция уҡыу йорттарында уҡый. Быйылғы уҡыу йылында был вуздарға уҡырға ингәндә бер урынға дүрт абитуриент дәғүә иткән. Беҙҙең вуздарҙа 70 йүнәлеш һәм 227 специальность буйынса уҡытыла. Рейтинг буйынса һаман да иҡтисад һәм юридик профилдәр, артабан мәғлүмәт технологиялары һәм энергетика йүнәлеше килә. Республикала башлыса Рәсәй кешеләре -99,4 процент, бер меңләп сит ил студенттары уҡый. Сит илдән килеп уҡыусылар араһында күпселекте ҡаҙаҡтар, төркмәндәр, шулай уҡ Вьетнам, Ҡытай, Йемен, Һиндостан, Ангола йәштәре тәшкил итә.

✓Мәҙәниәт өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу мөһим мәсьәлә булып тора. "Беҙҙең алда 2018 йылға уларҙың хеҙмәт хаҡын иҡтисад буйынса уртаса кимәлгә еткереү, йәғни биш йыл эсендә уны икеләтә арттырыу бурысы тора, - тине Башҡортостан Президенты йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһендә. -Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен торлаҡ менән тәьмин итеү йәһәтенән дә эшләйәсәкбеҙ". Рөстәм Хәмитов мәҙәниәт учреждениеларының матди базаһын нығытыу, биналарҙы ремонтлау кәрәклеген билдәләне. Байтаҡ аҡса "Нефтсе" мәҙәниәт һарайын, Конгресс-холды, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрын заманса йыһазландырыуға йүнәлтеләсәк. Нестеров исемендәге музей комплексын реконструкциялау, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының яңы бинаһын проектлау һәм төҙөү планлаштырыла.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЙӘ ПЕНСИЯ, ЙӘ ЭШ ХАҠЫ

**Хаҡлы ялда булып та эшләп йөрөүсе һәм 100 меңдән күберәк эш хаҡы алыусыларҙы пенсияһыҙ ҡалдырмаҡсылар. Хөкүмәт ҡарауына яңы реформа проекты йыл аҙағына тиклем индереләсәк.**

Бөгөнгө көндә пенсия күләме граждандың эш хаҡынан һәм эш биреүсенең Пенсия фондына күсергән взностарынан сығып билдәләнә. Әлегә тиклем пенсия тәғәйенләүҙә эш стажы бөтөнләй тиерлек иҫәпкә алынмай ине, йәғни пенсия алыу өсөн кешегә дөйөм 5 йыл эш стажы ғына кәрәк ине. Яңы пенсия реформаһы иһә был ваҡытты 30 йылға тиклем оҙайтасаҡ. Пенсия билдәләүҙең аныҡ формулаһы килһә ярты йыл эсендә нигеҙләнәсәк.

Шулай уҡ Хөкүмәт хаҡлы ялда булып та эшләп йөрөүселәргә ҡарата "йә пенсия, йә эш хаҡы" принцибын ҡулланырға иҫәп тота. Вице-премьер Ольга Голодец белдереүенсә, 100 меңдән күберәк эш хаҡы алып эшләп йөрөүсе хаҡлы ялда булыусыларға пенсия түләмәү күҙаллана.

# УРЫҪ ТЕЛЕН БЕЛЕҮ МОТЛАҠ

**Бөтә мигранттарҙан да урыҫ телен белеүҙе талап итәсәктәр. Әлегә был ҡағиҙә бары тик ваҡлап һатыу, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә эшләүсе сит ил граждандарына ғына ҡағыла, ләкин 2015 йылдан Рәсәйгә эшкә килеүселәрҙең барыһына ла мотлаҡ булыуы бар.**

1 декабрҙән ваҡлап һатыу, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә эшләүселәр урыҫ телен яҡшы белеүе хаҡында сертификатҡа эйә булырға тейеш. Бының өсөн улар махсуслашҡан үҙәктәрҙә тест һорауҙарына яуап бирә. Әлеге ваҡытта илдә ошондай 160-тан ашыу үҙәк эшләй. Урыҫ теле дәүләт теле булып һаналған Көньяҡ Осетия һәм Беларусь граждандарына был процедураны үтеү мотлаҡ түгел. Дәүләт Думаһы депутаты Григорий Балыхин фекеренсә, урыҫ телен яҡшы белеү сит ил мигранттарына үҙ хоҡуҡтарын яҡлауҙа ҙур ярҙам буласаҡ.

Шулай уҡ илдә әлегә тиклем мигранттарға Рәсәйҙә адаптация үтергә ярҙам итеүсе үҙәк юҡ. Федераль миграция хеҙмәте етәксеһе Константин Ромодановский Дәүләт Думаһы депутаттарына был мәсьәләне күҙ уңында тотҡан эшсе төркөм төҙөү хаҡындағы тәҡдим менән мөрәжәғәт итте.

# ӨФӨ - УҢАЙЛЫЛАР ИСЕМЛЕГЕНДӘ

**Өфө Рәсәйҙең иң яҡшы ун ҡалаһы исемлегенә ингән. Инженерҙар баш ҡаланы йәшәү һәм эшләү өсөн уңайлы тип тапты.**

Рәсәй инженерҙар союзы, халҡы 100 меңдән ашыу булған 164 ҡаланың йәшәү һәм эшләү шарттарын тикшереп, рейтинг төҙөгән. Өфө был исемлектә абруйлы унынсы урынды биләй. Тикшереү барышында төп иғтибар ҡалаларҙың социаль, иҡтисади һәм инженерлыҡ аспекттарына бирелгән. Рейтинг төҙөүселәр ҡалаларҙы халыҡтың динамикаһы күрһәткесенән, мәктәп һәм дауаханалар һанынан, эш хаҡы күләменән һәм башҡа төрлө күрһәткестәрҙән сығып баһалаған.

Ә йәшәү өсөн иң уңайлы ҡалалар тип Мәскәү һәм Санкт-Петербург табылған. Шулай уҡ был исемлеккә Новосибирск, Екатеринбург, Дондағы Ростов, Ҡаҙан, Краснодар, Воронеж һәм Красноярск ҡалалары ингән. Улар барыһы ла исемлектә Өфөнән алдараҡ тора, әммә Башҡортостандың баш ҡалаһы, үҙ сиратында, Силәбе, Омск, Волгоград, Түбәнге Новгород, Пермь һәм Һамар кеүек миллионлы ҡалаларҙы уҙып киткән. Рейтингты Хасавюрт, Рубцовск һәм Новошахтинск ҡалалары ослап ҡуя.

Сәлимә Арыҫланова әҙерләне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХОСУСИЛАШТЫРЫУ...

## тере организм кеүек

**Ысынлап та, ҡулыңа хыялыңдағы ҡағыҙҙы - ниндәйҙер объекттың йәки фатирыңдың тап һинеке икәнлеген раҫлаған документты алғанға тиклем билдәле бер схема буйынса үтергә, билдәле процедураларҙы башҡарырға кәрәк. Быны өсөн кәм тигәндә ике ай ваҡыт үтә. Тап шунан һуң инде бығa тиклем бары тик ниндәйҙер объект ҡына булып тойолған бина һинең тормошоңа тулыһынса килеп инә - яҡын да, ҡәҙерле лә, тап һинеке генә...**

Ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы матбуғат конференцияһында хакимиәт башлығы урынбаҫары - муниципаль милек менән идара итеү буйынса комитет рәйесе Азамат Сәғитов муниципаль милекте хосусилаштырыуҙың фаразланған планының үтәлеше менән таныштырғанда тап шундай картина күҙ алдына баҫты. Әлеге ваҡытта муниципаль милекте хосусилаштырыу 178-се һәм 159-сы Федераль закондарға ярашлы тормошҡа ашырыла. Уларҙың айырмаһы шунда: 159-сы закон буйынса әлегәсә ниндәйҙер майҙанды ҡуртымға алып, үҙ эшмәкәрлеген йәйелдергән эшҡыуар ошо майҙанды йәки бинаны һатып алыу тураһында үҙе телә білдереп ғариза яҙа ала. Ә инде 178-се закон буйынса Комитет бинаны, майҙанды үҙе һайлап аукционға сығара.

2011-2012 йылға хосусилаштырыуҙың фаразланған пландарына индерелгән 139 объект һатылған. Был бюджетҡа 1 миллиардтан ашыу аҡса ингән, тигәнде аңлата. Шул иҫәптән быйылға планлаштырылған план буйынса дөйөм суммаһы 620,3 миллион һум тәшкил иткән 95 муниципаль объект хосусилаштырылған. Бюджетҡа 117,5 миллион һум аҡса ингән (Бында шуны ла аңлатып китеү фарыз: 159-сы Федераль закон буйынса эшҡыуар майҙан суммаһының 10 процентын түләй, ә ҡалған өлөшөн инде 7 йыл дауамында бюджетҡа индерергә тейеш. Шуға күрә һатыу суммаһы ҙур булһа ла, бюджетҡа йылына килем өлөшләтә генә инә). 1 декабргә Өфө ҡалаһы бюджетына муниципаль милектән (һатыу-хосусилаштырыу, ҡуртымға биреү) дөйөм алғанда 724 миллион һум ингән. Ҡуртымға килгәндә инде, ҡала округы хакимиәте сауҙаға ғына түгел, шәхси балалар баҡсаларын, шәхси мәктәптәрҙе, шәхси дауалау учреждениеларын һ.б. (барлығы ете йүнәлеш) үҫтереүгә йөҙ борҙо һәм был эш менән шөғөлләнергә теләүселәр өсөн дә ҡуртымға биналар бирелә.

Азамат Тәлғәт улы әйтеүенсә, ҡуртымға алыуға ғына түгел, хосусилаштырыу буйынса ла һәр бина өсөн ысын мәғәнәһендә көрәш бара. Бөгөн 159-сы закон буйынса бер квадрат метр майҙандың баҙар хаҡы 38 мең самаһы тәшкил итһә, 178-се закон буйынса ул 55-56 меңгә барып баҫа. Тағы шуны ла әйтеп китеү кәрәк: 159-сы закон буйынса бөгөнгә яҡынса 450 эшҡыуар сауҙа майҙандарын һатып алһа, тағы ла 200 самаһы эшҡыуарҙың ғаризаһы бар. Әгәр 2013 йылдың 1 июленән был ҡанун ғәмәлдә булыуын туҡтатһа, эшҡыуарҙарға ашығырға кәрәк. Шулай уҡ фатирҙарын хосусилаштырырға теләүселәргә лә иркенләп йөрөргә ваҡыт ҡалмай - 1 марттан торлаҡты бушлай хосусилаштырыу тамамлана. Ә әлеге ваҡытҡа баш ҡала халҡының 15 проценты торлаҡтарын хосусилаштырмаған.

"Әлбиттә, аукциондар беҙҙә, кинолар ҙа күрһәтелгәнсә, мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы, нәҙәкәтле ханымдар һәм фрактарҙағы ирҙәр йәмғиәтендә бармай. Ҡайһы саҡта ул ялҡытҡыс булып китә. Ләкин үҙ күҙҙәрегеҙ менән күрергә теләһәгеҙ, аҙнаның һәр йомаһы асыҡ лоттар уҙарыла һәм унда ҡатнашырға мөмкин, - тип бер аҙ аукцион процесына ла туҡталып китте Азамат Сәғитов. - Һуңғы аукциондарҙың береһендә ҙур майҙанлы магазин бинаһы өсөн һатыулашыу сәғәткә яҡын барҙы. Хатта һатып алыусы яңғыҙы ғына ҡалғас та, шул тиклем ҡомарға бирелде, үҙенә-үҙе хаҡтарҙы арттыра башланы. Ә беҙҙең, комиссия ағзаларының, уны туҡтатырға хаҡыбыҙ юҡ. Шулай итеп, был бина ҡуртым хаҡын айына 300 мең түләү шарты менән бирелде. Ләкин ундай ҙур суммалар хафаландыра. Сөнки тормошта шундай шаяртыу йәшәй: әгәр ир-ат уңышлы өйләнә икән, тимәк, тағы бер яҡшы ғаилә барлыҡҡа килә. Әгәр уңышһыҙ никах икән, йәмғиәт тағы бер философҡа арта. Шуның кеүек, аукционда ысынбарлыҡҡа тап килгән суммалар менән эш итһәләр, тимәк, тағы ла бер уңышлы лот үтте, тиергә мөмкин. Ә инде ҙур суммалар өҫтөнлөк иткәндә беҙҙең өсөн тағы ла бер суд эше арта..."

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

АФАРИН!

# "УРАЛ БАТЫР"ЫБЫҘ...

## ун ике телдә яңғыраны

**Ошо көндәрҙә Башҡортостанда йәшәүсе төрлө милләт вәкилдәре телдәрендә, шулай уҡ халыҡ-ара аралашыу телдәрендә халҡыбыҙҙың мәшһүр "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү конкурсы үтте. "ЮНЕСКО"ның Башҡортостан Республикаһы комитеты, БР Мәғариф министрлығы һәм Башҡортостан социаль технологиялар институты тарафынан ойошторолған был конкурс инде 3-сө тапҡыр уҙғарыла. Ул быйыл илебеҙҙең төрлө төбәктәренән йыйылған 70 мәктәп уҡыусыһын һәм юғары уҡыу йорттары студенттарын үҙенә йыйҙы. Эпосыбыҙ башҡорт халыҡ көйҙәре оҙатыуында 12 телдә яңғыраны, сәхнәләштереүҙәр ҙә, күргәҙмәләр ҙә булды.**

Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары, ниндәй генә конкурс үтмәһен, әҙерлек кимәле буйынса һәр ваҡыт башҡа ҡатнашыусыларҙан бер башҡа юғарыраҡ тора. Был юлы ла улар үҙҙәрен сәхнәлә иркен тотоуҙары өсөн махсус номинацияға лайыҡ булды. Тәнәфестә гимназияла 9-сы класта уҡыусы Әминә Әлибаева исемле ҡыҙ менән таныштыҡ. Ул эпостың төп нөсхәһен тулыһынса ятлап алған, шулай уҡ уны 7 телдә һөйләп иштерә ала. Был юлы ул жюри алдында биш телдә сығыш яһаны һәм

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң балалар белем биреү учреждениеларында Яңы йыл кисәләренә әҙерлек бара. Быйыл улар 20 декабрҙә башланып, 28-енә тиклем дауам итәсәк. Байрам сараларында урта һәм башланғыс кластарҙа белем алған 80 мең уҡыусы ҡатнашасаҡ. 30 меңдән ашыу бала өҫтәмә белем биреү учреждениеларының Яңы йыл кисәләренә саҡырылған. Баш ҡаланың мәҙәниәт үҙәктәренә 44 меңдән ашыу бала барасаҡ, уларҙа театрлаштырылған тамашалар ойоштороу ҡаралған. Өлкән класс уҡыусылары бал-маскарад, карнавал һәм дискотекаларҙа ҡатнашасаҡ. Балалар баҡсаларында Яңы йыл байрамдары 45 мең сабый өсөн ойоштороласаҡ. Бынан тыш, декабрь дауамында белем биреү учреждениеларында төрлө конкурстар үткәреү, Ҡыш Бабайҙың оҫтаханаларын ойоштороу планлаштырыла.

✓Өфөлә Яңы йыл алдынан 154 шыршы баҙары ойоштороласаҡ. Халыҡ араһында ҙур һорау менән ҡулланылған ылыҫлы ағас - аҡ шыршы - быйыл 600-800 һумға һатыласаҡ. Урамдарҙа ойоштороласаҡ шыршы баҙарҙарынан тыш, Яңы йыл ағастары ғәҙәти баҙар һәм сауҙа комплекстары биләмәләрендә һатыласаҡ. Шулай уҡ урман һыныуҡайҙарын ҡышҡы ауыл хужалығы йәрминкәләрендә һайлап алып була. Улар Өфөлә һәр ял көнө һайын 30 декабргә тиклем үткәрелә.

✓Өфөлә шәмбе, 22 декабрҙә, 9-13 сәғәттәрҙә ҡан тапшырыу буйынса "Яңы йыл геройы көнө" исемле хәйриә акцияһы үтә. Сараны ойоштороусылар булып "Юғалтыуҙар юҡ" ("Потерь нет") хәйриә фонды, "Уфанет" компанияһы һәм UTV телеканалы менән берлектә Республика ҡан тапшырыу станцияһы сығыш яһай. Ҡан тапшырырға теләгән һәр кеше Өфө ҡалаһы, Батыр урамы, 41/1 адресы буйынса урынлашҡан Республика ҡан тапшырыу станцияһына килергә тейеш.

✓2013 йылдан башлап ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәре ойошмалар килеменә һалымдан азат ителә. РФ Һалым кодексына тейешле үҙгәрештәрҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин индерҙе. Әлеге норма 2013 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә.

✓Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендә Европала иң ҙур һаналған күсмә аквакомплекс - Мәскәү күсмә дельфинарийы асылды. Ул мартҡа тиклем эшләйәсәк.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ҺӨНӘРГӘ ЛӘ...

## дауаханаға ла тоғролар

**Өфөнөң 21-се ҡала клиник больницаһы ошо көндәрҙә үҙ эшмәкәрлеген башлап ебәреүгә 30 йыл тулыуҙы тантаналы рәүештә билдәләне.**

Киң профилле был дауалау учреждениеһы ҡала статусында ғына булһа ла, бында барыбер бөтөн республиканан килеп дауалана ауырыуҙар. Дауахананың эшмәкәрлеген бер аҙ күҙ алдына килтереү өсөн унда эшләгән 21 клиник бүлексәнең исемдәрен генә атап сығыу ҙа етәлер. Һәр бер дауаханала була торған ғәҙәттәге бүлексәләрҙән тыш, бында махсуслаштырылған микрохирургия, проктология, гастроэнтерология, пульмонология, нефрология кеүек үҙәктәр эшләй. Ә бына бит- яңаҡ һөйәге хирургияһы, аллергология һәм киҫкен ағыуланыуҙарҙы дауалау үҙәктәре Өфөлә генә түгел, ә бөтөн Башҡортостанда берҙән-бер үҙәктәр. Ҡасандыр журналистар уникаль операциялар эшләнеүенә һоҡланып, репортаждар яҙған микрохирургия бүлексәһенең һәр эш көнө - легенда. Өҙөлгән ҡул-аяҡ, бармаҡтар, ҡул суҡтарының ҡан тамырҙарын, нервы епсәләрен микроскоп аша тоташтырып, ювелирҙарса кире ялғап, күпме кешенең ағзалары теүәллеген һаҡлап ҡала алды оҫта хирургтар! Ә травматология бүлексәһенә илдең ҡайһы мөйөштәренән генә килеп дауаланмайҙар!

"Эшһөйәр, эшсән больница был" тигәйне тантанала һүҙ алып һөйләүсе бөрәү үҙенең ҡотлау телмәрендә. Был сифатын больница ҡалабыҙға, еребеҙгә килгән ике ҡот осҡос афәт мәлдәрендә ҡаһарман хеҙмәте менән раҫланы. 1989 йылда Оло Тәләк янындағы тимер юл ҡыйралышында ҡаза күргәндәргә медицина ярҙамы күрһәтеүҙә ойошҡанлыҡ һәм һөнәри оҫталыҡ өлгөһө менән айырылып торһа, "Химпром" һәм "Синтезспирт" предприятиеларында булған (торбаларҙан килгән һыуҙың фенол менән зарарланыуы) һәләкәт эҙемтәләрен бөтөрөүҙә һәм зыян күреүселәргә ярҙам итеүҙә хеҙмәт өлөшө ҙур булды. Төрлө йылдарҙа был дауалау ҡаласығына етәксelek иткән баш табиптарҙың исем-шәрифтәрен теҙеп сығыу ғына ла күпте һөйләйәсәк. Заманында бында Әмир Шамаев, Риза Мағазов, Мәжит Ишимов, Ринат Богданов, Мөхәмәт Алсынбаев, Нәзир Хафизов баш табиптар булып эшләй һәм больницаның ҡеүәтен үҫтереүгә күп көс һала.

Был дауахананың башҡа дауалау учрежденииеларынан айырылып торған тағы бер үҙенсәлеге - уның һоҡланғыс ғаилә династиялары. Бында оҙаҡ йылдар буйы тотош ғаиләләре менән эшләгән табиптар бик күп: Һиҙиәтовтар, Ишимовтар, Богдановтар,Сакаевтар, Собханғоловтар, Фәйзуллиндар, Хафизовтар, Сәхәүетдиновтар, Тимербулатовтар, Заһиҙуллиндар, Фәрхетдиновтар, Лопатиндар һәм башҡа бик күптәр. Был, әлбиттә, кадрҙар тотороҡлолого тураһында ғына түгел, ә табиптарҙың үҙ һөнәренә, эшләгән урынына тоғролого хаҡында ла һөйләй.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

"Урал батыр" эпосын күп телдәрҙә башҡарғаны өсөн" номинацияһына лайыҡ булды. "Балаларҙы ошондай конкурстарға әҙерләгәндә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының рухи тәрбиәһе үҙен нык һиҙҙерә һәм сит телдәрҙе өйрәнеүгә бик нык ярҙам итә", тине. Ысынлап та, эпосты туған телендә ятлай алған бала уны башҡа телдә еңелерәк иҫендә ҡалдыра икәнен билдәләй күптәр. Ҡайһы бер ҡатнашыусылар әйтеүенсә, элегерәк инглиз телен бик уҡ яҡшы аңламаған булһалар, эпосты инглиз телендә ятлай-ятлай, был телдәге белемдәре лә бермә-бер артҡан. Ләйсән Ғәле ҡыҙы әйтеүенсә, бөгөнгө киң мәғлүмәт саралары өҫтөнлөк иткән заманда инглиз, немец һәм француз телендәге сығыштарҙы видеоға төшөрөп, уларҙы ниндәй һөҙөмтәгә килтереүе лә, ин уңышлыларын интернеттағы YouTube.com сайтына һалғанда ла булыр ине: "Бөтә донъялағы иң билдәле видеолар сайтын сит илдәрҙә лә ҡарай алырҙар ине", - тине йәш белгес. Уның һүҙҙәрен ҡеүәтләп, 11 синыф уҡыусыһы Юнир Намаҙбаев та, был идеяны тормошҡа ашырырға мөмкин, тип йөнләнеп китте. Улар, бер төркөм уҡыусылар, күптән түгел Мостай Кәрим ижады буйынса видеоролик төшөрөп, интернетҡа урынлаштырғандар ҙа инде.

Конкурс барышында дүрт секция эшләне. Инглиз, немец, француз телдәре һәм Башҡортостанда йәшәүсе төрлө милләт вәкилдәре телдәрендә һөйләүселәр бүлектәре. Бүлектәр бер үк ваҡытта эшләгәнгә күрә, беҙгә үҙебеҙ өсөн ҡыҙыҡлы тип тапҡан һуңғы бүлектең эше менән генә хушһынырға тура килде. Аудиторияла төрлө йәштәге балалар һәм үҫмерҙәр йыйылған, шулай уҡ уларҙың ата-әсәләре һәм уҡытыусылары ла килгән. Кемдәрҙер башҡорт милли кейемендә, кемдәрҙер үҙ халҡының милли кейемендә сығыш яһай. Һәр халыҡ вәкиле башҡорт эпосын һөйләгәндә үҙ халҡына ғына хас булған бейеү хәрәкәттәрен дә күрһәтте. Шуға күрә, башҡорт эпосы һәр сығышта төрлөсә һынландырылды. Шул уҡ ваҡытта, ниндәй генә телдә: әрмән, әзербайжан, татар, төрөк, сыуаш, мари, ҡаҙаҡ, рус телдәрендә яңғырамаһын, ул башҡорт эпосы булыуҙан туҡтаманы.

Күптән түгел Төркиәнән атаһы менән күсеп килгән, баш ҡаланың 20-се башҡорт гимназияһында уҡыған 9 синыф уҡыусыһы Мәрүә Ялчын исемле ҡыҙ менән танышттыҡ. Башҡортостанға күсеп килеүенә бер йыл ығына ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, ҡыҙыҡайҙың башҡорт халҡының иң төп рухи хазинаһы - "Урал батыр" эпосын уҡып сығыу ғына түгел, уның бер өлөшөн ятлап, республика конкурсында ҡатнашырға батырсылыҡ итеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХЫЯЛЛАНЫРҒА! КӨРӘШЕРГӘ!

## Һәм еңергә!

**(Аҙағы. Башы 1-се биттә).**

Саралар бюджеттан тыш аҡса иҫәбенән финанслана, йәғни төп бағыусы - "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәте сығымдарҙы үҙ өҫтөнә ала, шулай уҡ республиканың Сауҙа-сәнәғәт палатаһы, ҡайһы бер ойошма-предприятиелары ла үҙ өлөшөн индерә.

Ярыштарҙа ҡатнашыусыларҙың йәш күләме сикле: 12-15 йәш. Шуға ла уларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү - төп бурыстарҙың береһе булып тора. Уйындарҙың барышында 500 полиция хеҙмәткәре, шулай уҡ спорт объекттарының эсендә һаҡ хеҙмәттәре вәкилдәре тәртип һағында торасаҡ.

Йәш спортсылар, нигеҙҙә, "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһына урынлаштырыласаҡ (700 кеше). Шулай уҡ баш ҡаланың юғары кимәлдә хеҙмәтләндереүсе ҡунаҡханалары ла ҡунаҡтарҙы ҡабул итәсәк. Уларҙы ярыштар урындарына алып барыу өсөн транспорт маршруттары билдәләнгән, ял ваҡыттарында автобустар балаларҙы экскурсияларға йөрөтәсәк. Ғөмүмән, балалар ярышып ҡына ҡалмаясаҡ, ҡала менән танышасаҡ, мәҙәни сараларҙа ҡатнашасаҡ. Бынан тыш, Өфө ҡала округы хакимиәте Халыҡ-ара балалар уйындарына спорт сарайы тип кенә ҡарамай. Сөнки һәр делегация составында мэр йәки вице-мэр дәрәжәһендәге вазифалы ҡунаҡтар ҙа киләсәк. Тимәк, баш ҡала улар менән яңы эшлекле һәм сәйәси бәйләнештәр булдырыу, булғандарын нығытыу, яңы хеҙмәттәшлеккә офоктар асыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

Әйткәндәй, Рәсәй тарихында Өфө Халыҡ-ара балалар уйындарын тәүге ҡабул итеүсе булараҡ та тарихта урын аласаҡ. Шулай уҡ Башҡортостан сараның флагын донъяның иң бейек нөктәләренә мендереп ҡаҙау традицияһына ла нигеҙ һалды - быйыл йәйгеһен билдәле сәйәхәтсе һәм яҙыусы Камил Йыһаншин Уйындар флагын Арарат тауы башына мендереп ҡаҙаһа, ноябрҙә Олимпия уйындарының тыуған иле булған Грецияның Олимп тауы башында ла флаг елберләне. Сер итеп кенә әйткәндә, Башҡортостандың серле лә, бөйөк тә тауҙарының береһе булған Ирәмәл башына флагты Өфө ҡала мэры Ирек Ялалов етәкселегендәге команда мендереп ҡаҙаған. Ә инде уйындарҙы асҡанда башҡорт ерендә тағы бер традицияға башланғыс һалынасаҡ - донъяның иң бейек нөктәләрендә елберҙәгән флагтың аналогы флагштокта тантаналы шарттарҙа күтәреләсәк. Ә бының нисек тормошҡа ашырылырына сара асылған ваҡытта үҙегеҙ шаһит булырһығыҙ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Простата биҙе аденомаһы

Прополис төнәтмәһе түбәндәгесә әҙерләнә: 100 грамм прополисты ҡырып, 0,75-,8 лиртлы ҡара төҫтәге быяла шешәгә һалырға һәм 7 процентлы этил спирты өҫтәргә, спирт прополистан 2-3 см-ға өҫкәрәк сығып торһон. 7 тәүлек ҡараңғы урында тоторға, шунан һауыт тулғансы 70 процентлы спирт ҡойорға, ваҡыты менән болғатып тороп, тағы 3 аҙна торорға. Һуңынан төнәтмәнең шыйыҡ өлөшөн икенсе һауытҡа ҡойоп алып, яҡшылап ябып ҡуйырға. Кисен ҙур булмаған һуған һәм 1-2 һарымһаҡ теше ашарға. Дауаны 10 көн дауам итергә. Был көндәрҙә простата биҙенә массаж эшләү кәнәш ителә. Ике аҙна ял иткәндән һуң, курстың әсенсе өлөшөнә күсергә.

**3-сө курс.** Икенсе курстағы кеүек, һоло менән ҡайын бөрөһө, гөлйемеш төнәтмәләре әҙерләргә. Әммә был юлы тәүге ҡатнашмаға өҫтәй торған үләндәр башҡасараҡ була. Һоло һәм ҡайын бөрөһө һалынған кәстрүлдә талғын утҡа ҡуйып, ҡапҡасын ябырға һәм ҡайнап сыҡҡас, 15 минут ҡайнатырға. Һуңынан 3-әр ҡалаҡ бүсер үләне (грыжник голый) йәки ҡыркаяҡ үләне (мокрица), ҡурай еләге һәм сәтләүек ағасы япраҡтары; 2-шәр ҡалаҡ ала миләүшә (фиалка трехцветная), кәкүк сәскәһе (кукушкин цвет), һары мәтрүшкә, сәнскәк, шайтан таяғы (татарник) япрағы; 1 ҡалаҡ талҡан емеше (толокнянка) япрағы. 5 минут һайын болғатып, 15 минут ҡайнатырға. 45 минут төнәтергә, һөҙөргә. Икенсе пункттағы кеүек һаҡларға һәм ҡулланырға, тик мумие ашамаҫҡа. Ун көн дауаланырға, массаж эшләргә. Дауалау курсын 1 ай ял үткәндән һуң, тағы ҡабатларға мөмкин.

## Лимфогранулемотоз ваҡытында

Май айында аҡ шыршы (пихта) ағасының йәш үҫентеләрен ботаҡтары менән һындырып алып, йыуып, бәләкәй киҫәктәргә турарға. Ҡурай еләге ҡыуағының тамырын шулай уҡ йыуып киптерергә, турарға. Банкаға 1 кг аҡ шыршы, 0,5 кг ҡурай еләге тамырын, 1 кг шәкәр һәм бал менән ҡатлап һалырға. Өҫтөнә 200 г ҡайнар һыу ҡойоп, бер тәүлек төнәтергә. 8 сәғәт буйына ҡайнап ултырған һыулы һауытта тотоп, тағы 2 тәүлек төнәтергә. Икенсе һауытҡа һалып алып (ҡурай еләге төҫөндә) тәүлегенә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап ашар алдынан ҡабул итергә.

**Рецепттарҙы ҡулланыр алдынан табип менән кәңәшләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын мотлаҡ тикшерергә кәрәк.**

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА

# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Ун бишенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Мәккә ҡалаһында Мөхәммәт бәйғәмбәр тыуған һәм йәшәгән. Шуның өсөн ул изге ҡала тип һанала. Шуға ла мосолмандың хажға барып ғибәҙәт ҡылыуы изге бурыстарҙан һанала. Хаж ҡылыу - ғибәҙәт ҡылыу тигәнде аңлата. Элегерәк замандарҙа Мәккәгә барып ҡайтыу иҫ китмәле ҡиммәт һәм оҙайлы ваҡыт талап иткән сәйәхәт булған. Был сәфәрҙе ҡылыу көндәргә генә түгел, айҙарға һуҙылған. Ә инде хажға барып ҡайтҡан кешенең даны тирә-яҡҡа таралған һәм уның исем-шәрифтәре алдына хаж тигән һүҙ өҫтәлгән. Хажмөхәммәт, Хажғәли, Хажсолтан, Хажинур һәм башҡа шундай исемдәр, аҙаҡ фамилиялар барлыҡҡа килә. Тимәк, ошондай фамилия йөрөтөүселәрҙең ҡасандыр берәйһе хажға сәфәр ҡылған, тигән һүҙ. Беҙҙең заманда хаж ҡылыу сәфәре ойошҡан рәүештә башҡарыла. Теләгән һәр кеше унда барып ҡайта ала.

Хажға барыу һәр йыл зөлхизә айында башҡарыла. Тимәк, йылдың төрлө ваҡытына тура килә тигән һүҙ. Быйыл, 2012 йылда, октябрь айына тура килде. Хаж ғибәҙәтен үтәү айырым тәртип менән алып барыла һәм зөлхизәнең 13-сө көнөндә икенде намаҙы менән тамамлана.

## Ун бишенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Был дәрестә дини мәҙәниәттәге сәнғәт ҡаҙаныштары менән таныштырырға кәрәк. Икона, арабеска, шәмдәл, Будда статуяларының һүрәттәрен йәки видеояҙмалар ҡулланып, уҡыусының белемен тикшереп ҡарарға мөмкин. Теге йәки был сәнғәт әҫәренең ниндәй дингә ҡарауын, һәр традицион дингә ниндәй сәнғәт төрө хас икәнлеген һөйләтеп, алған белемдәрен нығытыу яҡшы булыр. Мәҫәлән, урамдарҙа, скверҙарҙа һәм хатта йорт ихаталарында матур итеп таштар өйөмө яһап, унда сәскәләр, ҡыуаҡтар үҫтереп биҙәйҙәр. "Таштар баҡсаһы"ның ниндәй дингә хас булыуын, шулай уҡ һәр урында йыш осрай торған башҡа төрлө сәнғәтсә биҙәүҙең ниндәй дингә барып тоташҡанлығын белеү уҡыусыға яңы мәғлүмәттәр өҫтәр.

## Ун бишенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Башҡорт халҡының бөйөк "Урал батыр" эпосында төп фекер - яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың алышы һәм яҡшылыҡтың еңеп сығыуы, әммә яуызлыҡтың да үлмәүе. Тимәк, ерҙә яҡшылыҡ менән бер йәнәштән яуызлыҡ та йәшәй. Ә уларҙың ҡайһыныһына өҫтөнлөк биреү һәр кешенең үҙенән тора. Мәҫәлән, Урал батыр ағаһы Шүлгәнде яҡшылыҡ юлына баҫтырырға теләй, ә Шүлгәндең яман ҡаны еңә лә китә.

*Һин һүҙеңдә торманың,*
*Яҡшыға юл борманың,*
*Атам һүҙен тотманың,*
*Әсәм һүҙе йоҡманы.*
*Бөтә илде һыу иттең,*
*Кеше ҡанын ҡойорға*
*Дейеүҙәрҙе өҫкөттөң...*
*Яманлыҡты яҡшылыҡ*
*Еңгәнен хәҙер белдеңме?*
*Кешеләрҙең донъяла*
*Өҫтөнлөгөн күрҙеңме?*

Халыҡ аҡылы Урал менән Шүлгән аша яҡшылыҡҡа ынтылыуҙың, әхлаҡ нормаларының ниндәй булырға тейешлеген асыҡ күрһәтә. Кеше ниндәй ғәмәлдәр башҡарһа - яҡшы, ниндәйҙәре - яман. Ошо һорауҙарға яуап бирә был эпос.

Класта, үҙ-ара мөнәсәбәттә булған күренештәргә яҡшылыҡ менән яуызлыҡ төшөнсәһе аша анализ бирергә мөмкин. Тик, тура һүҙле булам, мин йәшерә белмәйем, тип, класташының насар яғын әйтеп, йөҙөнән алыу дөрөҫ булмаҫ. Яҡшы сифаттарҙы эйәһен атап әйткән саҡта ла, насар сифаттарҙы дөйөмләштереп һөйләргә кәрәк.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

УЯН, УЙЛАН, КЕШЕ!

# ПАСПОРТЫНДА МИЛЛӘТЕҢ ЮҠ,



## ә ул мәғлүмәт йөҙөңдә сағыламы?

**(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).**

"Тәүбә ҡылмаған кешеләр - залимдар. Бер халыҡ икенсеһен мәсхәрә итмәһен. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ. Ҡушамат исем аташмағыҙ", - тиелә "Иртә" сүрәһенең 6-10-сы аятында. Үкенесле, ләкин бәғзе берәүҙәр балаларына исем урынына ҡушамат тағалар кеүек.

Тағы ла бер күренешкә иғтибар итеү мөһим. Шәжәрә "ағас"тарында хәҙерге ят исемле "япраҡ"тар үҙҙәренең урынһыҙ булыуҙары менән, шыршылағы пластмасса уйынсыҡтар кеүек, айырылып торалар, ләкин яһалма һәм төкөрөк менән генә йәбештерелгән кеүек булыуҙарына күрә, ваҡыт үтеү менән һулып бөтөүгә дусар ителгәндәр. Ошондай һаҡһыҙлыҡ һәм вайымһыҙлыҡ арҡаһында күпме тоҡом "ағас"ы ҡороно икән? Бер кем дә әйтә алмаҫ, сөнки уларҙың тоҡомо ла юҡ, ҡыҙыҡһыныусылары ла юҡ. Тоҡом ҡаны аша берләшкән япраҡтар ғына шәжәрә ағасын үҫтереүгә һәләтле һәм уларҙан яңы ботаҡтар бөрөләнә... Исемдәрен юғалтҡан халыҡ туған телендә лә һөйләшмәһә, милләт юҡ, тигән һүҙ.

### Хоҙай үҙе милләт итеп яралтҡан

Донъяла, тарихта, йәшәйештә үҙ миссияһы, үҙ тәғәйене булмаһа, Бөйөк Аң әҙәмдәрҙе бер төрлө орлоҡтан яралтып, төрлө милләттәргә бүлмәҫ ине. Тәбиғәттә бер нәмә лә бушҡа ғына һәм мәғәнәһеҙ ҡоролмай. Ағастарҙың, үләндәрҙең орлоҡтарынан үҙ мөхиттәрендә тик үҙ төрөндәге үҫентеләр үҫеп сыға, сөнки тәбиғәттә уларҙың һәр береһенең үҙ тәғәйене бар. Әлбиттә, үҫентене ят ерҙә лә яһалма шарттар тыуҙырып үҫтереп була, ләкин ул үҙенә генә хас үҙсәнлеген тәбиғи дауам итә алмай. Әҙәм балаһы ғына бер камил йән булып тыуа ла, үҫеү, йәшәү дәүерендә яһалма рәүештә үҙенең ысынбарлығын юғалта. Сөнки тыумыштан ят исем ҡушып, ят телдә һөйләштереп, ят мөхиткә яраҡлаштырып, уны үҙсәнлегенән яҙҙырып, үҙ асылында үҫергә мөмкинлек тә, ирек тә бирмәйҙәр. Бала кем булып тыуыуын да, кем булып йәшәргә тейешлеген дә белмәй яфалана. Үҙенең милләтен танымаған йә белмәгән кеше йәшәйештә ниндәй ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үҙләштерергә, ниндәй рухи ҡануниәткә таянырға, ниндәй йолаларҙы тоторға тейеш? Бер ниндәй ҙә таянысһыҙ, рухиәтенән, милли мәҙәниәтенән айырылған кешенең күңеле ярлы, яҙмышы аянıслы булалыр...

"Теле ярлыланған халыҡтың рухиәте менән бер рәттән, йәшәү даирәһе лә ҡыҫырыҡлана" тип әйткән аҡыл эйәһе М.В. Ломоносов. Бөгөн ер йөҙөндә күпселек милләттәрҙең ерле халыҡ араһында диаспора булып йәшәүе беҙгә мәғлүм. Улар ҙа ваҡытында иң тәүҙә исемдәрен, шунан телдәрен, һуңынан илдәрен дә юғалтҡандарҙыр. Тел юғалһа, ил тарҡала, ил булмаһа, халыҡ та юҡ, быға бәхәсһеҙ дәлилдәр, тарихи миҫалдар бихисап. Бөгөнгө көндә 6 меңдән ашыу телдә һөйләшкән 5 меңдән ашыу милләттең 380- енең генә һаны 1 миллиондан күберәк. Йыл һайын тиҫтәләгән телдәр юҡҡа сыға, милләттәр һаны кәмей. Донъяла башҡорттар 1миллион ярымдан күберәк, ләкин үҙ телендә һөйләшә, яҙа белгәндәре ярты миллиондан да әҙ булыу сәбәпле ЮНЕСКО һәм БМО тарафынан башҡорт теле юғалыуға дусар телдәр иҫәбенә теркәлгән. Үкенесле, әммә факт! Кешеләр, ваҡытлыса замана алдатҡыстары артынан ҡыуып, яңылышыуҙарын күрмәмешкә, белмәмешкә һалыша, ә ваҡыт үҙенекен эшләй һәм ул аяуһыҙ...

### Асылың барыбер һағындыра...

Ҡыҙыҡ, милләте менән таныштырыу хәжәте тыуһа, үҙенең йөҙөн, үҙенсәлеген күрһәтеү өсөн бөтә халыҡтар ҙа милли кейемдәрен кейәләр, аш-һыуҙарын әҙерләйҙәр, халыҡ йырҙарын йырлайҙар, боронғо йәшәү рәүешен сағылдыралар. Тимәк, һәр халыҡ фәҡәт шул үҙ асылында өмөтлө һәм бәхетле йәшәгән дәүерҙе һағынып иҫкә ала, тигән һығымтаға килергә була. Алама осорҙо кем һағынып иҫкә алһын? Хәҙерге, теле, исеме, мәҙәниәте уртаҡлаштырылып, бер кәртәгә ҡыуылған быуынды, йәшәү рәүеше бер ҡалыпҡа һалынған йөҙһөҙ дәүерҙе киләсәк быуын нисек төҫмөрләр икән? Әлбиттә, замандың яһалма "ҡағиҙә"ләрен инҡар итеп, үҙ юлдарында үҙсәнлеген һаҡлап, үҙҙәренең кем икәнен иҫтәрендә тотоп йәшәгән халыҡтар бар: японлар, ҡытайҙар, һиндтар, ҡайһы бер ғәрәп халҡы һәм цивилизация менән аралашмаған ҡәбиләләр... "Берәү тоғро юлдан барһа, үҙе өсөн бара, берәү аҙашһа, үҙенә зарарға аҙаша, һис бер йөк күтәреүсе икенсенең йөгөн күтәрмәҫ" (Әл-Исра", 15-се аят)

Йәшәү мәғәнәһе ваҡытлыса һәм яһалма алдатҡыстарҙа түгел, ә донъяның рухи ҡиммәттәрен үҙләштереп, үҙсәнлегеңде һаҡлауҙа икәнен иҫебеҙҙә тотһаҡ ине...

*Ерҙән Күккә юл һалһам да,*
*Тел булмаһа, ни файҙа?*
*Тере телле гөл булһам да,*
*Ишетерҙәр бит Айҙа!*
*Тауҙарҙан бейек булһам да,*
*Телһеҙҙе ҙур итмәҫтәр.*
*Тере телле сүп булһам да,*
*Тапап үтеп китмәҫтәр.*
*Борон башҡорттарҙың телен*
*Бысаҡ менән киҫкәндәр.*
*Буйһонмаһа, маңлайына*
*Оло тамға өткәндәр.*
*Бөгөн баҫалҡының телен*
*Ҡағыҙ менән "киҫәләр".*
*Шуға башҡорт балаһына*
*Яһалма тел үҫәлер…*

**Урал МОСТАФИН.**

УЙЛЫҒА - УЙ...

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## ҡабаланмай, тәмләп һөйләүҙе ярата

**Шундай бер көләмәс ишеттем. Имеш, бер ғәрәп башҡа милләт вәкиленең Ҡөрьән сүрәләрен уҡығанын иғтибар менән тыңлап ултырған да, теге аҙағына етеүгә, илай башлаған. Һуңынан ни өсөн илағанын һораусыға ул: "Шул тиклем дә телемдең һеҙҙең тарафтан мәсхәрәләнеүенә түҙә алманым, үҙ телемде йәлләп иланым", - тигән ғәрәп. Бәлки, был хәл ысын да булғандыр - ишетеп ҡалып ҡына йәки үҙ белдектәре менән Ҡөрьән сүрәләрен уҡыусылар аҙмы ни?**

Бына мин дә йыш ҡына башҡорт телен боҙоусыларҙы ишетеп әрнейем. Ябай халыҡ дөрөҫ һөйләшә, уларға дәғүә юҡ. Ә бына телебеҙ өсөн икеләтә яуаплы булған гәзит-журналдар, радио-телевидение аша сығыш яһаусы журналистарҙың, шағирҙарҙың, прозаиктарҙың, тел, әҙәбиәт уҡытыусыларының, сәхнәнән сығыш яһаусы нәфис һүҙ оҫталарының, артистарҙың тел-стиленә килгәндә, күңелде ҡырған күренештәр бихисап. Беҙ, артистар, хатта үҙебеҙ эшләгән театрҙарҙың исемен башҡортса дөрөҫ әйтә белмәйбеҙ.

Бына, мәҫәлән, ҡан-ҡәрҙәшлек атамаларын алайыҡ. Ғаиләлә, тормошта һәр кемдең исеме, дәрәжәһе, тотҡан урыны, бурысы бар. Борон-борондан уларға дәрәжәһенә ҡарап исеме бирелгән: атай-әсәй, ҡайным-ҡәйнәм, ҡоҙа-ҡоҙағый, ҡайнаға-ҡайынбикә, бикәс-ҡәйнеш һ.б. Тик әле был мөнәсәбәт-төшөнсәләр юғалып бара. Килен булып төшөүсе ҡыҙ-ҡатын үҙенең кейәүенең туғандарына ире кеүек үк өндәшә. Ҡайныһы менән ҡәйнәһенә - атай, әсәй, ҡайнағаһы менән ҡайынбикәһенә ағай, апайҙан һалдыра. Үҙенең атаһы менән әсәһен, ағаһы менән апаһын ихтирам итмәгән кеше генә шулай итәлер...

"Туған" менән "тыуған" һүҙҙәрен бутаусылар күп. Уларҙы хәҙер журналистар ҙа айырмай башланы. Ҡайһыларыбыҙ үҙ милләтен урыҫса әйтә белмәйенсә, "башкир" урынына кәрәкмәгән ялғау тағып "башкирин" тип һөйләй. Ҡасан "Һаҡлыҡ банкыһы" "Һаҡлыҡ банкы"тип дөрөҫләнер тип тә көтөлә. Башҡортса "артистка" тигән һүҙҙе лә күптән дөрөҫләргә ваҡыт. Әйткәндәй, "Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшлеклесе" тигән исем дә юҡ Башҡортостанда. Ә бына "Туған тел" каналында бар икән, шулай тип иғлан итәләр (мәҫәлән, Нур Дауытовты). Театрҙарыбыҙ исемдәре лә һаман дөрөҫ яҙылмай. "Стәрлетамаҡ дәүләт театры" йәки "татар дәүләт театры", тип һөйләйҙәр, хатта

ФАРАЗДАР

# ИРАН БАШҠОРТТАРЫ...

## Бешакерд тау һырттарында йәшәйме?

Тел белгестәре әйтеүенә ҡарағанда, башкард теле иран тел ғаиләһендә үҙенә генә хас бер урынды алып тора. Иран телле халыҡтар бер-береһен ярайһы уҡ яҡшы аңлайҙар, әммә башкард телендә һөйләшеүселәрҙе улар аңламай. Ошо мәғлүмәттәргә таянып, башкард теле бүтән иран телдәренән ныҡ айырылып торалыр, тип әйтергә була. Бәлки, башкард теле төрки телдәре менән ныҡ буталып, шуның арҡаһында ла бүтән иранлылар уларҙы аңламайҙыр. Әлегә ҡулда булған материалдарҙан сығып ҡына ул телдең ҡайһы телгә яҡын икәнен аңлап булмай. Әгәр улар беҙҙең халыҡтың борондан шул яҡтарға барып сыҡҡан ярсығы булһалар, был хәл ҡасаныраҡ булды икән? Бәлки, башҡорт-башинәктәр дәүләте тарҡалғандан һуң эләккәндәрҙер ул ерҙәргә. Сәлжүктәр дәүерендә элегеүҙәре лә бик ихтимал. Сөнки, сәлжүктәр дәүләте ул ерҙә үк булмаһа ла, яҡын ерҙәрҙә хакимлыҡ ҡыла. Был телдең Бируни яҙмаларында телгә алынған боҙоҡ иран теле булыуы ла бик ихтимал. Бируни аландарҙың, башинәктәрҙең теле төрки-иран телдәренең буталышынан килеп сыҡҡан, тип яҙып ҡалдырған. Әгәр ошоно иҫтә тотһаҡ, әлеге башкард теленең шул телгә яҡын булыуы бик тә ихтимал. Был фараз дөрөҫ булһа, беҙ боронғо ата-бабаларыбыҙҙың ниндәйерәк телдә һөйләшкәнен күҙаллай алыр инек һәм был башҡорт халҡы тарихын өйрәнеүселәргә, ғөмүмән, фән өсөн көтөлмәгән бүләк булыр ине.

Әммә әлегә был телдә һөйләшеүселәрҙең һаны һәм телдәренең үҙенсәлеге өйрәнелмәгән. Шуға тик фаразларға ғына ҡала.

Тәү тапҡыр был халыҡ һәм уларҙың теле тураһында инглиз Флоер Е.А. 1882 йылда Лондонда сыҡҡан Билдәһеҙ Белуджистан тигән китабында телгә ала. Флоерҙың маҡсаты башкардтарҙы өйрәнеү булмай. Башкард ерҙәренә ул Афғанстанға китеп барышлай ғына һуғыла. Улар тураһында шулай уҡ Гершевич, Моргенстьерне тигән инглиз ғалимдары ла телгә алып китәләр. Уларҙың хеҙмәттәренән күренеүенсә, был халыҡ үҙен һәм илдәрен башкард тип атай.

Инглиздарҙың хеҙмәттәренән күренеүенсә, башкардтар бик яусыл халыҡ. Уларҙың еренә Иран дәүләтенең ғәскәре бигүк инеп бармай. Иран шаһы бер нисә тапҡыр уларҙың ҡоралдарын тартып алып, ҡоралһыҙландырып, буйһондорорға маташа. Әммә был тырышлыҡ бушҡа ғына булып сыға. Гершевичтың яҙмаларын уҡығанда Ибн Фаҙландың башҡорттар тураһында X быуаттағы яҙмалары иҫкә төшә. Гершевич XX быуаттың илленсе йылдарында була был халыҡ араһында. Хатта шул ваҡыттарҙа ла улар үҙ ерҙәренә берәүҙе лә индермәгән. Иран хөкүмәте сәйәхәтселәргә был халыҡтың ерендә бер ниндәй ҙә именлек гарантиялай алмағанын белдерә.

Артыҡ күп мәғлүмәт булмаһа ла, башкардтарҙың ниндәйҙер бер ҡурайға тартым, флейта тибындағы музыка ҡоралында оҙон-оҙон көйҙәрҙе һуҙыуҙарын, был көйҙәренең үтә лә киң диапазонлы булып, Иранда һәм Төркиәлә йәшәгән халыҡтарҙың береһенекенә лә оҡшамаған бер моң булыуын яҙалар. Йәшәгән торлаҡтары монгол тирмәһенә оҡшаш булып, уларҙы ҡамыштан һәм финик пальмаһы япрағынан яһайҙар.

Башкардтар дүрт төркөмгә бүленеп, бер төркөмө "балух-кара" тип атала. "Балух" һүҙе "көтөүсе", ә "ҡара" инде "халыҡ" тигәнде аңлата. "Ҡара" тигәндә, үҙебеҙҙең башкорт халыҡ ижадында ла халыҡты "ҡара", "күп", "туп" тип атау иҫкә төшә. Башҡорттоң да бер ырыуы "балыҡсы" тип атала. Был осраҡлы ғына оҡшашлыҡмы икән? Шул уҡ балыксылар ерендәге Урмияз, Ҡошсо атамаларының Иранда ла булыуы балыҡсы ырыуының Иран башкардтарындағы балух-ҡара тигән менән ниндәйҙер бәйләнештә булыу ихтималлығына бер ишаралыр. Һәр хәлдә, уйланырға урын бар кеүек...

Инглиз авторҙары башкардтарҙа боронғо дастан тигән нәмәләр юҡ, тип яҙа. Бәлки, башкардтар был ерҙәргә һуң килеп ултырғандыр. Сөнки яңы ергә күсенеп килеп ултырған халыҡ элек йәшәгән урындағы күп нәмәне онотоусан була. Мәҫәлән, мадьярҙар әлеге ерҙәрендә нығынғас, элекке ерҙәрендәге бер нәмәне лә хәтерләмәй, яңыны тыуҙыралар. Гершевич тигән инглиз ғалимы был халыҡтың бик күп көй-моңдарын яҙып алып, Англияға алып ҡайтып тапшыра. Улар әле Лондонда һаҡлана. Бәлки, Тарих, тел, әҙәбиәт институты Башҡорт халҡы тарихын яҙыу форсатынан файҙаланып, Лондонға кеше ебәреп, ул яҙмаларҙың күсермәһен алып ҡайтарта алыр? Әлбиттә, былар күп аҡса талап итәлер, тип уйларға кәрәк. Институт "Башҡорттоң рухи мәҙәниәте" тигән ете томлыҡ хеҙмәткә тотонорға тора, тигән хәбәр ҙә ишетелеп ҡалғайны. Әгәр был проект килеп сыҡһа, баяғы яҙмалар бигерәк тә кәрәк булыр ине кеүек. Әлбиттә, башҡорт менән башкард/баджгирд араһында ниндәйҙер бәйләнеш була ҡалһа инде. Ә бындай бәйләнеш булырға тейештер. Атамаларҙың бындай оҡшашлығы буштан ғына килеп сыҡмағандыр. Һәр хәлдә, ике халыҡ атамаһының шулай ныҡ яҡын, оҡшаш булыуын фәндә осратҡаным юҡ.

Башкарди (баджгирд) халкына ярайһы уҡ яҡында, Афғанстан менән Пакистан сигендә беҙҙен башҡортҡа ниндәйҙер бәйләнеше булырға тейешле хазари тигән халыҡ йәшәй. Ошо хазариларҙың бер төркөмө беҙҙен үҫәргән ырыуына оҡшаш узурган тип атала. Миңә йәш башҡорт ғалимы, тарихсы Юлдаш Йосопов биргән бер мәҡәләнән күренеүенсә, Жаҡсылыҡ Сабитов тигән ҡаҙаҡ ғалимы ошо узургандарҙың ҡандарын тикшереп уларҙың гаплогруппа яғынан башҡорт үҫәргәндәргә ныҡ яҡын булыуын асыҡлаған. Унда-бында донъя күргән урыҡ-һурыҡ мәғлүмәттәргә ҡарағанда, хазариларҙың килеп сығышы тураһында фәндә әлегә аныҡ ҡына караш, фекер берлеге юҡ.

Ҡыҫҡаса ошоларҙан ғибәрәт инглиз ғалимдары - башкард, төркмәндәр баджгирд тип атаған Ирандың бер халҡы тураһындағы мәғлүмәттәр.

Бәлки, киләсәктә йәш башҡорт ғалимдары унда барыр һәм беҙҙе улар тураһында ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ мәғлүмәттәр менән ҡыуандырыр, тип өмөтләнәйек .

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре.**
**(Аҙағы. Башы 50-се һанда).**

яҙалар, был ҙур сәйәси хата, сәйәси наҙанлыҡ. Ни өсөн Стәрлетамаҡ йә Салауат йә Сибай дәүләт булһын, беҙҙең дәүләт - Башҡортостан Республикаһы!

Сәнғәттә шундай бер фекер, яҙылмаған закон бар: "Талантҡа асылырға, эшләргә ярҙам итергә кәрәк, ә талантһыҙҙар үҙҙәре лә юлын табыр". Башҡорт теленә лә ҡағыла был: үҙ телебеҙгә донъяға сығырға, ғәмәлдә ҡулланылыуға ярҙам итергә кәрәк, ә башҡа телдәр үҙҙәре үк беҙҙең тормошҡа инергә юл табыр. Бына бер миҫал: элек ауылдарыбыҙҙа балаларҙың башҡортса тауыштары гөрләпсыңлап торор ине. Хәҙер инде был тауыштарҙы бик һирәк ишетәбеҙ. Хатта "атай", "әсәй" тигән һүҙҙәрҙе лә "папа", "мама"ға әйләндереп бөтөп баралар. Бер кем өйрәтмәһә лә, ауыл балалары мәктәпкә саҡлы уҡ урыҫ телендә һөйләшә. Шулай итеп, туған тел икенсе планда, йәғни олатай-өләсәйҙәр лөғәте генә булып ҡала.

Әйткәндәй, иң беренсе баланы туған теленә өләсәйҡартинәйҙәр, олатай- ҡартатайҙар йәлеп итә. Улар балаларға әкиәттәр, бәйеттәр, ҡобайырҙар, легендалар һөйләй, мәҡәлдәр, табышмаҡтар әйтә, боронғо йырҙар матурлығын күңеленә һала. Ә мәктәптә уҡытыусылар телдең матурлығын, унның бер телдән дә кәм түгеллеген, байлығын, рухлы, мөләйем булыуын аңлатып, туған телебеҙҙе яратырға өйрәтә. Тик бынын өсөн ҡырҡ биш минутлыҡ дәрес йә факультатив дәрес кенә етмәй, телде өйрәнеү дәрестән тыш та дауам итергә тейеш. " Урал батыр" эпосын яттан һөйләү - бер нәмә, уны баланың аңлап һөйләүе кәрәк.

Баланың, үҫмерҙең барса башланғысы - ғаиләнән, шул башланғыстың үҫтерелеше - мәктәптән. Ҡайҙа ғына булмаһын, тел сарларға өйрәнергә тейеш бала. Ниндәй тапҡыр, мәғәнәле аңлатма - тел сарлау. Бик матур фекер күтәреп сыҡты Башҡортостан "Юлдаш" телеканалы. Шулай уҡ Башҡортостан юлдаш телеканалындағы "Башҡорт теле көнө" лә - шәп башланғыс.

Ҡайһы бер йәштәр беләгүрә башҡортса үҙ телендә һөйләшмәй, вата-емерә башҡа телдә һөйләшергә "маташа". Йәнәһе лә, башҡортса оялалар. Ә дөрөҫөндә, башҡа телде белмәйенсә, ул телде ватып-емереү икеләтә оят! Беҙҙең Архангел районы Абҙан мәктәбенә инеү менән стенала ҙур хәрефтәр менән " Үҙ телеңде белмәй тороп, башҡа телде белеү мөмкин түгел! М. Горький" тигән яҙыу ҡаршы ала торғайны. Хәҙер ул яҙыу бармы икән, иғтибар иткәнем юҡ. Бәлки, элекке лозунг та иҫке мәктәп менән бергә Данко йөрәге кеүек янғандыр. Тыуған илебеҙҙән, тыуған еребеҙҙән, туған телебеҙҙән һис кенә лә оялырға, ғәрләнергә ярамай. Беҙҙең йырҙарыбыҙ ҙа моңло, ғорур, асыҡ, көр, ғәҙел, тантаналы. Башҡорт теле ҡабаланмай, тәмләп һөйләүҙе ярата. Шул ваҡытта ул бай ҙа, яғымлы ла, аңлайышлы ла!

**Рауил ГАЛИН,**
**Башҡортостандың халыҡ артисы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

**Нуғай даруғаһы олоҫтары:**

**1.** Мең - Дим, Өршәк, Сәрмәсән йылғалары буйында ята; ҙур булмаған далалары һәм урмандары бар.

**2.** Күрпәс-Табын һәм Табын - Инйәр, Илим һәм башҡа йылғалар буйында; Илим буйлап урмандар һәм баҫыуҙар араһында урынлашҡан; урмандар һәм тауҙар буйлап арба юлы юҡ.

**3.** Юрматы - Ағиҙел, Иген, Ашҡаҙар һәм башҡа йылғалар буйында; дала һәм урмандары бар.

**4.** Ҡатай - Инйәр буйлап Ағиҙел үрендә; тауҙарҙа ҙур булмаған урмандар һәм яландар бар; тауҙар, урмандар, батҡылдар буйлап арба юлы юҡ.

**5.** Ҡыпсаҡ - Ағиҙел, Ыҡ, Мәндем йылғалары буйлап, Ағиҙел үрендә; арба юлы юҡ.

**6.** Бөрйән - Ағиҙел, Ыҡ һәм башҡа йылғалар буйында; ҙур булмаған тауҙар, урмандар һәм яландар; тауҙар артында арба юлы юҡ.

**7.** Теләү - Яйыҡ, Миндәк йылғаһы буйында; Урал артында яландар, ә урмандар аҙ; был ерҙәрҙә Уралдан алып арба юлы бар, ә Өфөнән Уралға тиклем - юҡ.

**8.** Һарыш-Ҡыпсаҡ - Ағиҙел буйында; урман-дала.

**9.** Тамъян - Ағиҙел, Нөгөш һәм башҡа йылғалар буйында; тауҙар, урмандар, дала; Ағиҙел буйында урынлашҡан Өфө ҡалаһынан түбәнге йорттарға тиклем арба юлы бар, ә Ағиҙел һәм Нөгөш буйлап үрге йорттарға - юҡ.

**10.** Шуран (Соран) - Урал аръяғында; күлдәр буйлап Себер слободалары яғында йәшәйҙәр, дала, урмандар аҙ, ә Өфө яғынан Уралға тиклем бик ауыр булған арба юлы бар.

**11.** Үҫәргән - Ағиҙел, Ыҡ, Һаҡмар, Йылайыр йылғалары буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған яландар бар; тауҙарҙа ла, урмандарҙа ла арба юлы юҡ, Һаҡмар артында - дала.

**12.** Түңгәүер - Ағиҙел, Һаҡмар йылғалары буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған яландар; тауҙар һәм урмандарҙа арба юлы юҡ.

**13.** Бәкәтин - Урал аръяғында; күл буйҙарында ҙур далалар, урман, уҫаҡлыҡ һәм ҡайынлыҡ.

**14.** Ҡара-Табын - Ағиҙел түбәләренән алып Урал аръяғында Яйыҡ һәм Уй түбәләре, Мейәс, күлдәр буйында; Ағиҙел буйлап урман, яландар, Урал аръяғынан ҙур дала, урмандар; Өфөнән ошо олоҫҡа тиклем тауҙар һәм урмандар аша арба юлы юҡ, ә Урал аръяғында арба юлы буш.

**15.** Күбәләк-Табын - Яйыҡ һәм Миндәк йылғаһы буйлап; ҙур дала, урман аҙ; Өфөнән Уралға тиклем тауҙар һәм урман аша арба юлы юҡ, Урал аръяғында арба юлы буш.

**Себер даруғаһы олоҫтары**

**1.** Көҙәй - Ҡариҙел, Эҫем, Йөрүҙән (Юреинь), Ҡатау йылғалары буйында; тауҙар, урмандар һәм ҙур булмаған баҫыуҙар бар; тауҙарҙа, урмандарҙа, ҡаҙлыҡтарҙа арба юлы юҡ.

**2.** Танып - Танып түбәләренән алып Ҡариҙел йылғаһы эргәһендә; урман-ҡырҙар; Өфөнән арба юлы юҡ.

**3.** Кущинск - Әй йылғаһы буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған ҡырҙар; кәрәкле булған арба юлы бар.

**4.** Балыҡсы - Ҡариҙел һәм Төй йылғалары буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған баҫыуҙар; арба юлы бар.

**5.** Йәлдәк - Ҡариҙел йылғаһы буйында; тауҙар, урмандар, яландар; кәрәкле булған арба юлы бар.

**(Дауамы бар).**

*✓ Конституция - шәхес автономияһын булдырыу гаранты. Конституцияның тәүге һүҙҙәре дәүләттең ниндәй булыуын аңлатыуҙан ғәйре, кешенең ниндәй хоҡуҡтары, азатлығы һәм бурыстары барлығын аңлатырға тейеш.*



**Декабрҙә, күпселек кешеләрҙең лөғәтенә Иҫке йыл хәтирәләренә һәм Яңы йыл хәстәрҙәренә бәйле һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр килеп ингән бер мәлдә "Конституция" төшөнсәһе лә ишетелеп ҡалыуы һис тә осраҡлы түгелдер. Улай ғына ла түгел, нәҡ ошо ай беҙгә "Конституция айы" булып тойола, сөнки 12 декабрь - Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы, 24 декабрь - Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы көнө. Әммә беҙ шуны ла онотторға тейеш түгелбеҙ: 1925 йылда үҙенең дәүләтселеген төҙөп, тәүге Конституцияһын барлыҡҡа килтергәнсе, милләтебеҙ үҙаллылыҡ өсөн көрәштә ҡаһармандарса көрәшеп, ҡан ҡойған. Шулай булғас, был документҡа эйә булыу беҙҙең күп һанлы ҡорбандар менән түләп яулаған хоҡуғыбыҙ ҙа.**
**Тормош туҡтауһыҙ алға барған, үҙгәрештәр булып торған кеүек, дәүләттең төп документы һаналған конституциялар ҙа үҙгәрешһеҙ тора алмайҙыр. Әммә һәр бер әҙәм балаһының һис кем дәғүә итә алмаҫлыҡ хоҡуҡтары һәм бурыстары булған кеүек, милләттең, уның дәүләтселегенең башҡалар дәғүә итә алмаҫлыҡ хоҡуҡтары һәм бурыстары була. Беҙҙеңсә, тап ошо хоҡуҡтарҙы һәм бурыстарҙы гарантиялаусы төп документ ул - Конституция. Был юлы гәзитебеҙҙә Башҡортостан Республикаһы Конституция Суды рәйесе Люциә Шаһыбал ҡыҙы ҒҮМӘРОВА РФ һәм БР Конституциялары көндәре айҡанлы сығыш яһай, илебеҙҙең һәм донъяның ҡайһы бер сәйәси хәлдәренә ҡарата ла үҙ фекерҙәрен белдерә.**

# КОНСТИТУЦИЯ

## Ул - власть менән йәмғиәт

### Шәхси мөхит автономияһы

Һәр кемдең тыумыштан бер кем дә ҡағылырға хаҡы булмаған тәбиғи хоҡуҡтары була. Ул хоҡуҡтарға ғүмер һөрөү, йәшәйеш сығанаҡтарын барлыҡҡа килтереү, торлаҡ төҙөү, ғаилә ҡороу, балалар үҫтереү һәм башҡалар инә. Улар Конституцияла "Төп хоҡуҡтар" тип атала. Быларҙан тыш, дөйөм таралған хоҡуҡтар ҙа бар. Улары Халыҡ-ара хоҡуҡ нормалары менән нығытылған. Хоҡуҡ объектив күренеш булһа ла, һәр хоҡуҡ бер үк ваҡытта субъектив та. Субъектив хоҡуҡҡа һәр кем эйә. Әммә субъектив хоҡуҡтың билдәле сиктәре бар. Субъект хоҡуғы - ул башҡа кеше һиңә зыян килтерә алмаған шәхси мөхит автономияһы. Мәҫәлән, торлаҡҡа хоҡуҡ шул автономияға инә. Шуға күрә лә хужаның рөхсәтенән башҡа уның йортона башҡа берәү инә алмай. Ул унда инергә теләһә лә, быға уның хоҡуғы юҡ. Әгәр ҙә ул хоҡуғы булмаған көйө быны эшләргә маташһа, үҙенә зыян ғына килтерә. Белгестәр әйтеүенсә, субъектив хоҡуҡ башҡаларҙың һиңә зыян килтереүенән һаҡлай. Субъектив хоҡуҡ, дәүләт бармы-юҡмы, ул һәр ваҡыт йәшәй.

Субъектив хоҡуҡтан тыш, икенсел тәртиптәге сәйәси хоҡуҡтар ҙа бар. Әйтәйек, һайлау һәм һайланыу хоҡуғы инде ошо дәүләт менән бәйләнештә торған кешегә бирелә. Теге йәки был дәүләттең гражданы булмаған кешенең бындай хоҡуҡтары юҡ.

Конституция булһа ла, булмаһа ла, субъектив хоҡуҡтар һәр ваҡыт бар. Ә бына икенсел хоҡуҡтарға килгәндә инде, бында конституция мотлаҡ кәрәк. Конституция дәүләт ҡоролошон һәм власын ойоштороуҙағы төп документ иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта конституция дәүләт властарының граждандарҙың шәхси тормошона ҡыҫылыуынан да араларға бурыслы. Конституция - шәхес автономияһын булдырыу гаранты. Конституцияның тәүге һүҙҙәре дәүләттең ниндәй булыуын аңлатыуҙан ғәйре, кешенең ниндәй хоҡуҡтары, азатлығы һәм бурыстары барлығын аңлатырға тейеш. Артабан инде шул хоҡуҡтарҙы, шул азатлыҡты һәм шул бурыстарҙы тормошҡа ашырыу өсөн ниндәй власть зарурлығы хаҡында һүҙ булырға тейеш. Сөнки кеше үҙ хоҡуҡтарына таянып, үҙ бурыстарын тормошҡа ашырыуҙа власть, дәүләт ярҙамына мохтаж. Был - шәхес автономияһын ойоштороу формаһы. Конституция ошо маҡсатҡа хеҙмәт итеүсе закондар, акттар иеархияһында иң юғары урынды биләй. Конституция - ул йәмғиәт менән власть араһындағы килешеү.

### Дин һәм үлем язаһы

Бөгөн дин ни өсөн көсәйә? Сөнки ул дәүләттән айырылған һәм кеше үҙен бойомға ашырыу, һаҡланыу, үҫтереү маҡсатында динде иркле рәүештә файҙалана. Мин барлыҡ диндәргә лә ихтирам менән ҡарайым, мосолмандарҙың конституцияһы һаналған Ҡөрьән китабын да уҡыйым. Ҡайһы бер дәүләттәр конституцияларының, әйтәйек, Швейцария, АҠШ Конституцияһы "Алла исеме менән..." тип башланыуын да нормаль күренеш тип һанайым.

Һиндостандың Дәүләт Конституцияһы бик ҡыҙыҡлы. Унда дәүләттең һәр бер ғәмәленә бәйле закондары, кешеләрҙең йәшәү ҡағиҙәләре ентекле яҙылған. Уларҙың төп документы барлығы 368 статьяны тәшкил итә, һәр статьяның бер нисә ҡушымтаһы бар.

Ер йөҙөндә барлығы 24 федератив дәүләт иҫәпләнә һәм был дәүләттәрҙә 2 миллиардтан ашыу кеше йәшәй. Һәр бер федератив дәүләт үҙенсә ҡыҙыҡлы. Рәсәй Федерацияһы, мәҫәлән, Башҡортостандан тыш, Үҙәк властың инициативаһы менән барлыҡҡа килгән. Ә бына Америка Ҡушма Штаттары властағылар түгел, ә түбәндәгеләрҙең инициативаһы буйынса формалашҡан. Тарихтан белеүебеҙсә, унда штаттар үҙ-ара һуғыштар алып бара, аҙаҡ бер дәүләткә ойоша. Ә дәүләттәр ниндәй маҡсатта барлыҡҡа килә һуң? Иң беренсе нәүбәттә, әлбиттә, оборона маҡсатында. Дәүләт төҙөлгәндән һуң, ҡағиҙәләр барлыҡҡа килә, сөнки дәүләттең төп функцияһы йәшәү тәртибе ҡағиҙәләрен көйләүгә ҡайтып ҡала. Артабан дәүләткә һалым түләнә һәм бюджет барлыҡҡа килә. Бюджеттан оборона, медицина, мәғариф һәм башҡа тармаҡтарға аҡса бүлеү башлана. Ошонда уҡ гражданлыҡ институты формалаша.

Һуңғы ваҡытта төрлө сайттарҙа шундай фекерҙәр күбәйҙе: әйтәйек, фәҡәт бюджет ойоштороуға өлөш индереүселәр генә һайлауҙа ҡатнаша ала. Рәсәй Конституцияһы буйынса, юридик яҡтан эшкә хоҡуғы булмағандар һәм иркенән мәхрүм ителеүселәрҙең һайларға һәм һайланырға хоҡуғы юҡ. Хәҙер Европа суды ҡарары буйынса иркенән мәрхүм ителеүселәр һайлау хоҡуғына эйә булырға тейештәр. Тимәк, беҙ Рәсәй Конституцияһына үҙгәрештәр индерергә тейеш булабыҙ. Тик бөгөн беҙҙең төрмәләрҙә ниндәй хәлдәр булып ятҡанын күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы?

Европа Советына инеү өсөн беҙ 1-се статьяның 1-се протоколы буйынса енәйәтселәргә үлем язаһы биреүҙән дә баш тарттыҡ. Шул уҡ ваҡытта йәмәғәтселектең 60 проценттан ашыуы был хәл менән риза түгел. Минең шәхси ҡарашымса, ҡайһы бер енәйәттәр шул тиклем ытырғаныс һәм уны ҡылыусы кешенең был донъяла йәшәргә хоҡуғы юҡтыр тип уйлайым. Шул уҡ ваҡытта ундай кешегә үлем язаһы биреү бүләк кенә, тормош ғазаптарынан ҡотолоу юлы булыуы ла бар. Икенсе яҡтан уйлағанда, әгәр ҙә Хоҙай бар икән, ул нишләп шундай кешеләрҙе тыуҙыра икән?

### Европа суды ҡарары

Европа судының ҡыҙыҡлы бер ҡарарын уҡыным. 1955 йылда элекке Чехословакияла бер прокурор суд процесында дәүләт ғәйепләүсеһе булараҡ коммунистик режим оппоненттарына ҡаршы сығыш яһаған. Оппоненттарҙың барыһын да үлем язаһына хөкөм иткәндәр һәм хөкөм ҡарарын тормошҡа ашырғандар. Әле килеп, ул ваҡиғаға 55 йыл үткәс, шул прокурорҙың үҙен судҡа биреп, 6 йылға иркенән мәрхүм иткәндәр. Илгә яңы президент килгәс, ул прокурор срогынан алда иреккә сыҡҡан һәм аҡлауҙарын юллап, Европа судына мөрәжәғәт иткән. Ә Европа суды Кеше хоҡуҡтары буйынса конвенцияға ярашлы уның ғәмәленең аҡланырға тейеш түгеллеге хаҡында белдергән. Сөнки коммунистик режим емерелгәндән һуң Чехияла "Коммунистик режимдың законлы булмауы тураһында" закон ҡабул ителә һәм 1948 йылдан башлап 1989 йылға тиклемге арауыҡҡа "оҙайлы ваҡыт срогы"(срок давности) ҡануны ваҡытлыса туҡтатыла. Прокурор коммунистик режим оппоненттарына үлем язаһы сығарыуға бәйле ғәмәлен, хоҡуҡ һаҡлау органдарында вазифа биләгән кеше булараҡ закон үтәү булды, тип аңлата. Ә Европа суды уның был ғәмәлен законлылыҡҡа ҡаршы акт, ә коммунистик режим оппоненттары ғәмәлен һүҙ һәм фекер иреклеген яҡлау, тип баһалай. Әгәр ҙә Европа суды прокурорҙы яҡлаһа, был Кеше хоҡуҡтары буйынса конвенция ҡиммәттәренә ҡаршы килер ине.

Европа судының был ҡарары менән беҙҙең бөтә судьялар, прокурорҙарҙы таныштырырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Судьялар, прокурорҙар дәүләт исеменән сығыш яһай, әммә ҡасандыр бер килеп дәүләт ҡоролошо үҙгәрергә лә мөмкин бит әле. Ул сағында власҡа килеүселәр закондарҙы икенсе күҙлектән ҡарауы ла бар. Беҙҙең илдә лә үткән быуаттың аҙағында донъялар һәм властар үҙгәргәс, элекке режим тоталитар тип табылып, иң тәүҙә сәйәси золом ҡорбандарын реабилитациялау башланды. Статистика буйынса Рәсәй Европа судында ҡаралған эштәр буйынса Төркиәнән ҡала донъяла икенсе урында тора. Европа судына бирелгән барлыҡ ғаризаларҙың өстән бер өлөшө Рәсәй граждандарынан. Был хәл артабан да көсәйәсәк. Ә ни өсөн беҙҙең граждандар был юлға бара, тип уйлайһығыҙ? Был факт Рәсәй граждандарының үҙебеҙҙең судьяларға һәм прокурорҙарға ышанысы кәмеүе тураһында һөйләй.

### Сикләнгән суверенитет буламы?

Белгестәр әйтеүенсә, Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы илебеҙ йәшәйешенең төп документы булараҡ, уның йөкмәткеһе тулыһынса тормошҡа ашырылмаған әле. Уның әле күп кенә положениеларын үҫтерергә, халыҡҡа аңлатырға кәрәк, тиҙәр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, илебеҙҙең федератив ҡоролошон юҡҡа сығарырға теләүсе көстәрҙең дә барлығын танырға тура килә. Мәҫәлән, бөгөн милли республикаларҙағы үҙ тарихи ерҙәрендә йәшәүсе халыҡтарҙың үҙ асылын һаҡларға, телен, мәҙәниәтен үҫтерергә ынтылышы ҡайһы берәүҙәр өсөн Рәсәйҙе тарҡатыусы фактор булып тойолоуы аптырашҡа һала. Шул уҡ ваҡытта РФ Конституцияһы милли республикаларҙың күбеһендә, шул иҫәптән беҙҙә, референдумдан үтмәне. Уны легитим итер өсөн килешеү төҙөнөләр. Конституция тыныс, тотороҡло тормошто гарантиялаусы төп документ булараҡ яҙылһа ла, уның йыш ҡына үҙгәртеүгә дусар ителеүе үҙе үк күп кенә ҡапма-ҡаршылыҡтарға, сәйәси ҡатмарлыҡтарға алып килә. Рәсәй Конституцияһын күберәк Мексика Конституцияһы менән сағыштыралар. Үҙәк менән төбәктәрҙең вәкәләтлек бүлешеүе, президенттың ил менән етәкселек итеүе мәсьәләләре буйынса уларҙың төп документы беҙҙекенә оҡшаш.

*Белгестәр әйтеүенсә, Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы илебеҙ йәшәйешенең төп документы булараҡ, уның йөкмәткеһе тулыһынса тормошҡа ашырылмаған әле. Уның әле күп кенә положениеларын үҫтерергә, халыҡҡа аңлатырға кәрәк, тиҙәр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, илебеҙҙең федератив ҡоролошон юҡҡа сығарырға теләүсе көстәрҙең дә барлығын танырға тура килә. Мәҫәлән, бөгөн милли республикаларҙағы үҙ тарихи ерҙәрендә йәшәүсе халыҡтарҙың үҙ асылын һаҡларға, телен, мәҙәниәтен үҫтерергә ынтылышы ҡайһы берәүҙәр өсөн Рәсәйҙе тарҡатыусы фактор булып тойолоуы аптырашҡа һала. Шул уҡ ваҡытта РФ Конституцияһы милли республикаларҙың күбеһендә, шул иҫәптән беҙҙә, референдумдан үтмәне. Уны легитим итер өсөн килешеү төҙөнөләр. Конституция тыныс, тотороҡло тормошто гарантиялаусы төп документ булараҡ яҙылһа ла, уның йыш ҡына үҙгәртеүгә дусар ителеүе үҙе үк күп кенә ҡапма-ҡаршылыҡтарға, сәйәси ҡатмарлыҡтарға алып килә.*

# НИМӘ УЛ?

## араһындағы килешеү



*Күпселек граждандар Конституцияның барлығын белһә лә, уның йөкмәткеһе менән таныш түгел. Улар ғына түгел, хатта юристар уны уҡымай һәм белмәй. Советтар Союзында юристарҙы 52 генә юғары уҡыу йорто әҙерләһә, хәҙер Рәсәйҙә генә улар меңдән ашыу. Юристарҙы хәҙер технологик, машиналар төҙөү буйынса белгестәр әҙерләүсе юғары уҡыу йорттары, ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө филиалдар әҙерләй. Ә юристар әҙерләү өсөн улар ҡайҙан шул тиклем уҡытыусылар таба икән? Бөгөн Рәсәйҙә 30 мең самаһы судья иҫәпләнә. Һуңғы йылдарҙа судтарҙың абруйы шул тиклем төштө һәм беҙҙең граждандар ҙа судҡа мөрәжәғәт итмәй мөмкин булмаған осраҡта ғына бара. Беҙҙә элек-электән судья ролен ауыл аҡһаҡалы, муллалар, ғөмүмән, ололар башҡарған. Шуға күрә ниндәйҙер ыҙғышлы хәл килеп тыуһа, оло кешегә барыу йолаһы беҙҙә әле булһа һаҡланып ҡалған.*

Әммә Мексика Ҡушма Штаттары Конституцияһының 40-сы статьяһында Мексиканың демократик федератив республика булараҡ штаттарҙан тороуы һәм ул штаттарҙың эске эштәренә ҡағылған һәр мәсьәләлә ирекле һәм суверенлы булыуы әйтелә. РФ составындағы республикаларҙың Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларацияһы шундай уҡ суверенитетты, йәғни Үҙәк менән республикалар вәкәләттәре сиктәрен билдәләгәйне. Был положение 1-се редакцияһында беҙҙең Конституцияға ла инде. 2000 йылда РФ Конституцияһы Суды 7 республиканың да Конституцияларын тикшереп, был положениены ғәмәлдән сығарҙы. "Сикләнгән суверенитет булмай" тип аңлата быны белгестәр. Хәҙерге көндә РФ составында республиканың суверенлығы тик Чечен Республикаһы өсөн генә һаҡлана.

1999 йылда Швейцария Конфедерацияһы Конституцияһы ҡабул ителгән. Уларҙа ла кантондар суверенлы, сөнки илдең Союз Конституцияһы быға юл ҡуя. Швейцариялағы дәүләт ҡоролошо конфедерация тип аталһа ла, ысынында, ул федерация ҡоролошона яҡын.

Был миҫалдарҙы килтереп, нимә әйткем килә: суверенитет төшөнсәһе бик күп дәүләттәрҙең төп документында бар һәм ул төшөнсә был дәүләттәрҙе тарҡатыусы фактор булараҡ ҡабул ителмәй. Ил барыбер ҡала, һаҡлана. Ил эсендә һинең хоҡуҡтарың күберәк була һәм субъекттар үҙаллы ҡарарҙар ҡабул итә. Берлин стенаһы емерелеп, Көнсығыш Германия ГФР-ға ҡушылған саҡта ла ГФР-ҙың Конституцияһы үҙ көсөн юғалтманы. Беҙҙең РФ Конституцияһы Германиялағы кооператив федерализмға таянып яҙылған. Унда властың вәкәләттәре сикләнгән һәм үҙәк менән субъект бер-береһенә ҡамасауламай. Ҡайһы бер дәүләттәрҙә беҙҙеке һымаҡ яҙылған конституция бөтөнләй юҡ. Мәҫәлән, монархиялы Англия XVI быуатта ҡабул ителгән конституция акттарына таянып йәшәй.

### Милли мәнфәғәт

Хәҙерге ваҡытта донъяла уҙышмаҡ принцибына ҡоролған федерализм өҫтөнлөк итә. Йәғни субъекттарҙың ҡайһыһы үҙәккә күберәк файҙа килтерә, шул финанс ағынан өҫтөнлөклө хәлгә ҡуйыла, уларҙың вәкәләтлеге тулыраҡ була. Беҙҙә лә шулай булырға тейеш тә бит. Испания, Италия кеүек федератив булмаған дәүләттәр ҙә бар. Әммә шул уҡ Испанияның Каталония, Баски кеүек субъекттарының вәкәләттәре беҙҙеке менән сағыштырғанда киңерәк. Улар хатта үҙҙәренең "Гражданлыҡ кодексы"н ҡабул итеү хоҡуғына эйә.

Мәҫәлән, Бельгияла алты субъект иҫәпләнеп, уларҙың өсөһө милли, өсөһө территориаль һанала. Был беҙҙәге милли республикалар һәм өлкәләр кеүек була инде. Ошо илдең фламанд, француз һәм немец телле берекмәләре үҙәктәге аппаратҡа үҙенең вәкилен, депутатын һайлаған. Вәкил үҙәктә ҡулланылған телде белмәүе арҡаһында кире берекмәгә саҡырып алынған. Эште тикшереү Европа судына тиклем барып етә һәм суд милли регионды яҡлап сыға.

Рәсәй Федерализмын инҡар итеүселәр йыш ҡына Америка Ҡушма Штаттары миҫалын килтереп, йәнәһе, уларҙың дәүләтселеге айырым милләттең мәнфәғәтен һаҡлауҙы күҙ уңында тотмағас, тормош алға киткән, тип үҙ дәғүәһен белдерә. АҠШ-та дәүләт теле булып инглиз теле һаналһа ла, был илдә йәшәүсе төрлө милләт вәкилдәре барыбер ҙә тел һәм милли принциптар буйынса төркөмләшеп йәшәүҙе хуп күрә. Бының менән нимә әйткем килә: конституциялар һәм закондар нисек кенә милләт мәнфәғәтен урап үтергә тырышмаһын, ундай мәнфәғәт бар икән, ул барыбер үҙаллы тәбиғи хәл ителеү юлын эҙләп табасаҡ.

"Российская Федерация гарантирует всем его народам право на сохранение родного языка, создание условий для его изучения и развития" тип әйтелә Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68-се статьяһында. Ошоно күҙ уңында тотҡанда, республикаларҙа милли телдәрҙе уҡытыу буйынса проблемалар булмаҫҡа тейеш һымаҡ, әммә проблемалар тыуып тора. Рәсәй властары, нисек кенә булмаһын, милләттәрҙең мәнфәғәтен күҙәтеү мәсьәләһе менән килешергә риза буласаҡ. Сөнки ниндәй генә власть йә режим килмәһен, һайлаусылар һәр ваҡыт кәрәк.

Бөгөн гражданлыҡ йәмғиәте лә үҫешә. Яҡуттар, мәҫәлән, хатта аҫабалыҡ хоҡуғына ла риза булмаған, шуның өсөн Үҙәк улар менән килешеүҙең башҡа юлдарын эҙләгән. Үҙәк шулай теләй, тип беҙ барыбер бер төрлө була алмаясаҡбыҙ. Кемдер аҡ, кемдер ҡара, кемдер һары, кемдеңдер күҙе түпәйып тора, кемдеңдер күҙе ҡыҫыҡ һ.б.

Барак Обама икенсе срокҡа АҠШ-тың Президенты булып һайланғас, илдең бер нисә штаты граждандары ҡултамға йыйып, АҠШ-тан сығыу теләген белдерҙе. Улар быны Обаманы президент итеп һайламауҙары менән белдерә. Уны һайлаусылар коллегияһы ғына һайланы. Шулай ҙа Обаманың испан телендә һөйләшеүселәр иҫәбенә еңеп сығыуын да танырға тура килә, был үҙенә күрә Америкала ниндәй процестар барғанлығын күҙалларға мөмкинлек бирә. Йәғни был ил властары үҙендә йәшәүсе милләттәрҙән нисек кенә алыҫлашырға теләмәһен, милли мәнфәғәт бар икән, ул һәр саҡ ҡалҡып килеп сығасаҡ. Барак Обама байҙар менән түгел, ябай халыҡ менән һөйләшә белеүе арҡаһында һайлауҙа еңеп сыҡты. Обаманың президент булып һайланыуына риза булмаусылар, әлбиттә, АҠШ-тан сыҡмаясаҡ, шулай ҙа йәмәғәтселек фекерен барыбер белдергәндәр. Ысынбарлыҡта улар АҠШ-тан сыға ала, әммә әлегә ундай механизм табылмаған.

### Миграция йөғонтоһо

Алдағы йылдарҙа донъялағы дәүләттәрҙең, шул иҫәптән Рәсәйҙең дәүләтселек ҡоролошона миграция ҙур йөғонто яһаясаҡ. Европала Ислам факторы ла көсәйә. Элегерәк Рәсәйгә башлыса Урта Азиянан, Кавказдан урыҫ телендә һөйләшә белгәндәр килһә, хәҙер Рәсәйҙең халыҡ-ара аралашыу телен бөтөнләй аңламағандар ағыла башланы. Ундайҙарға урыҫ телен өйрәтеү буйынса эштәр башланды башланыуға, әммә был аҙым ғына барлыҡ мәсьәләне хәл итеп бөтмәй. Сөнки киләсәктә Рәсәйгә Урта Азиянан, Кавказдан килеүселәрҙең һаны ҡырҡа кәмеүе, ә бына яңы ағымдың Һиндостан, Ҡытай, Филиппин һәм ғәрәп илдәренән артыуы көтөлә. Бай кешеләр хеҙмәткәрҙәрҙе хәҙер тап ошо илдәрҙән ала. Тимәк, күпмелер ваҡыт үткәс, был илдәрҙең граждандары ла беҙҙә төпләнә башлаясаҡ. Ҡасандыр хеҙмәтсе, ҡол булып Европаға килеүселәрҙең ейән-ейәнсәрҙәре бөгөн Европаның үҙен яулаған һымаҡ килеп сығасаҡ.

Миграцияның дәүләт ҡоролошона, уның конституцияһына йөғонтоһо ла ҡотолғоһоҙ. Тегеләй йәки был дәүләткә ситтән килеүселәрҙең һаны критик массанан артып китһә, улар был илдең гражданлығын алһа, сәйәси һәм башҡа хоҡуҡтар ҙа яулай башлай.

### Ҡытай ни өсөн үҫешә?

Бөгөн Ҡытай һәр йәһәттән дә алға китте. Был илдең иҡтисады ла үҫә, халҡы ла йылдам арта. Икенсе баланы тыуҙырыу закон тарафынан рөхсәт ителеүе демографик шартлауға килтереүен дә күҙалларға була. Иҡтисадты дөрөҫ итеп ҡора белеү был илде һәр йәһәттән алға сығарҙы тип уйлайым. Ҡытай дәүләте закон сығарыусыларҙы илгә донъя капиталын инвестиция формаһында йәлеп итер өсөн ҙур күләмдәге һалым льготалары булдырыуы менән быға өлгәшә алды. Урындағы властар ситтән килеүселәргә күсемһеҙ милек тыуҙырырға мөмкинлек бирҙе. Был бик мөһим, сөнки күсемһеҙ милекте икенсе дәүләткә күсереп алып китеп булмай. Икенсенән, был илдең үҫеше бөтә территорияла түгел, айырым провинцияларҙа башланды һәм яйлап-яйлап бар илгә таралды. Бының өсөн башта үҫеш нөктәләре барлыҡҡа килтерҙеләр. Өсөнсөнән, был илдең уңышында ҡытай халҡының менталитеты ла ҙур роль уйнай. Ҡытайҙың Конституцияһы беҙҙеке кеүек, ябай ғына, әммә унда кеше хоҡуҡтары һәм гарантиялары беҙҙекенә ҡарағанда әҙерәк. Уларҙың иң ҙур хоҡуғы - хеҙмәткә хоҡуҡ. Ҡытай кешеһе сабыр, уның ихтыяжы ла ҙур түгел.

### Юристар быуа быуырлыҡ

Күпселек граждандар Конституцияның барлығын белһә лә, уның йөкмәткеһе менән таныш түгел. Улар ғына түгел, хатта юристар уны уҡымай һәм белмәй. Советтар Союзында юристарҙы 52 генә юғары уҡыу йорто әҙерләһә, хәҙер Рәсәйҙә генә улар меңдән ашыу. Юристарҙы хәҙер технологик, машиналар төҙөү буйынса белгестәр әҙерләүсе юғары уҡыу йорттары, ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө филиалдар әҙерләй. Ә юристар әҙерләү өсөн улар ҡайҙан шул тиклем уҡытыусылар таба икән? Бөгөн Рәсәйҙә 30 мең самаһы судья иҫәпләнә. Японияла иһә 3 мең генә судья эшләй. Был илдә ғаилә тарҡалыу осрағы судта башҡарылмай. Унда тик ғәҙәттән тыш осраҡта ғына судҡа мөрәжәғәт итәләр, уныһы ла 0,01 процентты ғына тәшкил итә. Улар беҙ шәжәрә төҙөгән кеүек "Ғаилә календары" тигән документ төҙөйҙәр. Унда һәр бер ғаилә ағзаһының ғаилә бюджетында, ғаилә эшмәкәрлегендә индергән өлөшөн, хеҙмәтен яҙып, һанап баралар. Ә инде ғаилә тарҡалған осраҡта улар үҙ-ара һөйләшеп килешеү төҙөй. Был илдә кешене тыуғас та тәрбиәләй башлайҙар. Ата-әсә балаһына "Был - минең хоҡуғым һәм шуға күрә мин был хоҡуғымды яҡлайым" тигән аңлауҙы тыуғас та һеңдерә башлай. Ҡыҫҡаһы, япон балалары бәләкәй сағынан уҡ үҙенең мөмкинлеген белеп үҫә. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер мөмкинлектәр үҫә килә, уларҙың хоҡуғына әүерелә башлай.

Һуңғы йылдарҙа судтарҙың абруйы шул тиклем төштө һәм беҙҙең граждандар ҙа судҡа мөрәжәғәт итмәй мөмкин булмаған осраҡта ғына бара. Беҙҙә элек-электән судья ролен ауыл аҡһаҡалы, муллалар, ғөмүмән, ололар башҡарған. Шуға күрә ниндәйҙер ыҙғышлы хәл килеп тыуһа, оло кешегә барыу йолаһы беҙҙә әле булһа һаҡланып ҡалған. Совет осоронда Башҡортостан парламентында кәңәшсе хоҡуғында булһа ла Аҡһаҡалдар ҡоро була торғайны. Был йәһәттән ҡарағанда, халыҡтың үҙендә элек-электән йәшәп килгән институттың шундай юғарылыҡҡа күтәрелеүенә шаһитбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙ хоҡуҡтарыңды яҡлау һәм һаҡлау өсөн иң тәүҙә уларҙы белеү талап ителә. Был - аксиома. Һәр ҡайһыбыҙҙың илебеҙҙең һәм республикабыҙҙың төп документтарын - конституцияларын белергә тейешлегебеҙ иң беренсе сиратта быны нимә өсөн кәрәк. Ә инде ошо илдең, республикабыҙҙың, үҙ милләтебеҙҙең патриоты булараҡ, конституцион хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлау һәм һаҡлау беҙҙең изге бурысты тәшкил итә.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

✓ *Көндөң һыуыҡлығы ла онотолдо. Татлы хыял ҡанаттары уны күктәргә алып менде. Тимәк… Йәнә ҡолон һөйөү бәхеттәре насип буласаҡ, Алла бирһә. Үткән көҙҙөң бәхетле миҙгелдәре үтте уның күҙ алдынан…*



## Таңһылыу БАҺАУТДИНОВА

# Аҡбәкәл

(Хикәйә)




Аҡбәкәл ғәжәп төш күреп, һиҫкәнеп уянды. Имеш, ул Сейәлетау итәгендәге инде тиҫтә йыллап көн һайын тигәндәй тапаған таныш юлында абынып, арбаһы-ние менән тау түбәненә осто.

Аяғөҫтө генә серемгә киткән Аҡбәкәл был төшөнән тертләп уянды. Ай-һай, төнө лә ҡайһылай зәһәр һыуыҡ һуң әле. Мүкле һарай эсендә рәхәт уфылдап етенсе төшөн күргән Билдәшкә көнләшеп ҡуйҙы малҡай. Ә уға гүмер-гүмергә лапаҫтан башҡа йүнлерәк урын эләкмәне инде. Уныһына ла шөкөр итә Аҡбәкәл. Хужа былай арҡаһын септәнән өҙгәне юҡ. Үҙе үрә ул септәне. Тик бына һуңғы йылдарҙа ғына бирешеңкерәне, кәрә китеберәк тора.

Аҡбәкәл, һыуыҡтан дерелдәп, утлыҡсалағы ҡаты-ҡото араһынан тәғәм булырлыҡ ризыҡ һәрмәләргә керешә. Һарай эсендәге моңһоҙ Билдәштең уфылдаған тауышы уның уйҙарын йәнә шул тарафҡа йүнәлтте. Йәштәре бер сама уларҙың. Билдәш күп булһа 2-3 йәшкә генә йәшерәктәр. Аҡбәкәл уны быҙау сағынан белә. Үәт, хилеүәт йәшәй, исмаһам! Бына әле лә йылы һарайҙа, йомшаҡ бесән өҫтөндә генә, хәжәтенә торорға ла иренеп, түшәген бысратып, лапашып китеп, молҡоп көйшәп ятаһыр әле. Бер ҡайғыһы юҡ. Ыжғыр ел ней уға, һыуыҡ ней. Тороуына ла хуш еҫле бесән әҙер. Хужа йүгереп йөрөп аҫтын таҙалай һалыр, хужабикә иркә һүҙҙәр әйтә-әйтә һауып алыр...

Йәй етһә, айырыуса лафа инде уға. Таң менән ҡырға сығып китә лә, кис еткәс, ҡаптай ҡорһағын көскә һөйрәп, ҡапҡа эргәһенә килеп йығыла. Билдәймәсә, ҡутара эш ҡырып ҡайтҡан инде. Уфылдай-уфылдай һөтөн һауҙырғас, йәнә ҡорһағын түшәп һуҙыла һалыр. Ә ул, Аҡбәкәл... Йәйен-ҡышын арҡанан сбруй төшкәне юҡ. Йәйле-ҡышлы утыны, бесәне уның елкәһендә. Унан башҡа ла хужалыҡ эштәре тауыҡ сүпләһә лә бөткөһөҙ. Хәйер, яҙмышына үпкәләй алмай Аҡбәкәл. Һәйбәт хужаға тура килде ул. Гел хужа менән бергә йөрөп, уның күп һүҙҙәрен дә аңлай инде хәҙер.

...Зәңгәрләнеп кенә йәнә бер таң һыҙылды. Һыуыҡтың зәһәрлеге тағы арта төшкәндәй тойолдо Аҡбәкәлгә. Ней йоҡоһо йоҡо булманы... Өҫтәүенә, эсте бошороп, Аҡтырнаҡ төнө буйы олоп сыҡты. Өшөп, түҙмәй олой тиер инең, бындай ғына һыуыҡтарҙы күргәне бар уның.

Аҡтырнаҡты ла көсөк сағынан белә Аҡбәкәл. Ихатаға алып ҡайтҡандарында Хужаның йоҙроғонан саҡ ҡына ҙураҡ ине. Тәүге көндәрҙән үк Аҡбәкәл менән йән дуҫтар булып киттеләр. Ҡайҙа Аҡбәкәл - шунда Аҡтырнаҡ. Аҡыллы эт булып сыҡты ул - юҡ-барға яр һалып, хужаларҙы ла бимазаламай, аҙып-туҙып емтек эҙләп ауыл буйлап та бушҡа көлөп һалырға яратмай, бәйенән ысҡынырға маташып та биҙунданмай. Хәйер, ҡылығы арыу булғас, Хужа уны бәйҙә лә тотмай -сынйыр бик һирәк кенә эләгә уға. Унда ла йә ҡунаҡ йыйғанда, йә ауыл буйлап эт атыусылар йөрөгәндә. Ғүмерҙә булмағанды бөгөн төнгә бәйләп ҡуйғандарсы. Юҡ, бәйләгәнгә биҙунданып, бәйләүеп енмешләнгәнгә оҡшамай, ундай холҡо юҡ эттең. Берәй бәләне һиҙеп оломаһа ярай ине лә, тип шикләнеп ҡуйҙы Аҡбәкәл. Өҫтәүенә, үҙенең дә йөрәге үрәпсеп тора. Етмәһә, бынауы төшө.

Уйҙары хужалары юҫығына борольдо. Хужаның һуңғы ваҡытта һаулығының рәте китеберәк тора-тороуын, шулай ҙа аяғына ныҡ баҫа әле ул. Хужабикә тураһында әйтеп тораһы ла түгел - ут сәсрәтеп йөрөй. Ат аҡылы менән шулайыраҡ фекер йөрөттө бейә.

Шул ваҡыт... йөрәк төбөндәге серле ҡымырйыу тотош булмышын тетрәтте Аҡбәкәлдең. Таныш ҡымырйыу был, утә таныш. Хатта ләззәтле тетрәнеү. Барлыҡ борсолоуҙары һыпырып алғандай юҡ булды Аҡбәкәлдән. Көндөң һыуыҡлығы ла онотолдо. Татлы хыял ҡанаттары уны күктәргә алып менде. Тимәк... Йәнә ҡолон һөйөү бәхеттәре насип буласаҡ, Алла бирһә. Үткән көҙҙөң бәхетле миҙгелдәре үтте уның күҙ алдынан...

Илаһи бер матур иртә ине. Үләндәрҙә ысыҡтар емелдәшә. Һуңғы сәскәләрҙән наҙ тама... Шундай гүзәл бер мәлдә осратты ул Арғымаҡты...

Ҡолон һөйөү бәхеттәрен таныһыҡлағайны Аҡбәкәл. Юғиһә, һуңғы ҡолоно үле тыуып, йәнен әрнетте. Сәбәбен генә аңлай алманы бейә. Һаҡ ҡына йөрөргә тырышҡан һымаҡ ине былай. Хәлен аңлап, хужа ла бик аяғайны үҙен.

Ҡолон эйәртеп йөрөүҙәре үҙе бер бәхет был донъяла. Эргәндән һикерәнләп, уйнаҡлап ҡына сапҡан ҡолонона ҡарап, бар донъяны онотаһың. Имеҙеп-иркәләүҙәр һуң әле... Ул мәлдәрҙең ләззәтлеген шуны кисергән инә йәндәр генә бөтә асылында аңлай алалыр. Ә ҡолонондоң иркен ҡырҙарҙа һикергеләп уйнауын күҙәтеүе үҙе бер әйтеп аңлатҡыһыҙ гүзәл миҙгел.

Бындай бәхеттәрҙе байтаҡ татыны Аҡбәкәл. Әлбиттә, бәғер ите булған балалары менән айырылышыу һағыштарын да аҙ кисермәне инде... Иркәбайын таныш түгел кешеләр алып китте. Ҡоралайы, иҫләһәң ауыр инде, һуғым булды... Дөлдөлә һабантуйҙа янып ҡуйҙы. Эй йылғыр ҙа ине уныһы. Атаһының тоҡомо шәп ине шул.

Күңелен билән алған ауыр иҫтәлектәрҙән тиҙерәк арыныу сараһын эҙләп, Аҡбәкәл уйҙары менән йәнә йөрәк төбөндәге сабыйына урап ҡайтты. Имен генә тыуһын инде ҡолонсағы. Бәлки, ерҙәге һуңғы ҡыуанысы булыр... Тфү-тфү инде. Шулай ҙа һуңғы ваҡытта кәре ҡайта, көсө кәмей башлағанын һиҙә Аҡбәкәл. Ерҙә байтаҡ гүмер йәшәп ташлаған бейә күрә йөрөй - ундайҙарҙы, ғәҙәттә, хужалыҡта оҙаҡ тотмайҙар. Бынауы аяғы ла сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй. Былтыр йәй аҙағында ҡазаланып ҡуйҙы шул. Хәҙер иҫләгеһе лә килмәй.

Әле генә белгән шатлығы эсенә һыйманы Аҡбәкәлдең - тиҙерәк берәйһе менән уртаҡлашҡыһы килде. Тик кем менән... Арҡыры көйшәп ятҡан моңһоҙ Билдәшкә аңлатып ҡара, ана. Ней, үс иткәндәй, Аҡтырнағы бәйле. Хәйер, ул үҙе бала наҙын тәмләп ҡарамаған, сабый һөйөү бәхетен татымаған нәмә барыбер аңламаҫ та ине. Их, аҙбар тирәһенә тиҙерәк Хужа сыға һалһын ине. Ул, моғайын, һиҙер Аҡбәкәлдең күңел йырлауы серен. Хужа лапаҫ тирәһенә килеү менән күңелле кешнәп ебәргән булыр, унан ялан көртә буйлап енелсә сабып әйләнер. Их, теле генә юҡ шул. Юғиһә, күп һүҙҙәрҙе эстән генә ҡабатлап та ҡарағаны бар. Кеше һөйләгәндең дә күбеһен аңлай...

...Сабып туҡтағас, хужа эргәһенә барып, уның иңенә моронон терәп торор, сикәләрен ялап алыр. Һиҙер Хужаһы, һиҙер. Ҡыуанысынан яратып та алыр әле. Унан әбейенә һөйөнсәләргә йүгерер. Келәтенән сығарып һоло ла һалыр...

Көн инде байтаҡ яҡтырып бара икән. Уйҙарға бирелеп тороп, ваҡыт үткәнен дә абайламай ҡалған. Ошо мәлдә ярата Аҡбәкәл. Тотош донъяны зәңгәрһыу яҡтылыҡ сорнаған илаһи мәл яңы көнгә өмөт, ышаныс уята.

Бөгөн, әмәлгә ярағандай, хужалар ҙа көндәгенән иртәрәк ҡуҙғалды һымаҡ. Мөрйәләренән аҡ төтөн ҡара таңдан һуҙылды. Танауҙы тәмле еҫ ҡытыҡланы. Ғәҙәттә, ҡунаҡ саҡырғанда сыға ундай еҫ. Ҡунаҡ саҡырыр булһалар, иртә лә торалар.

Солан ишегенең түҙемһеҙләнеп көткән таныш шығырлауы иштелгәс, Аҡбәкәл башын шул тарафҡа бора һалды. Юҡ, яңылышмаған, Хужа күренде. Хәҙер ул иң башта Аҡбәкәл янына киләсәк, уны яратып аласаҡ. Унан бесән һаласаҡ. Бәлки, һоло ла бирер әле. Ошоноң һымаҡ һыуыҡта ашауҙы айырыуса иркенәйтеп ебәрә торған ул.

Бәй, Хужа бөгөн күп йылдар ҡыуған ғәҙәтен үҙгәртеп, лапаҫ яғына күҙ ҙә һалып тормаҫтан, һыйыр аҙбары яғына үтеп, Билдәшкә бесән ташланы ла кире өйөнә ашыҡты. Аптырауҙан ғарҡ булып көртә аша башын һонп ҡарап торған Аҡбәкәлгә берәй генә күҙ һалһасы. Ҡарашын йәшергән дә һымаҡ хатта. Аҡбәкәл аптырауҙың сигенә сыҡты. Ғүмерҙә булмаған хәл был. Үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр Хужа уның донъяла барлығын онотто түгелме? Тиген түгел. Аҡбәкәл был йомаҡтың серен эҙләй башланы. Үпкәләгәндер, тиһән, үпкәләтеү түгел, ҡырыныраҡ ҡараш та ташлағаны юҡ шикелле.

...Ҡояш ҡалҡыуға ҡапҡала күрше Хужа, тағы ла бер-нисә ир заты күренде. Бик дәртле әңгәмәләшә үҙҙәре. Килеп, көртә аша уны, Аҡәбәкәлде күҙҙән үткәрҙеләр. Бындай мәғәнәһеҙлектән тамам йәне үртәлгән Аҡбәкәл уларға арт ҡуйып тороп ҡалды. Өйгә инеп сыҡҡас, ир заттарының тауыштары уғата көрәйҙе. Ауыҙҙарынан таралған әскелтем еҫ бейәнең танауына уҡ килеп бәрелде. Фу, ниндәй һаҫыҡ еҫ, тип Аҡбәкәл ситкә боролдо. Был еҫ һирәк-һаяҡ ҡына уның Хужаһынан да сығыштыра. Ул мәлдә Хужа айырыуса йомартланып китә - иркә һүҙҙәрҙе ҡоя ғына инде. Ундай саҡта, ғәҙәттә, Аҡбәкәл Хужаның яҙмышын үҙ иңенә ала. Берәй ергә барһалар, атының ҡылығын белгән хужа яҙмышын тотошлайы менән уға тапшырып, арба йәки сана төбөнә һуҙылып, хырлай башлай. Ә Аҡбәкәл үҙ яйына ғына алып ҡайта уны ҡапҡаһы төбөнә.

Тупһала Хужа ла күрендә. Элек һирәк-һаяҡ ҡына, көнөнә ике-өс тапҡыр ғына тәмәке быҫҡытып алған кеше бөгөн өй ҡыйығындағы ҡара таңдан тырышҡан мөрйәнән ҡалышмай - борлата ғына. Тимәк, йөрәген әсеткән етди сәбәп бар. Аҡбәкәл Хужаһының күңел торшона тиклем аңларға күнегеп бөткән инде. Шуға әле үҙенең барлығын иҫләтеп алырға йыйынып бөткән еренән туҡтап ҡалды. Бындай мәлдә Хужаны асыуландырмау хәйерле. Бер ашамағандан ғына үлмәҫ әле. Ана, утлыҡса төбөндә әҙ-мәҙ ҡаты-ҡото ла бар әле. Уның ҡарауы аҙаҡтан, үҙенең ғәйебен юйыр өсөн, бишләтә иғтибар бүлер әле Хужа. Шулай уйланы Аҡбәкәл.

Бәй, Күрше Хужа бысаҡ ҡайрай башланы. Тимәк, билдәле, мал һуялар. Күрше хужаның ҡулы иплe, тип, был эште гел уға йөкмәтә шул был тирәләгеләр. Хужа келәттән бер тотам һалабаш, арҡан сығарып тупһаға һалды.

Былай булғас, шик юҡ, мал һуялар. Тик... сират кемгә? Шуныһын ғына аңламай бейә. Хужа һуғымын тәүге һыуыҡта уҡ эшкәртеп келәткә элгәйне. Хужабикә әс-ҡарының да икенсе тапҡырға ҡарҙа тапап, аласыҡта бешекләне. Билдәштең былтырғы быҙауын - Төймәкәйҙе һуғым иттеләр быйыл. Моңһоҙ Билдәш белмәй ҙә ҡалды, ахыры. Бигерәк сибек кенә булып тыуғанға шулай исем ҡушҡанылар. Тиҙ үк үҫеп, мал рәүешенә инде быҙау. Һуйыр мәлгә,

күрәйеп, бөтөнләй үгеҙ рәтенә үк инеп киткәйне.

Барыһына ла ул, Аҡбәкәл шаһит шул. Күп ташыны инде ул һуғым иттәрен. Был юлы кемгә сират еткәнен генә аңлай алманы Аҡбәкәл. Билдәшкә, тиер инең, уның быҙаулар мәле етеп килгәнгә оҡшай. Хужабикә лә уны аҡыллы, һөтлө булғанға маҡтап туймай. Һарыҡ, тиер инең, уның өсөн Хужа улай ҙурҙан ҡупмаҫ ине. Әлбиттә, үҙенә лә бер көн ошо яҙмыш килерен аңлай Аҡбәкәл. Тик Хужаның бысаҡҡа ҡулы барырына ышанмай...

Хужа, һылтыҡлап, ниһайәт, уның яғына йүнәлде. Онотмаған, тип шатлыҡтан үрһәләнде ат йөрәге. Юғиһә, бынауы сасҡау һыуыҡта ас килеш сана һөйрәгеһе килеп тормай әле. Көнө көнмө һуң әле - һыуығы електәргә үтеп бара.

Аҡбәкәл ҡапҡанан инеп килгән Хужаға ҡаршы атланы. Һөйөлгөһө, иркәләнеп алғыһы килеп китте аттың. Тик Хужа арҡаһынан берҙе генә ятты ла, күҙен ситкә алып, һарай мөйөшөнә йүнәлде. Ә ниңә бесән кәбәненә түгел, тип аптыраны йәнә бейә. Оҙаҡ ҡына сөйҙәге йүгәнде ысҡындыра алмай яфаланған Хужаға, танымағандай, аптырап ҡараны Аҡбәкәл. Йөҙө һурылып киткән кеүек, үҙе гел күҙҙәрен йәшерергә тырыша. Хужаһын йәлләп, йөрәге һыҙылды малҡайҙың. Әллә ауырыуы көсәйеп киттеме икән? Хужаға еңелерәк булһын өсөн, ул йәһәтләп башын эйә һалды - йүгәнде кейҙерергә уңайлыраҡ булыр. Йәлләй ул Хужаны, ихлас йәлләй. Анауы ике малайының да йүндәре булмай сыҡты. Икеһе лә ҡырға китте лә юғалдылар. Йәй булһа, йып-йылтыр деүелдәк арбаларына тейәлеп килеп китәләр ҙә ул, тик аталарының донъя эштәрендә ғәмдәре лә юҡ. Үҙҙәренең балалары һөйләшә лә белмәй, әллә нимә тип мығырҙай ҙа ул, тик Аҡбәкәл уларҙың телен аңламай. Хужа, бахыр, ыҙалана-ыҙалана шуларса һупалап маташҡан була. Әбейе лә үҙенең яратыуын ярым-йорто аңлатып маташа.

Анауы йылы урманда утын әҙерләгәндә ағас баҫҡайны Хужаны. Шунан бирле мандый алмай. Аяғынан һылтыҡлап ҡалды. Яуын көндәрҙә айырыуса кәйефе булмай - һыҙланалыр инде. Шуға ундай көндәрҙә Аҡбәкәл Хужаһын айырыуса һаҡ йөрөтөргә тырыша. Хәйер, үҙенә лә ят түгел һыҙланыу тигән нәмә. Үткән йәй бесәндә ағас төпһәһенә эләгеп, үҙе лә аяғын имгәткәйне. Күбә тарттырып йөрөй ине. Күрше хужаның шаян ҡара малайы менгәйне эйәргә. Ну, ҡыуа бит, елғыуар. Берҙән, күгәүен-себене тынғы бирмәй, икенсенән - малай. Ҡыумаһалар ҙа, үҙ эшен яҡшы белә Аҡбәкәл - ятлап бөткән инде. Етмәһә, теге малай тал сыбыҡ һындырып алып тороп ҡайыҙларға тотонмаһынмы. Тамам йәне көйгән Аҡбәкәл, сығындап, малайҙы алып ҡасты ла китте. Шунда, диләнкә буйлап елгән саҡта, аяғын яңылыш ағас төпһәһенә эләктереп шаҡарҙы. Ул абынған ыңғайға малай китте башы аша. Үҙе өсөн түгел, малай өсөн ҡото осто бейәнең. Әҙерәк ҡурҡытып, аҡылға ултыртып алайым, тигәнсе, берәүҙең ғәзизенең башына етә яҙҙы. Ярай әле, аяғы өҙәңгегә етмәгән булған. Туп кеүек кенә осоп китте. Үҙе лә күлдәктә тыуған нәмә булған - алдағы күбәгә бәрелеп, шуның бесәне менән ҡуша шыуған. Аҡбәкәл үҙе лә тәгәрәне. Шунан бирле һылтыҡлабыраҡ ҡалды. Һуңынан Хужаның күҙенә ҡарай алмай, ғәйебен нисек йыуырға белмәй хитланды бейә. Ошонан аҙаҡ үҙен ауыр йөккә екмәне Хужа, гел еңел-елпегә генә йөрөттө. Аяуы булды инде. Ярай, ҡараға аяҡ баҫһа, үҙен аҡлар әле Аҡбәкәл. Йылҡы малына шифа булырҙай үләндәрҙе яҡшы белә.

Хужа үҙенең артынан күндәм генә эйәргән Аҡбәкәлде етәкләп алып барып, теҙгенен Күрше хужа ҡулына тотторҙо. Йәнә аптыраны малҡай. Санаға егергә йыйынған һымаҡ түгелдәр. Сана, ана, ситтә тора. Тәртәләрен күтәртеп үк ҡуйғандар. Шул ваҡыт аңына барып еткән уйҙан Аҡбәкәл йығылып китә яҙҙы - теге бысаҡ уның яҙмышын хәл итеү өсөн ҡайралдымы икән әллә? Йылҡы малын бит, ғәҙәттә, ошоноң кеүек сатлама һыуыҡ көндәрҙә... Тотош тәне дерелдәп китте бейәнең. Юҡ, Хужа быға бармаҫ. Күпме ыҙалы, нужалы юлдарҙы, ауыр йылдарҙы иңгә иң терәшеп бергә үтеп, айырылмаҫ дуҫтарға әйләнеп бөттөләр бит инде.

Йөрәге яныуына түҙмәй, эстән үрәпсене йылҡы, тик ярһыуын тышҡа сығарманы. Бәйгегә сыҡҡан ат кеүек йөрәк тибеше йышайҙы, тыны ҡыҫылды. Ҡапыл Хужа менән ҡараштары тап булышты. Эске һыҙланыу уҡыны ул ҡараштан Аҡбәкәл. Хужа, тиҙ генә әйләнеп, өйөнә ҡарай һылтыҡланы. Ә бейә аҡһай-аҡһай Күрше хужа артынан эйәрҙе.

Ҡапҡа эргәһенә еткәс, туҡтап, һуңғы тапҡыр тыуған нигеҙенә күҙ ташланы малҡай. Ана, әүеҫлектә арбаһы тора, был яҡтараҡ - санаһы. Һарай мөйөшөндә - ҡамыт-дуғалары, ҡыңғырауы. Хужа барыһын да теүәлләп элеп, йыйыштырып ҡуйған. Тышауы ла шунда. Әрҙәнә башынан иҫке септәһенең бер мөйөшө күренеп тора. Кемгә ҡалыр икән былар, тип уйланы бейә.

Ояһы янында Аҡтырнаҡ аптырап тора. Хатта алдындағы ашына ла теймәгән, ахыры. Уныһының өҫтө боҙланып киткән. Ҡараштары осрашҡас, эт ярһып-ярһып өрөргә тотондо. Күҙ ҡарашын өйҙөң ихатаға ҡараған тәҙрәһенә күсерҙе. Хужа менән Хужабикә ҡарап торалар икән. Аҡбәкәлдең күҙ һирпеүенән икеһе лә ҡапыл юҡ булды...

Күңеле тулған Аҡбәкәл үҙе лә һиҙмәҫтән кешнәп ебәрҙе. Уның кешнәүенә Аҡтырнаҡтың олой-олой өрөүе ҡушылды. Йүгәнен тартҡандарына айнып киткәндәй булды бейә. Шулай ҙа тәҙрәгә тағы бер тапҡыр күҙ һалмай булдыра алманы. Хужаны күреү ине теләге. Их, телем юҡ шул, ҡолонсаҡҡынам әрәм була бит, Хужаға ат орлоғо ла ҡалдыра алмайым инде, тип әрней ине уның йөрәге был мәлдә.

Ҡапҡанан урамға ла сыҡтылар. Аҡтырнаҡтың бәйҙән ысҡынырға тырышып, сыйнап-сыйнап илауы йөрәген әрнетте Аҡбәкәлдең. Гел бергә йөрөп өйрәнгәндәр шул.

Таныш тыҡырыҡҡа төштөләр. Кисә генә хужа ошо тыҡырыҡ буйлап һуғарып алып ҡайтҡайны. Тимәк... Малдарҙы яр буйында һуялар был ауылда. Был тыҡырыҡ буйлап күп үтте Аҡбәкәл. Аяҡтарын көскә һөйрәп барған ат, ҡотолғоһоҙлоҡтан йәне әрнепме, абынып китте. Күрше хужа, быны күреп, башын ҡағып ҡуйҙы.

- Мәлендә өлгөрҙө күрше, юҡһа, бөтөнләй хәле бөткән икән быһың. Ҡышты сығырлыҡ әүҡәте ҡалмаған, - тип мығырлағаны ишетелде.

Бына теге йылға буйы. Баяғы ирҙәр күптән килеп, усаҡ яғып, күңелле әңгәмә ҡороп ебәргәндәр. Ара-тирә геү килешеп һаһылдашҡандары ла ишетелеп ҡала. Аҡбәкәл кеше тигән йән эйәһенең шул тиклем дә кешелекһеҙлегенә хайран ҡалды - эргәләрендә берәү яҡты донъя менән мәңгелеккә бәхилләшергә йыйына, ә улар донъяларын онотоп хахылдаша.

Ҡулына арҡан тотоп атҡа яҡынлаған бер ир, ҡапыл артҡа сигенә биреп, туҡтап ҡалды ла:

- Аттан да аҡыллы хайуан юҡ, тиҙәр ине, хаҡ икән, ана, ҡарағыҙ әле, күҙҙәренән соборлап йәш аға. Аттар ҙа илай белә икән, - тип бот сапты.

Уңарса баһырау тотҡан ир ҙә килеп етте. Уҫлаптай биш-алты ир заты Аҡбәкәлгә яҙмыш хөкөмө сығарырға әҙерләнде...

Аҡбәкәл һуңғы тапҡыр Сейәлетау, Ҡаршытау тарафтарына күҙ һалды. Тирә-йүндә хайран ҡалмалы аҡлыҡ. Хатта күҙ сағыла. Донъя шул тиклем матур икән дә. Гел эш менән булып йөрөп, шул матурлыҡты күрергә лә ваҡыты булманымы икән ни? Әллә һуңғы һулыш шулай донъяның быға са күрмәгән илаһилыҡтарын асып бирәме икән?..

...Әҙәм көсө етмәгән эш бармы ней - Аҡбәкәлде лә ергә йығып һалдылар. Хәҙер уға бары күк кенә күренә. Аһ, күк шундай зәңгәр икән дә. Төпһөҙ зәңгәрлеккә хайран ҡалды малҡай.

Үҙен уратып баҫҡан ирҙәр араһынан үтә лә таныш йөҙҙө эҙләне. Бәлки... Тик Хужа юҡ ине араларында...

Бысаҡ тотҡан ҡулдар йәнә туҡтап ҡалды - бейәнең күҙенән туҡтауһыҙ йәш аға ла аға ине.

...Ярай, салырҙар, унан тиремде һыҙырырҙар. Әхәзләмәй генә һыҙырһалар ярай ҙа. Исмаһам, Хужа кәрәгенә тотонор ине...

Ҡапыл йәшен һуҡҡандай, тертләп китте Аҡбәкәл - ә итен, итен һуң нимә менән алып ҡайтыр Хужа... Аяғы ауырта бит әле үҙенең. Күтәреп, имгәнеп ҡуймаһа ярай ине лә, тип үкһене йылҡы йәне.

Эсендәге көслө тулау уны ҡабат ысынбарлыҡҡа алып ҡайтты. Сабыйғынаһы ла һиҙҙеме икән ни... Түҙ, ҡолонсағым, түҙ, хәҙер икебеҙ бергәләп йыһанға осорбоҙ, тип шыбырланы ул эстән генә.

...Аҡбәкәл ҡолонсағы менән Сейәлетау итәгенән сабып бара. Сабалар ҙа сабалар. Шундай еләҫ, рәхәт. Бына Сейәлетауҙың иң текә моронона ла еттеләр һәм икәүләп ап-аҡ томан эсенән йөҙөп киттеләр. Рәхәтлек йәнде иркәләй. Тора-бара үҙҙәре лә ап-аҡ томанға әүерелде...

"Их, Хужа томан араһынан беҙҙе тапмаҫ инде. Күҙе лә етә күрмәй. Ней ҡыңғырауым юҡ", тип әрнене Аҡбәкәлдең күккә олғашып барған йәне.

Был Аҡбәкәлдең фани донъялағы һуңғы әрнеүе ине...

...Тоғролоҡ тигән төшөнсәнән башҡаны белмәгән ат ғүмеренең аҡтыҡҡы минутында ғына был донъяла хыянат тигән ҡот осҡос төшөнсә лә бар икәнлегенә төшөндө...

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЫСЫН БАТЫР...

## дөрөҫ һүҙен ил алдында әйтер

**Хәлил БАРЛЫБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, РФ Президенты ҡарамағындағы Халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры:** Бөгөнгө шомло осорҙа бик урынлы бирелгән был һорауға иң актуаль өс мәғәнәле хәбәр-яуапҡа иғтибар итергә саҡырыр инем. Беренсенән, милләттең аҡыл эйәләре халҡыбыҙ яҙмышына битараф булмаһын, көсө һәм мөмкинлеге булған тиклем халҡына хеҙмәт итһен ине. Ҡайһы бер юғары исем йөрөткән йәки оло дәрәжәле шәхестәребеҙ аш-һыу бүлмәһендә һөйләшкәндә "Мин дә мин" тип күкрәк ҡағалар ҙа, йәмғиәт проблемаларына - сетерекле һорауҙарға ситтән һәм өҫтән ҡарайҙар, халҡыбыҙ мәнфәғәтен ҡайғыртҡан төрлө йәмәғәт ойошмаларының эшендә ҡатнашып бармайҙар. Ул ғына ла түгел, хатта уларҙың барлығы, ниндәй эш башҡарыуы тураһында ла хәбәрҙар түгел күптәр. Бындай кешеләр беҙ халҡыбыҙ, республикабыҙ мөстәҡиллеге өсөн көрәшкән осорҙа ла күп кенә ине, әле лә бар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Һәр кем үҙенә шундай һорау бирергә тейеш, минеңсә: "Мин халҡым өсөн ниндәй файҙалы эштәр башҡарҙым?" Ошо һорауға тәрән һәм ентекле яуап эҙләһә, ҡайһы берәүҙәр халҡына үҙенән бер тинлек тә файҙа килмәүен күрә алыр ине, бәлки. Файҙаһыҙ кеше булып үткәргән тормоштоң мәғәнәһеҙ икәнлеген аңлап һәм башҡаларға ла шуны төшөндөрөп йәшәргә тейеш беҙҙең аҡыл эйәләре.

Икенсенән, хәҙерге осор проблемалары Салауат Юлаевтар һәм Зәки Вәлидиҙәр замандарындағы проблемаларҙан ныҡ ҡына айырыла. Шуға күрә көрәш ысулдары ла икенсерәк булырға тейеш бөгөн. Халҡыбыҙ яҙмышы башҡа милләттәр, бөтә донъя тормошо менән ныҡ бәйле заманда йәшәйбеҙ. Бөгөн зыялы шәхес төрлө фекер алышыуҙарҙа әүҙем ҡатнашып, аҡыллы сығыштары аша халыҡ мәнфәғәте өсөн көрәшергә һәм халыҡты ла шуға өндәргә тейеш. Дыуамаллыҡ, тамаҡ йыртыу аша алып барылған экстремистик эштәр халҡыбыҙға файҙа түгел, тик зыян ғына килтерә. Беҙҙең ҡайһы бер егеттәр төрлө йыйылыштарҙа талаш, ығы-зығы ҡуптарып, туҙға яҙмаған телмәр һөйләп ваҡыт үткәрә, хатта ки, тағы ла үкенеслеһе - халыҡтың аңын бутай. Ошондай хәлдәрҙе булдырмаҫҡа тырышырға кәрәк ине лә беҙгә... Бының кеүек күңелһеҙ хәлдәр ҡабатланмаһын өсөн һәр милләттәш юғары кимәлдә фекер йөрөткән белемле һәм әхлаҡлы кеше булырға ынтылырға тейеш.

Өсөнсөнән, беҙҙең ҡайһы бер күренекле кешеләр араһында әхлаҡи нормаларға ярамаған ғәҙәттәр: яла яғыу, бер-береңә ҡушамат тағыу, үҙенә оҡшаңҡырамаған кешене күрә алмау, көнләшеү, кешене бөтөрөп ташлау һымаҡ кире ғәҙәттәр осрай. Шул арҡала халҡыбыҙ күп зыян күрә, бихисап сәйәсмәндәребеҙҙе лә тап шул арҡала юғалттыҡ та инде. Әлеге мәсьәләне һәр ваҡыт күҙ алдында тоторға, шунан сығып эш итергә тейешбеҙҙер.

Йомғаҡлап әйткәндә, беҙгә бер-беребеҙгә ҡарата ихтирамлы, берҙәм булырға һәм аҡыллы фекер йөрөтөргә ынтылырға кәрәк. Халҡыбыҙҙың бер әйтеме буйынса, беҙ бер-беребеҙгә "бахыр" тип түгел, "батыр" тип өндәшергә, тап ошондай мөнәсәбәттә булырға тейешбеҙ. Шул ваҡытта ғына беҙ үҙебеҙҙе ысын мәғәнәһендә халыҡ итеп һаҡлай аласаҡбыҙ.

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИКМӘК ТӘ...
## диетик аҙыҡ

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, офис хеҙмәткәрҙәренең дүрттән бер өлөшө хроник күңел төшөнкөлөгөнән яфалана икән. Бындай саҡта уларға ҡәһүә һәм шоколад ярҙамға килә. Британия тикшеренеүселәре офистарҙа эш көндәре нисек үтеүен өйрәнеп, эш урынындағы төшөнкөлөктөң хеҙмәткәрҙең хеҙмәте сифатына ғына түгел, ә физик һәм психик сәләмәтлегенә тәьҫир итә икәнен асыҡлаған. 102 хеҙмәткәрҙән һорау алғандан һуң, уларҙың ҙур ғына проценты был төшөнкөлөктө ҡәһүә эсеп йәки шоколад ашап "баҫа", уларҙың ҡайһы берҙәре эш көнөнән һуң спиртлы эсемлектәр ҡулланыуы асыҡлана. Эште күңелле итеп алып барған, хеҙмәткәрҙәр бер-береһе менән йыш аралашҡан коллективтарҙа бындай хәл һирәк осрай, ти тикшеренеүселәр. Шулай уҡ етәксе талапсан булған урындарҙа ла хеҙмәткәрҙәрҙең күңелһеҙләнеп, төшөнкөлөккә бирелеп ултырырға ваҡыты юҡ.

■ Канаданың сәләмәтлек проблемаларын тикшереү институты ғалимдары кәңәш итеүенсә, дарыуҙар ҡабул иткәндә грейпфрут емеше ашарға ярамай. Доктор Дэвид Бэйли белдереүенсә, грейпфрут дарыуҙың тәьҫирен арттырыу йәки уның көсөн кәметеү сифатына эйә. Ә был сәләмәтлек өсөн дә, пациенттың ғүмере өсөн дә хәүефле. Грейпфруттың составында булған фуранокумарин матдәһе ашҡаҙан-эсәк трактындағы энзимдарға тәьҫир итә һәм дарыуҙың үҙләштерелеү күрһәткестәрен үҙгәртә. Табиптар хәҙер был тураһындағы мәғлүмәттең дарыуҙарҙың ҡабына яҙылыуын талап итә.

■ Сегален исемендәге Бордо университетында (Франция) үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, автомобиль салонын яҡтыртыусы күкһел төҫтәге ут кофеин тәьҫиренә тиң икән. Ғалимдар тикшеренеүҙәрҙә ҡоролмалар панеленә төнөн йөрөгәндә яҡтырып торған күкһел лампа ҡуйылған автомобиль ҡулланған. 48 ир-егет ошондай автомобилдә өс сәғәт эсендә 15 минутлыҡ ҡына туҡталыш яһап, 400 км араны үткән. Юл буйына водителдәр йә ошо яҡтыртҡысты ҡулланған, йә ҡәһүә эскән. Уяулыҡты йәки уның түбәнәйеүе күрһәткесе итеп юл линиялары ҡулланылған. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, күкһел яҡтыртҡыс ҡулланыусылар был линияны уртаса - 15, ҡәһүә эсеүселәр - 13, кофеинһыҙ ҡәһүә ҡулланыусы водителдәр 26 тапҡыр киҫкән. Шулай итеп, был һөҙөмтәләр хәүефһеҙлек системаһын эшләгәндә ҡулланылыуы мөмкин, ти ғалимдар.

■ Испания ғалимдары раҫлауынса, туҡланыу рационынында икмәк мотлаҡ булырға тейеш. Белгестәр йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуы хәүефе юғары булған 275 оло йәштәге кешене тикшереп ҡараған. Һөҙөмтәлә, көн һайын икмәк ашаусыларҙың ҡаны күпкә сәләмәтерәк булыуы асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе, профессор Рафаэль Ллорах билдәләүенсә, икмәк балансы диетаның элементы булып тора. Икмәкте даими ҡулланыусыларҙың ҡанында инсулин кимәле лә түбән, был үҙ сиратында туҡымаларҙың инсулин тәьҫиренә бирешмәүен булдыра, тимәк, диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Диетологтар ҙа икмәк ашауға күптән һыңай ҡарай. Улар фекеренсә, ҡала кешеһе был ризыҡты көнөнә 200 грамм ҡулланырға тейеш.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

**Әгәр беҙгә кемдер шулай тип әйтһә, был мөрәжәғәткә иғтибар ҙа итмәҫебеҙ көн кеүек асыҡ. Әгәр ҙә инде бындай мөрәжәғәтте Юғары аң йәки беҙҙең фәрештәләребеҙ ебәрә тиһәләр, күптәр һуҡ бармағын сикәһе тирәһендә борғослап күрһәтәсәк. Ләкин был мәғлүмәтте ҡабул итергә теләйбеҙме, юҡмы, бәғзе бер халыҡ хәүефләнеп, хафаланып ахырызаман көткәндә, ысынлап та беҙгә юғарыраҡ үлсәмдәрҙән шундай мәғлүмәт килә. Әммә уны ишетеү, аңлау, ҡабул итеү өсөн үҙ-үҙеңде тыңларға, яңы мәғлүмәт ҡабул итеү өсөн йөрәгеңде һәм күңелеңде асырға, уға ышанырға ғына кәрәк. Бөгөн беҙ ысын мәғәнәһендә мөғжизәләр заманында йәшәйбеҙ һәм ахырызаман урынына мөғжизә көтөп, фәндә космоэнергетика булараҡ билдәле яңы йүнәлеш магистры Рауфан МОРТАЗИНдан бөгөнгө хәл-торошҡа аңлатма биреүен һораныҡ.**

# "ЕР КЕШЕЛӘРЕ, УЯНЫҒЫҘ:
## үҙгәрештәр заманы килә!"



### Генофондты ҡотҡарыу юлы

Хәҙерге ваҡытта генетик модификацияланған продукттар ҡулланыу, яралғыны әсә ҡарынында уҡ һәм тыуғас та ультратауыш нурҙары (УЗИ) менән нурландырыу, был процесты балаға 1-2 ай булғас, уның башын тикшереү һылтауы менән тағы ла ҡабатлау һәм башҡа кире факторҙар һөҙөмтәһендә 5-се расаның (кешеләр) генофонды юҡҡа сығыу алдында тора. Иғтибар итһәгеҙ, хатта элек күпләп үрсегән тараҡандар ҙа хәҙер бөтөп бара - улар өҫтәлдән йәки иҙәнгә төшкән беҙ ашаған ризыҡ валсыҡтарын ашап, артабан үрсей алмай. Ошо кире күренештәрҙе күреп, беҙҙең матур планетаны ҡотҡарыу өсөн Юғары аң Ергә юғарыраҡ үлсәмгә күсергә тәҡдим итә. Ер тере, ул тәҡдимде ҡабул итә һәм хәҙерге ваҡытта уның магнит полеһы ҡабаттан тергеҙелә, энергетикаһы, тирбәлеше арта. Был процесс бер бөгөн генә башланмаған, ул 1987 йылдан бирле бара һәм энергетиканың артҡанын ғалимдар төрлө приборҙар менән үлсеп раҫлай килә. Мәҫәлән, уҙған быуаттың 80-се йылдары аҙағына тиклем Ерҙең энергетикаһы уртаса алғанда 7,8 герц булһа, артабан ул яйлап күтәрелә башлай.

Был процесс планетала күп һанлы үҙгәрештәргә килтерә (ерҙең кинәйеүе, магнит полюстарының күсеүе, температураның күтәрелеүе, ваҡыттың шәбәйеүе, ҡартайыу процесының аҡырынайыуы һ.б.). Кешеләр ҡабат Аллаһы Тәғәләне таныуға, барлыҡ йән эйәләренең берлеген аңлауға һ.б. кире ҡайта.

Хәҙер кристаллик тирбәлешле балалар тыуа, уларҙың ДНК-һы сифат яғынан икенсе, шулай уҡ ҡандары ла икенсе төрлө (хәҙер алты ҡан төркөмө билдәле). Бындай балаларҙың ДНК ептәре һаны күберәк (ғәҙәти кешенеке 2-әү булһа, яңы тыуған сабыйҙарҙа улар 12 булыуы мөмкин), улар мәғлүмәтте туранантура неско донъянан ала, сәләмәтлектәре камил, Юғары аңдың наҙлы, яғымлы, камил, нур һәм мөхәббәт менән тулы дөйөм йортобоҙ икәнлеген белә.

Энергия шулай итеп үҙгәреп тора, ә инде быйыл 12 декабрҙән ул тағы ла көсләрәккә әйләнде һәм кеше артабанғы көслө энергияларға сыҙаһын өсөн адаптация осорон башланы, тиергә мөмкин. Энергияның артыуын кешеләрҙең юҡҡа хәүефләнеүенән, уларҙа ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килеүенән, урамда китеп барғанда ҡапыл ҡолауынан, кеше үҙен насар тойһа ла, табиптар бер ниндәй анығ диагноз ҡуя алмауынан һ.б. күренештәр аша тойорға була. Әгәр кешенең тирбәлеше түбән, ә Ер тирбәлешен даими арттыра икән, килеп тыуған ҙур айырма һөҙөмтәһендә бындай күренештәр буласаҡ әле. Уларҙы булдырмаҫ өсөн кәмендә тәндә лә, аңды ла тынысландырып, күркәк уртаһында ҡояш барлыҡҡа килтерергә һәм ауроны мөхәббәт менән тултырып, бар тирәяҡҡа мөхәббәт ебәрергә, кире, насар уйҙарҙан һәм ҡылыҡтарҙан, эштәрҙән арынырға кәрәк.

### Дүртенсе үлсәм. Нимә ул?

Һуңғы ваҡытта Башҡортостандың төрлө мөйөштәренән, ауылдарҙан шылтыратып, халыҡ араһында ҡурҡыу тойғоһо башланыуы, магазин кәштәләренән барлыҡ продукция, шырпы һәм майшәмдәрҙең юҡҡа сығыуы хаҡында белдерәләр. Тимәк, халыҡҡа дөрөҫ мәғлүмәт барып етмәгән. Ысынбарлыҡта, Ер тирбәлеше күтәрелгәс, беҙ теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән 4-се үлсәмгә күсеүебеҙ ихтимал. Йәғни нисек ултырабыҙ йәки ятып йоҡлайбыҙ, шулай уҡ килеп торасаҡбыҙ, ләкин тормош сифаты ныҡ үҙгәргән буласаҡ. Әгәр кеше 3-сө үлсәмдә икән, ти (хәҙер беҙ барыбыҙ ҙа өсөнсө үлсәмдә йәшәйбеҙ), ә кемдер дүртенсе үлсәмдә - улар бер-береһен күрә аласаҡ. Ләкин тирбәлештәре төрлө буласаҡ.

Кемдер 4-се үлсәмгә күсеп, ҡайһы берәүҙәр хәҙерге 3-сө үлсәмдә тороп ҡала, тип хәүефләнергә ярамай. Сөнки 4-се үлсәмдә нимәне күҙ алдына килтерәһең, шул барлыҡҡа килә. 3-сө үлсәмдәгеләр кешегә насарлыҡ эшләргә ярамай, яманлыҡ ҡылырға ярамай, насар уй уйларға ярамай, насар һүҙ әйтергә ярамай икәнен аңлаясаҡ, йәғни баштарына аң тиҙерәк барып етәсәк. Туғандары 4-се үлсәмгә күскәс, уларҙың күҙҙәрендәге шатлыҡ, гел йылмайып тороуҙарын күреп, улар үҙҙәре лә бик тиҙ үҙгәрә башлаясаҡ. Ә 4-се үлсәмдәгеләр башҡаларға күтәрелергә ярҙам итәсәк. 4-се үлсәмгә күсеүселәр суфыйҙар (Зәйнулла ишан, Мөжәүир хәҙрәт һ.б.) кеүек ағас бейеклегенә күтәрелә, бәйғәмбәрҙәр (Ғайса, Муса) кеүек һыу өҫтөнән дә батмай йөрөй аласаҡ.

Әле күптән түгел генә, ошо уҡ Зәйнулла ишан йәшәгән йылдарҙа, халыҡ мөғжизәгә ышанған, һәм был ғәжәп тә тойолмаған. Фәнни телдә әйткәндә инде, ул ваҡытта кешенең ДНК-һы тулыһынса тиерлек магнит яҙмалы булған. Һуңынан инде радиоактив һәм электр энергиялары тормошобоҙға яйлап үтеп инеп, магнит полеға яйлап радиоактив электр полелары кире йоғонто яһаған һәм ҡасандыр бар нәмәгә һәләтле кеше үҙенең һәләттәрен юғалтҡан. Уларҙың күрһәткән мөғжизәләрен беҙ хәҙер кирәмәттәр, тибеҙ, ә бындай кешеләр электән үк тормоштағы донъялар үлсәмен белгән һәм аңлаған. Һәм был яңы ғына уйлап сығарылған яңылыҡ түгел. Күк ҡабағы асыла тигәнде ишеткәнегеҙ бармы инде. Кеше 4-се үлсәмгә күскән саҡта ошо күренеш барлыҡҡа килә лә инде.

### Ахырызаман, донъя ахыры... Көтөргәме, юҡмы?

Беҙҙең Ер планетаһы 21 декабрҙә Плеяданың Урта ҡояшы тирәһендә ҡояш менән бергә 25920 йылды әйләнеп бөттө. Плеяданың Урта ҡояшы Ер менән бергә Галактиканың Урта ҡояшы тирәһендә 125 млн цикл үтеп, шул датаға килеп туҡтай. Шунан беҙҙең Галактика Йыһандың



## 24 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Женский доктор". Сериал (16+)"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время" (16+)
21.30 "Любопытная Варвара", 1-я и 2-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (16+)
01.10 Ночные новости
01.30, 03.05 "Рождество с неудачниками" (12+)
03.00 Новости
03.25 "24 часа"
04.15 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.35 "Сваты-4", 7-я и 8-я серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Сваты-5", 1-4-я серии. Сериал (12+)
01.40 "Девчата" (16+)
02.15 "Вести+"
02.35 "Ниндзя". Остросюжетный фильм (16+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
08.05 "Рухи семәрҙәр". Хәлит Фәтихов
09.05 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар
10.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар"
11.00 "Саллы ҡошо". Нәфис фильм (1-се бүлек)
12.50 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары
13.00 "Һандуғастар төйәге"
14.00 "Автограф". Ирек Кинйәбулатов
15.00 Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 18.45 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Новости недели" (на русск. яз.)**
**12.15 "Полезные новости" (12+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Кондалек" (6+)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Царь горы" (6+)**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.15 "Создай свое дело"**
**17.45 "Мужской телевизионный клуб "Арслан" (16+)**
**19.00 "Еду я в деревню"**
**19.45 "Выиграй квартиру на БСТ" (12+)**
**20.00 "Разговор с властью. Прямой эфир с К. Б. Толкачевым"**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**23.00 Художественный фильм (16+)**

## 25 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Женский доктор". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Любопытная Варвара", 3-я и 4-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.25 "Задиры" (16+)
01.35, 03.05 "Рождество". Комедия (16+)
03.00 Новости
04.00 "24 часа"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.35 "Сваты-4", 9-я и 10-я серии. Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Сваты-5", 5-7-я серии (12+)
00.40 "Сваты. Жизнь без грима: Николай Добрынин" (16+)
01.35 "Вести+"
02.00 "Честный детектив" (16+)
02.35 "Эльф". Комедия (12+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
08.00 "Рухи семәрҙәр. Башҡортостанда тыуғандар"
09.00 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүҙәре
09.30 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (Оҙон көй)
09.45 "Илһам". Милли мызыка ҡоралдары яңғырауы
10.20 "Кәмит". Юмор
11.00 "Саллы ҡошо". Нәфис фильм (2-се бүлек)
12.50 "Таныш көйҙәр, таныш тауыштар. Ретро"
13.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар
13.20 "Һандуғастар төйәге"
14.00 Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы" (6+)**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Отдел культуры" (6+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.15 "Салям+" (12+)**
**14.45 "Тэмле" (на баш. яз.)**
**15.15, 17.45 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Книга сказок" (6+)**
**16.00 "Борсак"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Здоровое решение" (12+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Уткан гумер. 1960-е годы" (16+)**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сенгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.00 Художественный фильм (16+)**

## 26 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброгого здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Женский доктор". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак", 48-я серия (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Любопытная Варвара", 5-я и 6-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.25 "Белый воротничок" (16+)
01.15, 03.05 "Как Гринч украл рождество" (12+)
03.00 Новости
03.15 "Капитуляция Дороти" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 11-я и 12-я серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Сваты-5", 8-10-я серии (12+)
00.30 "Сваты. Жизнь без грима: Федор Добронравов" (16+)
01.30 "Вести+"
01.55 "Двенадцать стульев"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.40 "Таныш көйҙәр, таныш тауыштар. Ретро"
08.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар"
08.45 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар
09.15 "Һандуғастар төйәге"
10.00 "Йәштәр тауышы". Йәш йырсыларҙың клиптары, йырҙары
11.00 "Саллы ҡошо". Нәфис фильм (3-сө бүлек)
11.50 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар
12.05 "Таныш йырҙар, таныш тауыштар. Ретро"
13.30 "Йәштәр тауышы". Йәш йырсыларҙың клиптары, йырҙары
14.00 Концерт. Гөлдәр Ишҡыуатова
15.00 Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Лица времени" (6+)**
**12.30, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Унган килен" (16+)**
**13.25 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд**
**16.00 "Семэр"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Семь жемчужин" (12+)**
**17.00 "Создай свое дело" (12+)**
**17.45 "Алтын тирмэ"**
**18.45 Чемпионат и первенство России по борьбе куреш-2012 (6+)**
**19.00 "Судебной системе Республики Башкортостан - 90 лет" (12+)**
**19.15 Болей за хоккей. ЧМ по хоккею среди молодежных команд**
**19.30 Торжественная церемония открытия ЧМ по хоккею среди молодежных команд**
**20.00 ЧМ по хоккею среди молодежных команд**
**23.15 Молодежный чемпионат мира по хоккею - 2013**

## 27 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Женский доктор". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Любопытная Варвара", 7-я и 8-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.25 "Гримм", 1-4-я серии (16+)
01.15 "Один прекрасный день". Драма (16+)
03.00 Новости
03.05 "Мальчишки из календаря" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.35 "Сваты-4", 13-я и 14-я серии. Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Сваты-5", 11-13-я серии (12+)
00.40 "Сваты. Жизнь без грима: Татьяна Кравченко" (16+)
01.35 "Вести+"
02.00 "Двенадцать стульев". Сериал

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар
08.30 "Моң илсеһе". Венер Камалов
10.00 "Һандуғастар төйәге"
11.00 "Саллы ҡошо". Нәфис фильм (4-се бүлек)
11.50 "Һандуғастар төйәге"
12.10 "Таныш көйҙәр, таныш тауыштар. Ретро"
13.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар"
14.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Фидан Ғафаров
16.00 Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.35 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Лица времени. К. Скворцов" (6+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Автограф. Зигат Султанов"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Галямат донья"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "ФК Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**17.15 "Создай свое дело" (12+)**
**17.45 "Бахетнама"**
**18.45 "Инсан. Памяти Дикката Буракаева" (6+)**
**19.30 Болей за хоккей. Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд**
**19.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция**
**23.00 "КВН. Высшая Уфимская лига. Финал" (16+)**

## 28 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым
16.10 "Женский доктор" (16+)
17.00 "Жди меня" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "КВН" (12+)
23.50 Ночные новости
00.15 "Элементарно". Сериал (16+)
01.10, 03.05 "Приключения Посейдона". Драма (16+)
03.00 Новости
03.35 "Микки: однажды под Рождество"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.55 "Мусульмане"
09.05 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Кровинушка", 229-я и 230-я, закл. серии
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.15 "Вести ПФО"
17.35 "Сваты-4", 15-я и 16-я, закл. серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Сваты-5", 14-16-я, закл. серии (12+)
00.40 "Сваты. Жизнь без грима: Олеся Железняк" (16+)
01.40 "Красавец-мужчина". Музыкальная комедия
04.20 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар"
08.30 "Һандуғастар төйәге"
09.30 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүҙәре
09.45 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар
10.00 "Һандуғастар төйәге"
10.30 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы
11.00 "Саллы ҡошо". Нәфис фильм (5-се бүлек)
11.50 "Моң илсеһе". Фәрүәз Урманшин
13.00 "Ҡыҙыҡ - мәҙәк". Концерт
14.00 "Моңло аҙан". Мөнәжәттәр
14.30 "Музыкаль ҡумта". Әлим Ҡәйүмов
15.00 "Таныш көйҙәр, таныш тауыштар. Ретро"
15.30 "Рухи семәрҙәр". "Мөхәббәтле парҙар" концерт
16.00 Блоҡты ҡабатлау
19.00 Ҡотлауҙар

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Галямат донья"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30 "Новости" (на русск. яз.)**
**11.45 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**12.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Унган килен" (16+)**
**13.25 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция. Финляндия - Чехия**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Байтус" (6+)**
**16.45 "Любимое дело" (12+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**17.45 "Учим башкирский язык"**
**18.00 "Йома"**
**19.45 "Автограф" (6+)**
**19.30 Болей за хоккей. Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд**
**19.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция**
**23.15 "Дарман" (12+)**
**00.00 "Смелая музыка" (16+)**

## 29 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Две жизни Всеволода Абдулова"
16.10 "Новогодний детектив" (12+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Что? Где? Когда?"
23.05 "Мульт личности"
23.30 "Голос". Финал. Прямой эфир (12+)
01.35 "Вечерний Ургант" (16+)
02.30 "После школы". Музыкальный сериал (12+)
03.30 "Хороший год". Мелодрама (16+)

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России"
09.00 "Джентльмены удачи". 40 лет спустя"
09.45 "Новогодние сваты". Комедия (12+)
11.00 "Вести"
11.10 "Новогодние сваты" (12+)
11.45 "Сваты-1". Сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.10 "Сваты-1". Продолжение (12+)
14.50 "Сваты-2" (12+)
17.10 "Танцы со звездами". Гала-концерт
20.00 "Вести"
20.25 "Во саду ли, в огороде". Мелодрама (12+)
00.00 "Пряники из картошки". Мелодрама (12+)
02.25 "Горячая десятка" (12+)
03.40 "Эта веселая планета". Музыкальная комедия

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.45 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы
08.00 "Һандуғастар төйәге"
08.30 "Тылсымлы ҡурай"
09.30 "Ретро"
10.45 "Күстәнәс". Сит телдәрҙәге йырҙар
11.15 "Саллы ҡошо". Нәфис фильм (6-сы бүлек)
12.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар"
13.00 "Һандуғастар төйәге"
14.00 "Автограф". Гөлфиә Юнысова
15.00 Блокты ҡабатлау
19.00 "Йондоҙло сәғәт"
22.00 "Моң илсеһе". Альберт Салауатов

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 "Тамыр представляет…"**
**11.45 "Следопыт"**
**12.00 "Позывной "Барс"**
**12.15 "Полезные новости" (12+)**
**12.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**14.00 "Распахнись, душа!"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Президентская елка - 2012"**
**16.30 "Создай свое дело" (16+)**
**16.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**17.15 "Здоровое решение" (12+)**
**17.45 "Бизнес-обзор" (12+)**
**18.00 "Хазина" (12+)**
**18.30 "Кондалек. Новогодний выпуск"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 Болей за хоккей. Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд**
**19.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция. Германия - Россия**
**22.30 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)**
**23.15 Молодежный чемпионат мира по хоккею - 2013. Латвия - Швеция**

## 30 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Секретная служба Санты"
06.30 "За двумя зайцами"
08.00 "Операция "С Новым годом!" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Пока все дома"
11.00 "Голос". На самой высокой ноте" (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Голос". Финал (12+)
14.25 "Зима в Простоквашино"
14.40 "Каникулы в Простоквашино"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Бедная Саша". Комедия
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.40 Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон" (12+)
21.00 "Воскресное Время"
22.10 Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон" (12+)
23.25 "Познер"
00.25 "Смерть негодяя". Триллер (16+)
02.45 "Серебряная стрела" (16+)
05.00 "С Рождеством, от всего сердца!"

### РОССИЯ 1

05.40 "Добрая подружка для всех". Лирическая комедия (12+)
07.35 "Хорошо сидим!" Комедия
09.00 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
09.30 "Утренняя почта"
10.10 "Сто к одному"
11.00 "Вести"
11.10 "Фокус-покус. Волшебные тайны". Док. фильм
12.10 "В полдень на пристани". Мелодрама (12+)
14.00 "Вести"
14.10 "В полдень на пристани". Продолжение (12+)
16.10 "Гюльчатай" Мелодрама (12+)
20.00 "Вести недели"
20.25 "Гюльчатай". Мелодрама. Продолжение (12+)
00.00 "Ночной гость". Мелодрама (12+)
02.05 "Сашка, любовь моя". Сериал (12+)

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.45 "Илһам". Милли музыка ҡоралдарының яңғырауы
08.00 "Һандуғастар төйәге"
09.15 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүҙәре
10.00 "Сәйхәт". Алмас Әмиров
10.45 "Таныш көйҙәр, таныш тауыштар. Ретро"
11.00 "Саллы ҡошо". Нәфис фильм (7-се бүлек)
11.50 "Йырым - юлдашым". Юлай Үҙәнбаев
12.30 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар
12.45 "Йырҙарыбыҙ һеҙҙең өсөн". Вилдан Яруллин
13.00 "Һеҙҙең өсөн". Күңелле йырҙар
14.00 "Моң илсеһе". Сәғиҙулла Байегетов
15.00 Блокты ҡабатлау
19.00 "Ваҡыт арбаһы". Музыкаль фильм
22.00 "Иң бәхетле көнөм". Нәфис фильм

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.45 "Салям+" (12+)**
**09.00 "Уткан гумер". "Новогодние огоньки" на Башкирском телевидении" (12+)**
**10.00 "Бахетнама. Награждение победителей конкурса"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан" (16+)**
**12.00 "Семэр"**
**12.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.45 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**13.15 "Дарю песню"**
**15.00 Болей за хоккей. Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд**
**15.15 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Канада - США**
**17.55 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Чехия - Латвия**
**20.30 "Отдел культуры" (12+)**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40. Прямой эфир**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.)**
**22.00 "Вечер.com" (12+)**
**22.45 "Уфимская волна" (12+)**
**00.15 "Создай свое дело" (12+)**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СТӘРЛЕТАМАҠ БАШҠОРТ ДРАМА ТЕАТРЫ - БЕҘҘӘ ҠУНАҠТА






**Горизонталь буйынса:** 1. Немец танкына "әйләнгән" сыбар ҡаплан. 3. Кешенең эсәгенә төшөп, ҡан һурып ята торған паразит. 6. Сиртеп уйнай торған оҙон тотҡалы ҡыллы музыка ҡоралы. 11. "Дуҫыңды ҡара: (...)е ҡалмаһын; дошманыңды ҡара: серенде алмаһын". 12. Шешәнән башҡа бөтә нәмәне емерә ала. 13. "Ҡамыты булһа, (...)ы табылыр". 14. Түҙемлек бөтөп, хәлдән тайғанда нимә ҡорой? 21. Уны ләғәлигә ултырталар. 26. Эш буйынса төҙөлгән килешеү. 28. Киле, ялғаш кеүек нәмәләрҙең эсен юна торған йомро йышҡы. 29. Ниҙе лә булһа раҫлап яҙған документ. 34. Ылыҫлы ҡыуаҡ. 35. Шимпанзе йәки горилла. 36. Скиф ҡылысы. 37. "Динленең өмөтө - (...)ҙә, мулланың өмөтө - түрҙә". 39. "(...) ямғыр теләй, юлсы аяҙ теләй". 42. Энцефалит бөжәге. 47. Берәй нәмәнән ваҡытлыса файҙаланыу хоҡуғын раҫлаған документ, элек уны абуна тип йөрөткәндәр. 50. Ирҙең ағаһы. 55. Боронғо кельт жрецы. 56. Йәннәт баҡсаһы. 57. Был бейеүгә Аргентинала һәйкәл бар. 58. Ауыҙ эсенең эске өлөшө. 59. Берәй эштә оҙаҡ йылдар эшләгән тәжрибәле кеше.

**Вертикаль буйынса:** 1. Ҡапыл байып киткән йолҡош. 4. Игенсенең консультанты. 5. Химик матдә. 7. Арҡа һөйәгенең бер өлөшө. 8. Мирхәйҙәр Фәйзиҙең комедияһы. 9. Яҡшы итеп ҡыҙҙырылған сифатлы ит киҫәге. 10. Йәш ҡайын. 16. Оҫта эшләнгән мутлыҡ, фокус. 17. Эшкә уңғанлыҡ. 19. Театрға билетты ҡайҙа һаталар? 20. Брегет нимә ул? 22. Яҙ башы. 23. Европаны Азиянан бүлеп торған һырт, йылға. 27. Баш ҡалаға әйләнгән аҙна көнө. 28. Судта кем прокурорға ҡаршы сығыш яһай? 30. Бер тәкә ҡайҙан китһә, бар (...) шунан китә. 32. Тупраҡ, балсыҡтан өйөп яһалған нығытма; үр. 33. Ҡыҙыл, һары йәшел төҫтәге балсыҡлы тау тоҡомо, бәғзеләр уны Учалыға исем биргән, тип иҫәпләй. 38. Аныҡ билдәләнгән эш, ял, аш, йоҡо тәртибе. 40. Арлан йәки орғасы мал өсөн. 41. Зодиактағы үрмәксе. 43. Үгәй атай. 44. Кәүҙә торошо. 46. Көрән төҫтәге аҫыл тиреле, кимереүсе ер-һыу йәнлеге. 48. Насар теләк, ҡарғыш. 49. Буддистың донъянан ваз кискән хәле. 51. Йыртҡыс балыҡ. 53. Гастроль сәйәхәте. 54. "Этҡә типһәң, (...) мырҡылдай".

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**50-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Амфитеатр. Фармацевтика. Аманат. Әйтем. Һөнәр. Саранча. Тимер. Күгәрсен. Регби. Ҡарауылсы. Пират. Зөбәржәт. Оло. Таба. Атлетика. Фут. Регулятор. Аспид. Аҡсарлаҡ. Ҡауын. Йоҡо. Домино. Мәсхәрә. Урарту. Тундра. Зарурат. Оҙон. Енәйәтсе. Йомош. Һыуһар. Ратуша. Фатиха. Ҡоҙа.

**Вертикаль буйынса:** Осор. Саркофаг. Урман. Талпан. Асырт. Йома. Афәт. Флаг. Һарына. Радио. Хореограф. Аҙман. Әрнеш. Тәртип. Илек. Һауа. Әләм. Ҡурайсы. Ураҡ. Аристократ. Азот. Мәркәз. Астра. Европа. Өмөт. Ҡарбуз. Лотос. Әтәлге. Алатыр. Төйөр. Жюри. Линкор. Талант. Ҡиәфәт.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 декабрь 11.00, 14.00 "Үҙ йөрәгеңде тыңла!"** (Г.Андерсен), әкиәт

**19.00 "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**24 декабрь 12.00, 15.00 "Алтын асҡыс"** (А.Толстой), музыкаль мажара

**25 декабрь 11.00, 14.00 "Алтын асҡыс"** (А.Толстой), музыкаль мажара

**26 декабрь 11.00, 14.00 "Үҙ йөрәгеңде тыңла!"** (Г.Андерсен), әкиәт

**27 декабрь 11.00, 14.00 "Үҙ йөрәгеңде тыңла!"** (Г.Андерсен), әкиәт

**28 декабрь 11.00, 14.00 "Алтын асҡыс"** (А.Толстой), музыкаль мажара

**29 декабрь 11.00, 14.00 "Үҙ йөрәгеңде тыңла!"** (Г.Андерсен), әкиәт

**30 декабрь 11.00, 14.00 "Алтын асҡыс"** (А.Толстой), музыкаль мажара

**19.00 "Һаумы, Яңы йыл!"** байрам тамашаһы

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**"Чиполлино"** (Д.Родари), әкиәт

**23 декабрь 11.00, 15.00**

**24-30 декабрь 11.00, 13.00**

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24-30 декабрь 10.00, 13.00, 15.00 "Урал батыр һәм өс баһадир"** ғаилә өсөн Яңы йыл мюзиклы

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Башҡорт дәүләт филармонияһы тамашасыларҙы үҙенең сағыу концерттары, ҡабатланмаҫ кисәләре менән әленән-әле шатландырып тора. Яңы йылда ла тамашасыларҙы күркәм бүләк менән ҡыуандырмаҡсы коллектив. Быйыл ғына филармонияның художество етәксеһе вазифаһына тәғәйенләнгән йәш режиссер Илшат Фәхертдинов сәнғәт һөйөүселәргә "Урал батыр һәм өс баһадир" исемле мюзикл тәҡдим итә. "Бындай үҙенсәлекле Яңы йыл мюзиклы ҡуйыу идеяһы ҡайҙан килеп тыуҙы?" тигән һорау менән Илшат Мәғәфүр улына мөрәжәғәт иттек.**

- Балаларҙың башҡорт һәм урыҫ әкиәттәрендәге яратҡан персонаждарынан торған музыкаль спектакль ҡуйыу теләге менән мин күптән янып йөрөй инем. Башҡорт һәм урыҫ телендә аралаштырып һөйләшә тамашалағы геройҙар. Был башҡа милләт балаларында башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уятыусы сара ла булыр тип уйлайым. Урыҫ батырҙары тураһында күп йәнһүрәттәр төшөрөлгән, ә Урал батыр менән тик мәктәптә генә танышыу мөмкинлеге бар. Бығаса таныш булған өс баһадир менән бер рәттән, халҡыбыҙҙың батырын да күрһәтеү кескәйҙәрҙә фольклор менән ҡыҙыҡһыныу, милли патриотик хис тәрбиәләүгә булышлыҡ итер, тигән ниәт менән ошондай эшкә тотондом да инде.

Ғөмүмән алғанда, бөтә ғаилә өсөн эшләнгән тамашалар бик аҙ. Беҙҙең заманда балалар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ата-әсәләрен тик кисен эштән һуң ғына күрә ала. Шулай уҡ яңы йылдың ғаилә байрамы икәнен күҙ уңында тотоп, мюзиклды олоһо ла, кесеһе лә ял итерлек итеп эшләргә булдыҡ. Кисә ата-әсәләр ҙә, балалар ҙа аңларлыҡ юморға ҡоролған.

**Наҙлыгөл АҘНАБАЕВА.**

ТАМАШАСЫ ФЕКЕРЕ

# БӘХЕТ ТУРАҺЫНДАҒЫ ҺОРАУ...

## һауала эленеп ҡалдымы?

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ошо көндәрҙә "Руди..." тип аталған спектакль-фараздың премьераһы булды. Спектаклдә бөтөн донъяға билдәле балет сәнғәте генийы яҡташыбыҙ Рудольф Хәмит улы Нуриевтың ижад һәм тормош юлына байҡау яһалды.**

Был байҡау бөйөк артистың күңел трагедияһын асып биреүгә, уның ҡатмарлы тормош юлын һәм ижади ҡомарын сағылдырыуға бер матур ғына ынтылыш булды. Һәм шуныһы ҡыуаныслы: ярым балеттан торған сәхнә әҫәре аша Рудольф Нуриевтың тормош юлын ғына түгел, хатта ҡатмарлы ижад юлын да асыуға юғары кимәлдә өлгәште сценарий авторы һәм режиссер Айрат Абушахманов та, төп ролде башҡарыусы Урал Әминев та, спектаклдә ҡатнашыусы башҡа артистар ҙа.

Спектаклдән һуң данлыҡлы бейеүсе һәм балетмейстер Хашим Мостаев менән фекер алышҡан саҡта, ул былай тине:

- Нуриевтың ҡатмарлы характерын асып бирә алды бит егет! Ғәжәпкә ҡалып ҡарап ултырҙым. Ғөмүмән, драма театры артистары ныҡ һоҡландырҙы һәм балет хәрәкәттәрен оҫта башҡарыуҙары менән аптыратты мине. Күп яҡлы талант эйәләре тупланған театрҙа...

Хашим Мостаевтың бындай баһаһы ҡыуандырҙы, сөнки ул үҙе балет артисы, балетмейстер ғына түгел, ә уға, Санкт-Петербургтағы Мария /элекке Ленинградтағы Киров исемендәге/ опера һәм балет театрында эшләгәндә Рудольф Нуриев менән бер сәхнәлә сығыш яһау, аралашыу бәхете тейгән.

Театр режиссеры Айрат Әхтәм улы, үҙе үк сценарий авторы һәм режиссер булараҡ, сәхнә мөмкинлектәрен оҫта файҙаланып, заманса тамаша ҡуйыуға өлгәшкән, символикалар (ябыҡ йәки шар асыҡ ишектәр, икеләнеүле күңел донъяһын сағылдырған ике ишекле аҡ бүлмә), ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына, әммә кинәйәле һәм тәрән мәғәнә йомған телмәрҙәр, видеопроекция, һәр осорға хас кейем аша тамашасыға Рудольф йәшәгән ҡатмалы осор фажиғәһен, уның сит илдә тороп ҡалыуы арҡаһында атаһы менән әсәһе дусар ителгән хәтәр яҙмышты, әсәһенең ғүмере буйы уның хаҡында борсолоп уйланыуын бирә алған. 1988 йылда ауырыу әсәһе менән хушлашырға ҡайта Рудольф Өфөгә. Егерме ете йылдан һуң күрешә улар шулай. "Һин тегендә бәхетлеме?" тип һорай әсәһе улынан. "Эйе..." тип яуап бирә улы тоноҡ ҡына тауыш менән, әммә күҙҙәрендә йәш бөртөктәре күренә...

Кешелек донъяһы уйлап сығарған ҡалыптарға һыймаҫ холоҡло таланттар була. Уларҙы тик дауыл, йәшен, йондоҙ атылыуы кеүек тәбиғәт күренештәре менән генә сағыштырырға мөмкиндер. Ундай таланттарҙың күңел ашҡыныуын хатта үҙ йөрәктәренең аҡылы ла тыя алмай, тәбиғәттән һалынған ижад ҡомары тик юғарыға, тик осошҡа талпындыра, бейеклеккә әйҙәй. Ә инде рухи иреклеккә юл асылғас, талант шундай итеп балҡый - уның сағыулығы, баҙыҡлығы һоҡландыра, ғәжәпләндерә, ә күңелдәргә: "Кеше мөмкинлеге сикһеҙ, бер урында тапанмағыҙ, камиллыҡҡа ынтылығыҙ, үрҙәргә артылығыҙ, осоштарҙан туймағыҙ, ваҡлыҡтарға күмелеп ҡалмағыҙ!" - тигән өмөт һала, йоҡомһорағандарҙы уята, дәртһеҙҙәрҙе ҡуҙғыта, ғәмһеҙҙәрҙе сәмләндерә, битарафтарҙы уйландыра. Тәбиғәт ярһыу йөрәкле таланттарҙы шуның өсөн яраталыр ҙа...

Әммә кеше булып тыуғанһың икән, һин - ер кешеһе, әҙәм балаһы. Йәшәгән йәмғиәтең, ғаиләң, һине яҡты донъяға бар иткән атай-әсәйең, туғандарың бар. Улар бар икән, тимәк, һинең тормошоң талпыныуҙарҙан, осоштарҙан һәм алҡыштарҙан ғына тормай, һәр кемгә хас хис-тойғоларың да, тәбиғи һағыныуҙарың да өйкәй бәғереңде, йөрәк башҡайына ҡан һауҙыра.

Тыуған иленән, яҡындарынан айырылған кешене бер ни ҙә: утрауҙар һатып алырлыҡ байлыҡ та, бөтөн донъя тамашасылары баш эйерлек дан да бәхетле итә алмай. Бәхет төшөнсәһе фәҡәт балҡыуҙарҙан ғына туҡылмай, әҙәмсә тойғоларҙан да үрелә. Әгәр Рудольф Нуриев таланты үҙ илебеҙҙә балҡыш алһа, ижад ҡомарын ҡандырырлыҡ мөмкинлек үҙ илебеҙҙә тыуҙырылһа, донъяға билдәлелек тыуған төйәгенән башланһа, әсәле-уллы Нуриевтар бындай ауыр ҡайғы-һағышҡа дусар булмаҫ ине һәм "Һин унда бәхетлеме?" тигән һорауға яуап һауала эленеп ҡалмаҫ ине... Төп геройҙы башҡарыусы Урал Әминев һәм спектаклдә ҡатнашҡан һәр артист, һәр хеҙмәткәр ошо хәҡиҡәтте тамашасыға ғәжәп оҫталыҡ менән еткерә алды.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Үҙ шәхестәребеҙ тураһында ҡуйылған фәһемле спектаклдәрҙең ни өсөндөр ғүмере ҡыҫҡа була. "Февраль.. Буран"ды ла (халыҡтың иң яратҡан шағирҙарының береһе Рәми Ғарипов тураһында) тамашасы яратып ҡабул иткәйне. Әле ул репертуарҙа юҡ. "Руди"ҙың да яҙмышы шулай булмаһын ине. Ә бит йәштәребеҙҙең күбеһе бөтөн донъяға билдәле шәхестәребеҙҙең кем икәнлеген дә белмәй ( спектакль барышында видеопроекцияла сағылдырылды). Спектаклдәрҙең ғүмерен оҙайтыу буйынса һыналған отошло саралар бар. Бынан егерме йылдар элек ҡайһы бер спектаклдәргә ауылдарҙан культпоходтар сиратлап ойоштороla торғайны. Бөгөнгө көндә лә тәрбиәүи әһәмиәтле, уйландырырлыҡ тамашаларға халыҡты, бигерәк тә район халҡын, йәлеп итеүҙә ошо ысулды уңышлы ҡулланып булалыр, моғайын.**

**Зилә САБИРЙӘНОВА.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТТЫҢ ШӘБЕ - КЕШЕЛӘ,

## ҡатын шәбе - күршелә

Йәшем етте ҡыр(ы)ҡҡа, эшем китте шырыҡҡа.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡылдың бик аҙы ғына тотоноуҙан туҙа, күп өлөшө ҡулланылыш тапмай тутыға.

**(Каролина Бови).**

Өлкән кешегә сабырлыҡ матурлыҡ өҫтәй.

**(Поль Эллиот).**

Яуызлыҡ уның менән көрәшһендәр өсөн булдырылған, ә көйәнтәгә элеп үлсәр өсөн түгел.

**(Иосиф Бродский).**

Күп идеялар бер кеше аңындағыға ҡарағанда, күптәр аңына күсереп ултыртҡанда яҡшыраҡҡа, камилыраҡҡа әйләнә.

**(Оливер Холмс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер уҡытыусының фәлсәфә һатырға, үҙен ижади эҙләнеүсән кеше итеп күрһәтергә тырышыусы шәкерте була. Бер саҡ Алла тураһындағы уйҙарға сумып ултырған был шәкерткә бик ныҡ мохтажлыҡ кисергән бер фәҡир мөрәжәғәт итә. Шәкерт уны тыңлап та тормаҫтан, "Алла ярҙам итер", ти ҙә, уйланыуын дауам итә. Фәҡир кеше уны борсоғаны өсөн ғәфү үтенә һәм ары китә. Шунан был фәҡир эргәһенә үҙенең ярҙамын тәҡдим итеп, икенсе бер кеше йүгереп килә.**

**Был хәл тураһында уҡытыусыһы ишетеп ҡала һәм шәкерте янына килеп, шулай тип телмәр тота: "Күрәһең, был фәҡир һинән ярҙам һорағанда йөрәгеңдә Алла булмағандыр. Алла һәм Уның һөйөүе был фәҡиргә ярҙам итергә тип йүгереп килгән кешенең йөрәгендә ҡунаҡта булғандыр. "Алла ярҙам итер", тип дөрөҫ әйткәнһең, теге кеше йөрәгендәге Алла үҙенең Һөйөүе аша изгелек тыуҙырған һәм ул кешенең ҡулдары менән фәҡиргә ярҙам иткән. Ә бит ул ярҙам итеүсе Алланы эҙләп, көн-төн баш ҡатырып, уйланып та ултырмаған, сөнки Алла уның йөрәгендә урынлашҡан. Әммә ул быны хатта белмәй ҙә. Улар Уның менән баш һәм тән кеүек үк бер бөтөн, баш күрә, ишетә, уйлай һәм нимә эшләргә икәнен күрһәтә, ә тән шуны үтәй. Ә һин Алла хаҡында көндәр буйы уйланып ултырһаң да, Уның менән бер бөтөн булыуға өлгәшә алмағанһың. Шуны хәтереңдә тот: мохтаж кеше менән осрашҡанда кем күҙҙәрен ситкә күсермәй, үҙенең йөрәген бикләмәй, ҡулдарын йоҙроҡҡа төйнәмәй, ярҙам һорап ҡысҡырған тауыш ишеткәндә ҡолаҡтарын ҡапламай, шул саҡта ғына йөрәгең менән Хоҙайҙы күрә, Унан килгән хәбәрҙе ишетә, Ул ебәргән бүләкте тоя алаһың. Башҡалар мохтажлығына күҙҙәрен йомған кеше үҙенең эргәһендә торған Хоҙайҙы ла күрмәйәсәк..."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 5043